ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

6-12 июнь (һөтай) 2015

№23 (649)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

ЗОЛОТОЙ ФОНД ПРЕССЫ 2015

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Кәм күңелгә әйләнеп бөттөкмө?**



3

**Матур йәшәү өсөн...**



йәмле мөхит тә кәрәк

6

**Меркатор картаһында...**

Башҡорт ҡалаһы күрһәтелгән



7

**Туберкулез - ҡурҡыныс сир,**



тик ниңәлер халыҡ унан ҡурҡмай...

8-9

**ТВ-программа** 14

***Бер ҡыҙ бала мәктәптә "бишле" билдәһе ала, ә икенсеһе "икеле" эләктерә. Тәүгеһе шатлығынан һикерә-һикерә йүгереп килә торғас, йығылып, аяғын имгәтә. Икенсеһе башын түбән эйеп кенә өйөнә йүнәлә һәм аҡсалы кошелек табып ала. Аҡыл шул: тормошта булған бар ваҡиғалар ҙа үҙ артынан башҡа ваҡиғаларҙы эйәртә икәнен иҫтә тотоп, юҡҡа-барға көймә, һәм шатлыҡ-еңеүҙәрҙән дә башың әйләнмәһен...***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Михаил Горбачев индергән "коро закон" хата булды тип таныйһығыҙмы?

***Азамат ҠАШҠАРОВ, Баймаҡ районының табип-наркологы, психиатр:*** Был турала яңыраҡ "Комсомольская правда" гәзите хәбәрсеһе менән әңгәмәһендә Михаил Горбачев үҙе лә, был көрәште башлау кәрәк һәм дөрөҫ булған хәлдә лә, эскелекте ҡапыл тыйыу хата булды, тип таныны. Ә бит ҡапыл бөгөп, таяҡты һындырыуың да бар. Эскелеккә ҡаршы кампанияның бәләһе шул булды: ул халыҡтың бөтөнөһөн "бер сыбыҡҡа ҡыуыуға" ҡоролғайны. Йәғни башы эскенән бушамағандарға ла, әллә ниҙә бер "ҡырын тейәүселәргә" лә, бөтөнләй эсмәгәндәргә лә бер үк тыйыу һалыуҙы дөрөҫ тип раҫлап булмай ине, сөнки теләһә ниндәй ил халҡының күпмелер өлөшөн, әйтәйек, 20 процентҡа яҡынын, ниндәйҙер кимәлдә һәр төрлө психик тайпылыуҙарға: наркоманияға, эскелеккә битараф булмаған һәм башҡа шундай нормаға тап килмәгән ҡылыҡ-ғәҙәттәргә дусар ҡатлам тәшкил итә. Уларҙы дауаларға, тәрбиәләргә тырышыу, аңлылыҡҡа саҡырыу, ғәҙәттә, бер ниндәй һөҙөмтә лә бирмәй. Бында баяғыса тыйыу һәм сикләүҙәр ҡулланыу кире һөҙөмтәгә килтереүе генә ихтимал. Шуға күрә ҡалған 80 процент халыҡҡа ҡарата ла шул уҡ сараны ҡулланыуҙы маҡсатҡа ярашлы һәм дөрөҫ тип әйтеп булмай. Ләкин Горбачевтың "коро законы" дөрөҫ булманы, тип, эскелеккә ҡаршы көрәште үҙ ағышына ҡуйыу ҙа дөрөҫ түгел. Тәьҫирле, йоғонтоло саралар күрелергә, аңлатыу-иҫкәртеү эштәре әүҙем алып барылырға тейеш.

Был йәһәттән беҙҙең районда 10 койка-урынлыҡ наркология бүлексәһе асылыуын билдәләп китер инем. Эскән кеше унда барыбер килмәй, тигән ҡараш йәшәй, ләкин мин быны менән килешмәйем: койкаларҙың буш торғаны юҡ әлегә, өгөтләп тә алып киләләр, үҙ теләктәре менән дә килеп яталар, дауалананалар. Беҙ хәлдән килгән ярҙамды күрһәтергә һәр саҡ әҙер торабыҙ, аңлатыу эштәре алып барабыҙ. Үкенескә күрә, урындарҙа эскелек кәмемәй, шуныһы борсоуға һала. Айырыуса ҡатын-ҡыҙ "әүҙемләште". Шулай бер ҡыш мәлендә әлеге ун койканың һигеҙендә ҡатын-ҡыҙ дауаланып ятты. Үҙҙәре көлә: ирҙәр Себер китә, донъя беҙгә ҡала, тип... Көлөрһөң дә, иларһың да, тигәндәй инде: эсеп үлеүселәр ҙә бар. Ә бына йәштәр элеккеләй үк эсмәй, донъя ҡыуалар: аҡса эшләйҙәр, йорт һалалар, машина алалар - шуныһы ҡыуаныс. Эскән шул бер үк контингент бар - ана шулар көсөргәнеш тыуҙыра ла инде. Бына уларға ҡаршы "коро закон" ҡулланып көрәшеү яҙыҡ булмаҫ ине. Был йәһәттән иң тәүҙә ауылдарҙа кәсеп итеүсе көмөшкәселәргә ҡаршы көрәш асырға, уларҙы яҙаға тарттырыу сараларын ҡәтғиләштерергә кәрәк, тигән уйҙамын.

**(Дауамы 2-се биттә).**

"КИСКЕ ӨФӨ"НӨ УҠЫЙБЫҘ!

# КҮҢЕЛДӘРГӘ УЙ ҺАЛА

**"Киске Өфө" гәзитен Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетында ла көтөп алалар. Беҙ уны бер нисә дана алдырабыҙ, сит өлкәләрҙә йәшәгән милләттәштәребеҙгә лә ебәрәбеҙ. Сөнки гәзиттә башҡорт донъяһына - мәҙәниәтенә лә, мәғарифына ла, тарихына ла ҡағылған һәр төрлө мәғлүмәтте табып була.**

Буталсыҡ заманда, бәндә бәндәне аңлай алмай йонсоған мәлдә "Киске Өфө" гәзитендәге фәһемле фекер, донъя, тормош, милләттең хәле тураһында уйланыуҙар, кешелектең киләсәге хаҡындағы фараздар һәр кемгә файҙалылыр, тип уйлайбыҙ. Бигерәк тә баҫманың "Монолог", "Диалог" рубрикаларындағы аналитик сығыштар уҡымлы. Ҡара-ҡаршы ултырып фекер алышыуҙар донъяуи мәсьәләләрҙә генә түгел, ә сәйәсәттә, башҡа өлкәләрҙә лә уртаҡ фекергә килергә, ауырлыҡтарҙы еңеләйтергә ярҙам итә икәнен беләбеҙ. Әлеге рубрикаларҙағы сығыштар ҙа, бөтә мәсьәләләрҙе лә диалогтар аша хәл итергә кәрәк, тигәнгә ишаралай, уҡыусыға ла үҙенсә һығымталар яһата.

Ғөмүмән, "Киске Өфө"ләге рубрикаларҙың, темаларҙың төрлө булыуы йәштәрҙе лә, өлкәндәрҙе лә, хатта балаларҙы ла үҙенә ылыҡтыра. Бөгөнгө йәштәрҙең, мәктәп уҡыусыларының ниндәй маҡсаттар, уйҙар менән йәшәгәне, уларға ниндәй ҡиммәттәр яҡыныраҡ икәне тураһында беҙ, өлкәндәр, уларҙың гәзиттәге әңгәмәләре аша танышабыҙ. Мәктәпкәсә йәштәге балалар менән ойошторолған әңгәмәләр ҙә ҡыҙыҡ - улар ҙа заманса фекерләй белә, заман талаптары уларҙың да телендә.

Һәм тағы. Ошо арала "Киске Өфө"лә Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығына арналған байтаҡ мәҡәләләр донъя күрҙе. Һуғышҡа бәйле ваҡиғаларҙы, унда ҡатнашҡан геройҙарҙы беҙ киноларҙа ғына күрәбеҙ, башлыса рус телендәге китаптар аша ғына танышабыҙ. Ә "Киске Өфө"лә баҫылған мәҡәләләр беҙҙе үҙ геройҙарыбыҙ, улар ҡылған батырлыҡтар, ваҡиғалар менән үҙ телебеҙҙә, үҙ ерлегебеҙҙә таныштырҙы. Беҙ киноларҙа күргән геройҙарҙан бер ҙә кәм түгел, хатта уларҙың батырлыҡ өлгөһө байраҡ итеп күтәрерлек. Үҙ батырҙарыбыҙҙы киноларҙа күрергә күптән хыялланабыҙ ҙа бит. "Киске Өфө" халҡыбыҙҙың ана шундай тормошҡа ашыра алған, ашырырға тейешле хыял-ниәттәрен, проблемаларын күтәреүе, ул хаҡта даими аңғартып тороуы, уларҙы атҡарыу юлдары, алымдары тураһында фекер еткереүе, күңелдәргә уй, ойотко һалыуы менән ҡиммәт беҙгә.

**Рәйсә КҮЗБӘКОВА,**
**Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының сектор мөдире.**



12+

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Республика ҡалалары һәм районларының бөтә почта бүлексәләрендә лә "Киске Өфө" гәзитенә йыл әйләнәһенә яҙылып була. Әле 2015 йылдың икенсе ярты йыллығы тураһында алдан хәстәрләп, "Киске Өфө"нөң 50665 индекслыһына - 539 һум 76 тингә, 50673 индекслыһына (ойошмалар һәм предприятиелар өсөн) 569 һум 76 тингә яҙыла алаһығыҙ.**

● Республикала һәм республиканан ситтә йәшәгән һәр кемгә он-лайн яҙылыу мөмкинлеге лә бар. Унның өсөн "Киске Өфө"нөң интернеттағы **kiskeufa.ru** сайтында "Яҙылыу" тигән төймәгә баҫып, "Шәхси яҙылыусылар өсөн он-лайн яҙылыу " һылтанмаһы аша **vipishi.ru** сайтына күсергә кәрәк. Был сайтта гәзиттәргә яҙылыу ойошторолған. Бланкка үҙегеҙҙең мәғлүмәттәрҙе тултырып, банк картаһы, QIWI йәки интернет-банк аша аҡса күсерергә генә ҡала.



● **Дәртләндереү сараһын дауам итәбеҙ.** Июндең 20-ләренә тиклем гәзитебеҙгә яҙҙырып, квитанцияларын редакциябыҙға ебәргән уҡыусыларыбыҙ араһынан кемдәрҙер **Мәрйәм Бураҡаеваның "Арғымаҡ", Рәшит Назаровтың "Ер һәм йыһан йыры", Шәүрә Шәкүрованың "Өфө вокзалы", "400 башҡорт халыҡ йыры", "Антология поэзии Башкортостана", Ә. Әсфәндийәровтың "История сел и деревень Башкортостана", башҡортса "Дини календарь", Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"** китаптарын алып ҡыуаныуы ихтимал. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ?

● Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә тыуған көндәрен хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

● **"Киске Өфө" - бүләгем"** акцияһы ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

● **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

● Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog. kiskeufa.ru**.

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Өфө ҡала округы хакимиәтенең Социаль сәйәсәт идаралығы (начальнигы С.Ф. Ғәлиева) хәбәр итеүенсә, баш ҡала ветерандары "Киске Өфө" гәзитен бушлай алдырырға теләй икән, баш ҡаланың үҙҙәре йәшәгән районындағы халыҡты социаль яҡлау учреждениеларына мөрәжәғәт итә ала. Адрестар: Дим районы ветерандары - Центральный урамы, 18, тел. 281-15-56; Калинин районы ветерандары - Б. Хмельницкий урамы, 53, тел. 263-45-67; Киров районы ветерандары - Менделеев урамы, 136/2, тел. 256-51-06; Ленин районы ветерандары - Ғафури урамы, 103, тел. 251-04-35; Октябрь районы ветерандары - Зорге урамы, 31, тел. 282-55-82; Орджоникидзе районы ветерандары - Б. Хмельницкий урамы, 68/1, тел. 263-81-08; Совет районы ветерандары - Цюрупа урамы, 102, тел. 250-30-38.**

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Михаил Горбачев индергән "ҡоро закон" хата булды тип танйыйһығыҙмы?



(Башы 1-се биттә).

***Әминә ИШБИРҘИНА, хаҡлы ялдағы медицина хеҙмәткәре:*** Михаил Горбачевтың "ҡоро законы"н башкөлләй хата булды, тип әйтә алмайым. Был эште башлап ебәреү үҙе генә лә маҡтауға лайыҡ ғәмәл, батырлыҡ ине, минеңсә. Халыҡтың был сараны ҡабул итмәүе шунан булды: ул тейешле әҙерлекһеҙ башланды. Халыҡ, тигәс тә, кем эске менән дуҫ - шул тауыш күтәрҙе, ә эсмәгәндәргә унның шойҡаны әллә ни теймәне. Ҡатын-ҡыҙҙар бит Горбачевҡа рәхмәттәр генә уҡый ине. Үҙегеҙгә яҡшы билдәле, ул йылдарҙа эскелек тотош илде баҫып алғайны. Ысынлап та, артабан һуҙырға ярамағанлығын үҙебеҙ ҙә аңлап торҙоҡ, ашығыс сара күреү, ни ҙә булһа эшләү кәрәк ине. Идея биреү, эйе, етәксенән, ләкин бит уны еренә еткереп, дөрөҫ йүнәлештә ғәмәлгә ашырыу башҡарыусыларҙың сәйәси һәм, бәлки, тактик оҫталығына бәйле ине. Бөтөн был эште фәҡәт Горбачев үҙе атҡарып сығырға тейеш түгел һәм был мөмкин дә түгел ине. М.Горбачев был сәйәсәтен нигеҙҙә хата булды, тип әйтмәне бит, ә уны тормошҡа ашырыу сараларының уйланып еткерелмәүен таныны. Ә алкоголгә ҡаршы көрәш башлауҙы һис кенә лә хата булды, тип әйтеп булмай. Был йәһәттән кампанияны юҡҡа сығарыуға экс-президенттың "ярҙамсылары" ла ҡул һалманы түгел. Йәғни ил башлығына ярҙам итеү урынына уны ярҙан этеүселәр ҙә бар ине. Мәҫәлән, был хаҡта әңгәмәһендә ул Лигачев, Рыжков һәм Соломенцевты телгә алып китә. Хәтерләһәгеҙ, йөҙөм плантацияларын ҡырҙырыусы әлеге шул "аҡыллы баш" Лигачев булманымы? Министрҙар Советы Рәйесе Н.Рыжков өсөн иһә араҡы һатҡандан килгән миллиардлаған һум аҡса менән бюджетты тултырыу мөһимерәк булған: әйҙә, эсһен халыҡ, аҡсаһы ағып торһа, булды. Алкоголь һатыуҙы 14 сәғәттән 19 сәғәткә тиклем сикләү дөрөҫ булды, тип уйлайым, ә бына килеп тыуған сираттарҙы яйлау өсөн уйларға, баш ватырға, көс түгергә, етәкселек оҫталығын күрһәтергә кәрәк ине. Ә был хөкүмәт ағзаларына кәрәк инеме һуң? Һөҙөмтәлә биш йылдан һуң СССР-ҙың Министрҙар Советы хәлде яйлау буйынса артыҡ көсөргәнмәй генә алкоголь һатыуҙы сикләүҙәрҙе юҡҡа сығарып, "капитуляцияға" бирелергә мәжбүр булды.

**Ә хәҙер шул йылдарҙағы рәсми статистикаға күҙ һалайыҡ. 1985-90 йылдарҙа илдә ир-егеттәр араһында үлем - 919,9 мең, ҡатын-ҡыҙҙар араһында 436,6 мең кешегә кәмене, тыуым 500 мең сабыйға артығыраҡ тәшкил итте, улар араһында етлекмәй һәм ғәрип булып тыуған балалар һаны 8 процентҡа кәмене.**

Ошоно хата булды тип әйтергә кемдең теле әйләнер? Ҡаҙнаны тулыландырыу өсөн араҡы эсергә түгел, ең һыҙғанып эшләргә кәрәк - шуны аңламаны халыҡ. Сөнки аңлатыу эштәренән бигерәк, тыйыу, ябыу, сикләү - ҡыҫҡаһы, административ-команда ысулы өҫтөнлөк итте.

***Фәрит ӘХМӘРОВ, хеҙмәт ветераны:*** Йәшермәйем, бик күптәр кеүек үк, мин дә суфый булманым. Байрамдарҙа, дуҫтар, класташтар, туғандар менән осрашҡанда, ҡайһы саҡ эштән һуң да "зәм-зәм" һыуын күтәргеләгән саҡтар булды. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, КПСС Үҙәк Комитетының "Эскелек һәм алкоголизмды бөтөрөү буйынса саралар тураһында"1985 йыл 7 май Ҡарарын хуплап ҡабул иттем: юҡ икән - юҡ, эсмәйбеҙ ҙә ҡуябыҙ. Бигерәк шашып киткәйнек шул - ҙур байрам, юбилейҙарҙы әйтеп тә тормайым, бала тыуһа ла, кеше үлһә лә, әле мәктәпкә уҡырға ла төшмәгән балаларҙың йәшен дә араҡы менән "йыуа" инек. Араҡыһыҙ ҡыбырҙаған кеше лә ҡалмай башланы. Бындай хәлгә сик ҡуйыу, эскелекте тыйыусы берәй закон кәрәк ине. Ниһайәт, ҡабул ителде ундай документ, ләкин "ура" ҡысҡырыусы булманы: йәмғиәт быға әҙер булмай сыҡты. Горбачев күптәрҙең тере дошманына әйләнде. Шулай ҙа бик аптырап та ҡалманылар, өй беренсә тип әйтерлек көмөшкә ҡыуып эсә башланылар. Туйға әҙерләнгәндәре кәнистр тейәп, Кустанайға юлланды. "Ауырыуҙар" иһә ҡулға нимә килеп эләгә, шуны һемерҙе. Ошо тәңгәлдә бер фажиғә килә лә төшә иҫемә. Шулай бер саҡ төшөрөргә яратҡан ике дуҫ - Ниғәмәт менән Сабит дихлофос (бөжәк, себен ағыуы) эскәндәр. Сабиты шундуҡ йән биргән, ә тегеһе "Ниғәмәт - не муха!" тип урам буйлап күкрәк һуғып китеп бара, ти. Бына шундай хәлгә килеп етте бит халыҡ. Шуға ла "ҡоро закон", бөтөн билдәле етешһеҙлектәренә ҡарамайынса, дөрөҫ булды, тип ҡабатлағым килә. Тик шуныһы: ил етәкселегенә был эштә эҙмә-эҙлелек, ҡыйыулыҡ һәм бер аҙ ғына түҙемлек етмәне. Гендар кимәленә инеп оялаған был әшәкелекте юҡҡа сығарыу өсөн тиҫтәләрсә йылдар кәрәк буласаҡ ине - шуны аңларға теләмәне партия функционерҙары, уларға тиҙ һөҙөмтә кәрәк ине.

Ә ыңғай һөҙөмтәләр булды, уларын да беләбеҙ. Халыҡ араһында эскелеккә ҡаршы көрәш түгел, ә айыҡ тормош өҫтөнләгән пропагандалау, айыҡлыҡ культы булдырыу кәрәк булғандыр. Бына бөгөнгө һымаҡ. Башҡортостанда барған айыҡлыҡ хәрәкәте - бик дөрөҫ юл, тип уйлайым. Тик был нигеҙҙә йәмәғәтселек башланғысы булып ҡала килә. Мәҫәлән, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының Башҡарма комитеты эргәһендәге "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһының айыҡлыҡты пропагандалауы әллә ниндәй закондарҙан да тәьҫирлерәк, минеңсә. Бары тик ошо башланғысты дәүләт кимәлендә яҡлау һәм эшлекле ярҙам ҡулы һуҙыу кәрәк, тип уйлайым.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Өфөнөң яңыртылған "Нефтсе" стадионында "Өфө" футбол клубы уйынсылары һәм тренерҙар штабы менән осрашты. Уҙған аҙнала улар миҙгелде уңышлы тамамланы һәм Рәсәй Премьер-лигаһында урындарын һаҡлап ҡалды. Осрашыуҙа футбол миҙгеле йомғаҡтары, "Өфө" футбол клубын үҫтереү мөмкинлектәре һәм киләсәккә пландар тикшерелде.

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Башҡортостан Республикаһы ҡаҙнаһының һәм муниципаль берәмектәр бюджетының килем ҡеүәтен, һалым һәм һалым булмаған керемдәрен арттырыу мәсьәләләре буйынса ведомство-ара комиссия ултырышын үткәрҙе. Билдәләнеүенсә, апрель баштарына федераль бюджет системаһына республика биләмәһе буйынса бурыс 14, 6 миллиард һум тәшкил иткән. Республика ҡаҙнаһына бурыстар күбәйә. Республика Башлығы ҡыҫҡа ваҡыт эсендә аҡса түләмәүҙең сәбәптәрен асыҡларға ҡушты.

✓Республиканың Ауыл хужалығы министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, уҙған ял көндәрендә Әлшәй, Баймаҡ, Ҡырмыҫҡалы, Краснокама, Мәләүез, Стәрлебаш һәм Тәтешле райондарында сәсеү тамамланған. Төбәктә 1889 мең гектар майҙанда яҙғы культуралар сәселгән, был сәсеү майҙандарының 93 проценты. Бөртөклөләр һәм ҡуҙаҡлылар - 1253 мең гектар, шәкәр сөгөлдөрө - 50,08 мең гектар һәм көнбағыш 207,2 мең гектарҙы биләй.

✓Башҡортостанда 2803,5 гектар майҙанда картуф сәселгән, был бөтә майҙандарҙың 83,5 процентын тәшкил итә. Йәшелсәләр 1174,5 гектар майҙанды (85,2 процент) биләй. Республиканың 33 районында картуф сәсеү тамамланған. Төбәктең 29 районында йәшелсә ултыртыу тамамланған.

✓Иглин районы Урман ҡасабаһындағы хәрби келәттәрҙә дарыны утилләштереү ваҡытында боеприпастарҙың ағас йәшниктәре, артабан келәттәге дары янып киткән. Ҡасабанан мендән ашыу кеше Иглин ҡасабаһына һәм Надеждин, Оло Тәләк ауыл советтары биләмәләрендәге ваҡытлыса урынлаштырыу пункттарына эвакуацияланған. Ваҡиға эҙемтәләрен бөтөрөү өсөн 129 кеше, 54 берәмек техника йәлеп ителгән.

*ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...*

**Үткән быуаттың 80-се йылдар аҙағында баш ҡалабыҙ Өфөнөң Менделеев урамында архитектураһы менән дә, исеме менән дә айырылып, алыҫтан күҙгә ташланып торған мөһабәт бер бина - "Башҡортостан" сауҙа үҙәге асылды һәм тиҙ арала ҡаланың сауҙа флагманына һәм өфөләрҙең яратҡан урындарының береһенә әүерелде. Шуға тиклем ауыҙ тултырып "Башҡортостан" тип әйтерлек атаманы ҡалабыҙҙың башҡа урынында күргән дә юҡ ине, булһа ла улар "Башкирия" тип йөрөтөлдө.**



# КӘМ КҮҢЕЛГӘ ӘЙЛӘНЕП БӨТТӨКМӨ?

Ике-өс көн элек кенә әлеге "Башҡортостан" сауҙа үҙәге янынан үтеп барышлай, күҙ һалһам, бинаның элекке йәме, мөһабәтлеге әллә ҡайҙа юҡҡа сыҡҡан, ул бәләкәйләнеп, меҫкенләнеп ҡалған һымаҡ. Бәҡтиһәң, уның "Башҡортостан" тигән тажын - атамаһын алып ташлағандар, имеш. Уның ҡарауы, Менделеев урамы яғындағы ҡабырғаһына ҙур хәрефтәр менән "Башкирия" Лайф стайл центр" тип яҙып ҡуйғандар. Тәүҙәрәк, ошо сауҙа үҙәгенең популярлығы һүнеп ҡалыуы эсте бошора ине, әле унда яңыртыу, үҙгәртеп ҡороу эштәре барғанлыҡтан, Үҙәктең киләсәге матур булыр, моғайын, тигән өмөт уянды. Тик бына уның исемен алып ташлау кемгә кәрәк булды икән? Әллә уны ла яңыртып, заманса хәрефтәр менән ҡайтанан яҙып ҡуймаҡсылармы? Ә сауҙа үҙәгенең эсенә инһәәәң... Сит телдәге вывескалар араһында ҡайҙа барырға белмәй, аҙашып йөрөүҙән ҡурҡмаһағыҙ, әйҙә, килеп күрегеҙ - үҙегеҙҙе сит илдә йөрөүсе турист һымаҡ тоясаҡһығыҙ: "Fashion" галерея, "Event hall", "Kids"s style", "Ситилинк" һәм башҡа шундай атамалар менән сыбарланған салондар кемуҙарҙан саҡырып тора. Үҙегеҙ күреп тораһығыҙ: гәрсә беҙҙе ҡайһы бер тарафтарҙа бик хушһынмаһалар ҙа, ғорур халыҡ түгелбеҙ ҙә инде, төкөрөп тә бирмәйбеҙ - сит ил атамалары һәм брендтарына табыныу-һөйөүебеҙ сиктән ашты хәҙер, урам тулы. Күңел болғанып ҡуя хатта. Ғәжәп: үҙ телебеҙҙәге исем-атамалар ниәһе менән оҡшамай икән һуң ватандаштарға - шуның серенә төшөнөп булмай һис. "Крутойыраҡ" булып күренергә маташыумы был, әллә туған телде эшкә һанамаумы?

Киң мәғлүмәт саралары, интернет, телевидение **"...тел нормаларын, ябай грамоталылыҡты йыш боҙа, сит тел һүҙҙәрен нигеҙһеҙ һәм саманан артыҡ ҡуллана"**, тигәйне РФ Президенты Владимир Путин яңыраҡ ҡына, май аҙаҡтарында, Президент ҡарамағындағы Милләт-ара мөнәсәбәттәр һәм Рус теле буйынса советтарҙың берлектәге ултырышында сығыш яһап. Бик дөрөҫ һүҙҙәр, тик Президент телде боҙоусы тағы бер категория - сауҙа хеҙмәткәрҙәре хаҡында әйтергә оноткан. Дөрөҫөн әйткәндә, сит маркалар, атамалар алдында теҙләнеү күбеһенсә уларҙан башланып китте лә инде. Беҙ хәҙер магазиндарҙың урыҫса атамаһын бөтөнләй оноттоҡ, ә башҡорт телендәгеләрҙе төшөндә лә күрмәҫһең. Русса атамаларҙың башҡортса тәржемәһе күренә һирәкһаяҡ, шунда ла хатта телебеҙҙән мыҫҡыл иткән кеүек, килделе-киттеле, хаталы итеп яҙып ҡуялар. Әлеге "Башҡортостан" сауҙа үҙәге" туҡталышында һуңғы һүҙ "үҙеге" булып киткән.

Урындағы төп милләт халҡының телен һанламау бер бөгөн генә түгел, ул ғүмер-ғүмергә ана шулай "икенсе сорт" итеп ҡаралды. Афарин, Владимир Владимировичҡа: ошо мәлде ул бик дөрөҫ тотоп алған, әйтәгүр: **"Тел һәм мәҙәни ассимиляцияның ҡәтғи һәм агрессив сәйәсәте үткәрелгән ҡайһы бер илдәрҙә күпселек этник общиналарҙың туған телен файҙаланыуға хоҡуғы һанға һуғылмай йәки сикләнә. Бының беҙ йәмғиәттә хоҡуҡлы һәм хоҡуҡһыҙ, граждандар һәм граждан булмағандар кеүек бүленешкә, ә йыш ҡына фажиғәле эске конфликттарға килтереүсе әҙемтәләренә шаһит булабыҙ..."** Ҙур булмаған һәр этнос, һәр халыҡ, тип дауам итә Президент үҙенең телмәрендә, "Рәсәйҙә үҙен өйөндәге кеүек тойған осраҡта ғына Рәсәй бөйөк дәүләт булып ҡала ала. Рус теле мәнфәғәтендә тип уйлап, ошо принципты боҙған аңһыҙ һәм аңра кешеләр халҡыбыҙ мәнфәғәтенә төҙәлмәҫлек зыян килтерә".

Ил башлығы шул уҡ ваҡытта Рәсәй Конституцияһының бөтөн халыҡтарға ла үҙ туған телен һаҡлауға, уны өйрәнеүгә һәм үҫтереүгә хоҡуҡ биреүен айырым һыҙыҡ өҫтөнә алып билдәләп китте. **"Республикалар дәүләт теле менән бер рәттән үҙҙәренең дәүләт телдәрен булдырырға һәм уларҙы дәүләт власы һәм урындағы идара органдары эшендә файҙаланырға хоҡуҡлы"**, - тине В. Путин.

Күренеүенсә, ил Президенты Рәсәй субъекттарында милли телдәр яҙмышына ҡағылған мәсьәләләр менән яҡшы таныш, һәм ул был проблемаға битараф түгел. Ә беҙҙә был йәһәттән битарафтар быуа быуырлыҡ. Рәсәй Федерацияһының, Башҡортостан Республикаһының Төп закондары - Конституция положениеларын тупаҫ рәүештә боҙоп, республикабыҙҙың мәғариф учреждениеларында дәүләт теле булараҡ башҡорт телен уҡытыуҙы мәктәптәр программаһынан еңел генә алып ташлауҙы уларҙың директорҙары үҙ белдеге менән хәл итә лә ҡуя беҙҙә хәҙер. Президент үҙ сығышында телгә алған әлеге "аңһыҙ һәм аңра" әҙәмдәр, йәмәғәтселек һәм ата-әсәләр тарафынан кире ҡағыуҙар булмауҙан файҙаланып, тотош милләт халҡының әсә теле яҙмышына ана шулай ҡул һуҙа. Закон боҙоуҙы ситән аша һикереп сығыу шайы ла күрмәй улар.

Ә бит Президент сығышында туған телдәрҙе өйрәнеү, уҡытыу, һаҡлау һәм үҫтереү тураһында ғына түгел, бәлки уларҙы, дәүләт теле булараҡ, дәүләт власы һәм идара органдары эшендә файҙаланыу мөмкинлеге хаҡында ла һүҙ бара. Мәҫәлән, күпселек башҡорттар йәшәгән район һәм ауылдарҙа һәр төрлө йыйылыштарҙа ниңә ауыҙ тултырып үҙ телебеҙҙә һөйләүҙән тартынабыҙ? Донъя бит, төрлөсә булып китә: суд-тәфтиш эштәрендә лә ҡатнашырға тура килә - һөйләһен, әйҙә, кеше үҙ телендә! Ә беҙ тартынабыҙ, оялабыҙ, кәмһенәбеҙ. Тап Президент әйтмешләй, кәм күңелгә әйләнеп бөткәнбеҙ, ахыры. Эш шуға тиклем барып етте бит хатта: туған тел уҡытыу программаһын мәктәп стеналары эсендә үк быуып, юҡҡа сығарып ырғытылыуын да битараф ҡына күҙәтәбеҙ. Әйтерһең дә, был беҙгә, беҙҙең балаларыбыҙға, ейән-ейәнсәрҙәребеҙгә һис тә ҡағылмай...

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ*

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ҮҘЕБЕҘҘӘН ТОРА

**Зөбәржәт ШӘЙХИСЛАМОВА, БДУ-ның башҡорт тел ғилеме һәм этномәҙәни белем биреү кафедраһы доценты, филология фәндәре кандидаты:** Борсоған мәсьәләләр күп, әммә телсе булараҡ, тәү сиратта туған телебеҙҙең яҙмышы тураһында уйланам. Был аңлашыла ла, сөнки Рәми Ғариповтың шиғырында әйтелгәнсә, "Теле барҙың ғына иле бар" бит. Башҡорт теле йәшәһә, дәүләтебеҙ ҙә, халҡыбыҙ ҙа йәшәр. Был йәһәттән күрше республикаларҙан өлгө алырға кәрәк беҙгә. Саранскиҙа, Ижевскиҙа, Ҡаҙанда булғаным бар, унда юғары уҡыу йорттарында ла туған телдәрҙе һәр факультетта уҡыталар, Әзербайжандың авиация университетында урындағы ер-һыу атамалары буйынса махсус курстан әзербайжан телендә имтихан тапшыралар хатта. Беҙҙә лә республикаға исем биргән, боронғо халыҡтың туған теленә ҡарата шулай мөнәсәбәт булырға тейеш түгелме ни? Башҡорт теле, республикабыҙҙың дәүләт теле булараҡ, мәктәптәрҙә лә, юғары уҡыу йорттарында ла уҡытылырға тейеш.

Владимир Владимирович Путин туған телдәрҙе уҡытыуға иғтибарҙы көсәйтергә кәрәк, тигән фекер әйтте. Юғары дәүләт етәксеһе был мәсьәләгә ҡарата шулай ыңғай мөнәсәбәттә булғанда, ниңә беҙ үҙебеҙ тырышмайбыҙ? Күршеләргә ҡарағыҙ: уларҙың һәр береһе туған телен үҫтереү өсөн тир түгә - йырсылары үҙ телендә генә йыр йырлай, дәүләт эшмәкәрҙәре туған телдә һөйләшеүҙе ҡағиҙә итеп алған, мәғариф учреждениеларында ла телде уҡытыу мәсьәләһе яҡшы ҡуйылған. Беҙгә лә ошо йәһәттән етеҙлек күрһәтеү мөһим. Һуңғы ваҡытта башҡорт теле дәрестәре ҡыҫҡартыла, ата-әсәләр ҙә балаларына туған телендә белем биреүгә ҡарағанда русса уҡытыуҙы күберәк хуплай. Элек беҙ уҡыған осорҙа рус теле дәрестәре күберәк инһә лә, башҡа предметтар башҡортса уҡытыла торғайны. Шуға күрә, ике телгә лә иғтибар бүленә, уҡыуҙа ла ҡыйынлыҡ тыумай ине. Башҡа милләт балалары араһында ла, үҙ ирке менән башҡорт мәктәптәрендә башҡортса уҡып, был телдә һин дә мин һөйләшеп йөрөгәндәр булды.

Нисек кенә булмаһын, башҡорт теленең киләсәге һәр милләттәшемдең ихтыярынан тора, тип уйлайым. Әгәр ҙә беҙ йәмәғәт урындарында башҡортса аралашһаҡ, балаларыбыҙҙы туған телдә уҡытһаҡ, төрлө өлкәләрҙә дәүләт теле булараҡ башҡорт теленең ҡулланылышын арттырырға тырышһаҡ, әлбиттә, туған телебеҙгә ҡурҡыныс янамаҫ.

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Көҙ көнө Өфөлә ШОС һәм БРИКС илдәренең тәүге бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ форумы ойошторола. Форумды үткәреү башланғысы менән республикабыҙ сығыш яһаны. Был тәҡдимде Рәсәй Президенты Владимир Путин да хупланы. Сара Башҡортостандың бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ субъекттарының баҙар мөнәсәбәттәрен көсәйтеүгә, төбәк-ара хеҙмәттәшлек мөмкинлектәрен арттырыуға һәм халыҡ-ара кимәлгә сығыуға йүнәлтеләсәк. Өфөлә форумға әҙерлек башланды ла инде, унда мендән ашыу ҡатнашыусының килеүе көтөлә.

✓ Мәскәү технология институтының робот-техника кафедраһында фәнни-тикшеренеү мәғлүмәттәрен йыйыу менән шөғөлләнгән Алантим тигән робот Башҡорт дәүләт университетында абитуриенттарға, студенттарға, уҡытыусыларға һәм ҡунаҡтарға үҙенең уҡытыу һәм тикшереү һәләтен күрһәтәсәк. Робот уға мөрәжәғәт иткән фразаларҙы аңлай һәм кешенең тойғоларын билдәләй, мендәрсә кешене хәтерендә ҡалдыра, 100 мендән ашыу телмәр модулдәрен файҙалана. Сара 10 июндә БДУ-ның төп корпусында көндөҙгө сәғәт 4-тә уҙғарыла.

✓ Башҡортостандағы БДИ-ның тәүге һөҙөмтәләре: быйыл 853 сығарылыш уҡыусыһы әҙәбиәттән имтихан тапшырған, уларҙың 33-ө тейешле балл йыя алмаған. 32 уҡыусы - 80, өс кеше 96 балл туплаған. Географиянан һынауҙы 1224 кеше тапшырған, шуларҙың 78-е минималь балды йыя алмаған. Алты уҡыусы эшен 100 балға яҙған.

✓ М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры Ҡаҙанда үткән төрки телле театрҙарҙың "Науруз" халыҡ-ара фестивалендә ҡатнашты һәм Ғ. Камал исемендәге театр сәхнәһендә Мәжит Ғафуриҙың "Ҡара йөҙҙәр" спектакле менән сығыш яһаны. Спектаклдең режиссеры - Айрат Абушахманов. "Науруз" фестивалендә Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, Төркиә, Әзербайжан, Рәсәй, Үзбәкстандан килгән коллективтарҙың 17 сәхнә әҫәре күрһәтелде.

✓ Йәш йырсы Дилара Иҙрисова Германияла үтәсәк Халыҡ-ара Гендель фестивалендә ҡатнаша. Фестиваль июнь урталарына тиклем дауам итә. Дилара былтыр Мәскәү дәүләт филармонияһында, ә быйыл мартта Брюсселдә сығыш яһап, халыҡ-ара кимәлдә яҡшы баһа алғайны.

**“Башинформ”дан.**

***✓ Апрель айында республикала йәшәүселәр 3441 яңы машина һатып алған, шуларҙың 1638-ен - кредитҡа. Шулай итеп, Башҡортостанда кредитҡа алынған автомобилдәрҙең өлөшө - 47,6, Рәсәй буйынса 35 процент тәшкил иткән.***



*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# МОТЛАҠ ТАНЫҠЛЫҠ АЛ

**Башҡортостан Республикаһының район һәм ҡала Пенсия фонды идаралыҡтарында йыл һайын 100 меңдән ашыу кеше - балалар һәм өлкәндәр - теркәлә һәм СНИЛС - страховкалы шәхси иҫәп номеры - мотлаҡ пенсия страховка таныҡлығы ала. Пенсия фонды бүлексәһе барлығы 4 млн. 800 мең шәхси иҫәпте хеҙмәтләндерә, шуларҙың 800-ө - 18 йәшкә тиклемге балалар.**

СНИЛС электрон юл менән дәүләт хеҙмәттәре һәм ташламалар алыу өсөн, башҡа төрлө хеҙмәттәргә ихтыяж булғанда һәм пенсия хоҡуғын бойомға ашырғанда документтар иҫәбен аҙайтыу маҡсатында файҙаланыла. Мәҫәлән, госуслугwww.gosuslugi.ru портал сервисын файҙаланып, Рәсәй йә сит ил паспортын алмаштырырға, Рәсәй пенсия фондындағы шәхси иҫәп торошон белеү һәм башҡа күп мәғлүмәттәрҙе асыҡлау өсөн кәрәк.

Балаларға СНИЛС страховкалы таныҡлыҡ алыу өсөн ата-әсә үҙенең паспорты һәм баланың тыуыу тураһында таныҡлығы менән йәшәгән урындары буйынса Рәсәй Пенсия фонды идаралығына мөрәжәғәт итә ала. 14 йәштән өлкәндәр үҙ паспорттары менән үҙҙәре килә ала. СНИЛС гражданға бер тапҡыр һәм мәңгелеккә бирелә. Уны юғалтҡан осраҡта дубликатын һорап, эшләгән урындың кадрҙар бүлегенә ғариза яҙыла. Мотлаҡ пенсия страховкаһы таныҡлығы алыу өсөн дәүләт һәм муниципаль хеҙмәттәр күрһәтеүсе күп функциялы үҙәктәргә лә мөрәжәғәт итергә мөмкин.

# ҮҘ ӨЙӨҢДӘ - ҮҘ КӨЙӨҢ

**2015 йылдың 23 майында көсөнә ингән Федераль законға ярашлы, әсәлек капиталы аҡсаһын балаға өс йәш тулыуҙы көтөп тормайынса ла торлаҡ кредиты йәки займ буйынса тәүге взносты түләүгә йүнәлтергә мөмкин. Бынан элек тә ул мөмкин ине, тик был ҡағиҙә тәүге взносҡа ҡағыла ине. Хәҙер был сикләү юҡҡа сығарылды.**

Башҡортостан Республикаһы буйынса Пенсия фонды идарасыһы Фоат Хантимеров әйтеүенсә, әлеге ваҡытта республикала әсәлек капиталына Пенсия фонды сертификаты алыусы ғаиләләр һаны 210 меңдән артып китте һәм шуларҙың 44 проценты әсәлек капиталы аҡсаларын тулыһынса файҙаланды. Торлаҡ шарттарын яҡшыртыу - әсәлек капиталын файҙаланыуҙың иң популяр йүнәлеше булып ҡала. Республикала был маҡсаттарға 143 меңдән ашыу ғаилә аҡсаларын күсерҙе. Шуларҙың 101 меңе 37 млрд. һум күләмендә әсәлек капиталы менән торлаҡ кредиттарын өлөшләтә йәки тулыһынса ҡапланы. Тағы ла 42 мең ғаилә 12,5 млрд. һум суммала әсәлек капиталына кредитһыҙ ғына торлаҡ һатып алды йә төҙөй, ремонтлай башланы. Район һәм ҡала Пенсия фондтары идаралыҡтары балаларҙы уҡытыуға 189 млн. һумға - 5 мең, әсәләрҙең тупланма пенсияһына 8,4 млн. күләмендә күсереү маҡсатында 118 ғариза ҡабул итте.

**БР буйынса РФ Пенсия фонды бүлексәһенең матбуғат хеҙмәте.**

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# БЫЛ БӘЙЛӘНЕШ НИ БИРЕР?



**Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Дания Короллегенең Рәсәйҙәге илсеһе Томас Винклер етәкселегендәге рәсми һәм эшлекле даирәләр делегацияһы менән осрашты. Яҡтар сәнәғәт һәм сауҙа-иҡтисади хеҙмәттәшлек, ауыл хужалығы өлкәһендә үҙ-ара килешеп эш итеү мөмкинлектәрен тикшерҙе.**

Рөстәм Хәмитов һүҙҙәренсә, дүрт йыл элек республика инвестиция йәлеп итеү буйынса Рәсәйҙең егерме төбәге араһында һуңғы урынды биләһә, бөгөн ул тәүге унау исемлегенә инә.

- Бөгөн ауыл хужалығын яңыртыу буйынса ҙур эш башлайбыҙ. Эшҡыуарҙарыбыҙ Данияла сусҡалар, ауыл хужалығы предприятиелары өсөн ҡорамалдар һатып алды. Был эш артабан да дауам итер, тип ышанам, - тип билдәләне Башҡортостан Башлығы. - Республиканың химия кластерын булдырыу, фармацевтика, энергетика, тирә-яҡ мөхитте һаҡлау мәсьәләләре һәм башҡалар үҫешәсәк. Бөгөн бында ошо тармаҡтарҙа эшләүселәр бар. Инвестиция һалыу йәһәтенән Башҡортостан иң яҡшыһы.

Былтыр Башҡортостан менән Дания Короллеге араһындағы тышҡы сауҙа әйләнеше 84,5 миллион доллар тәшкил иткән. Шуларҙың 87 проценты (73,5 миллион доллар) - экспортҡа, 13 проценты (11 милллион доллар) импортҡа тура килә. Башҡортостан Данияға мазут, төпрә (мал аҙығы), арыш һәм фанера сығарһа, уларҙан химия сәнәғәте продукцияһы, төрлө ҡорамалдар, ҡара металл изделиелары, мал һатып ала. Әле төбәктә Дания капиталы ҡатнашлығында ете предприятие теркәлгән. Улар, нигеҙҙә, финанс аралашлыҡ, ағас әҙерләү һәм эшкәртеү, төҙөлөш предприятиелары.

# ЯРҘАМҺЫҘ ҠАЛМАҪҺЫҢ!



**2003 йылда баш ҡалала Ғәҙәттән тыш фонд ойошторола. Былтыр февралдә ул "Ҡотҡарыу хеҙмәте 112" Муниципаль бюджет учреждениеһына ҡушыла һәм уның филиалы булып ҡала. Ошо йылдар дауамында ул Рәсәйҙә берҙән-бер шундай үҙенсәлекле учреждение булып тора һәм уның әлегә бер төбәктә лә аналогы юҡ. Был хаҡта ҡала хакимиәтендә уҙғарылған матбуғат конференцияһында белдерелде.**

Фонд тәбиғәт һәм техноген характерҙағы ғәҙәттән тыш хәлдәр һөҙөмтәһендә зыян күргән ҡала халҡына ярҙам итеү маҡсатынан ойошторолған. Уның үҙенең милке - 550 кешелек йәшәү урыны, тәү мәлдә кәрәкле көнкүреш әйберҙәре, техник персоналы, кешеләрҙең йыһаздарын һаҡлау өсөн махсус тимер ангары бар. Өфө ҡала хакимиәте зыян күреүселәргә матди ярҙам йөҙөнән тәүге өс айҙа бушлай йәшәү мөмкинлеге бирә. Барлыҡ объекттарҙа ла тәүлек әйләнәһенә администраторҙар дежурлығы ойошторолған, шуға ла улар кешеләрҙе тәүлектең теләһә ҡайһы ваҡытында ла ҡабул итеп урынлаштыра ала.

Шулай уҡ Өфөлә Рәсәй өсөн тағы бер үҙенсәлекле социаль учреждение бар. Ул да булһа "Алкоголь иҫереүе торошонда булыусылар өсөн социаль-реабилитация үҙәге" Муниципаль бюджет учреждениеһы. Ул 2010 йылда, айныҡтыстарҙы бөтөргәс, алкоголизмды профилактикалау, йәмәғәт урындарында иҫерек килеш йөрөүселәргә юл ҡуймау, иҫеректәрҙең сәләмәтлеген һәм ғүмерен һаҡлап ҡалыу маҡсатынан ойошторола. Учреждениела иҫеректәрҙе ваҡытлыса урынлаштыралар, уларға тәүгеe медицина ярҙамы күрһәтәләр, кәрәк булғанда дауаханаларға ебәрәләр. Бынан тыш, үҙәккә асарбаҡлыҡты профилактикалау, алкоголь бәйлелегендәге кешеләр өсөн социаль-реабилитация саралары үткәреү, шулай уҡ водителдәрҙе рейс алдынан һәм рейстан һуң тикшереү бурысы йөкмәтелгән. Үҙәктең Төньяҡ бүлексәһендә 30 койка-урын, Көньяҡ бүлексәлә 34 койка-урын бар. Баш ҡаланың был йүнәлештәге эшмәкәрлеген хәҙер Рәсәй Федерацияһының башҡа субъекттары ла үҙләштерә. Дөйөм алғанда 40 ҡала һәм төбәккә ошондай учреждениелар асыуҙа ярҙам күрһәтелгән дә инде.

# БЕҘ - ҮТКӘНДӘРҘӘН...



**20 июндә Өфөнән алыҫ түгел "Первушин" аэродромында "Беҙ үткәндәрҙән" тип аталған хәрби-тарихи реконструкция уҙғарыла. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, 2007 йылдан алып Өфөнөң төрлө майҙансыҡтарында ошондай саралар ойошторола. Быйыл күләмле проект Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 70 йыллығына бағышланған.**

Театрлаштырылған тамашала Икенсе донъя һуғышы йылдарындағы хәрби техника: мотоциклдар, автомобилдәр, совет һәм немец танкылары файҙаланыласаҡ. Ойоштороусылар 45 миллиметрлы пушканы ла күрһәтергә вәғәҙәләй.

Сарала өфөләләр, республика ҡалалары вәкилдәре, шулай уҡ Новосибирск, Кемеров, Пермь, Һамар, Тольятти, Екатеринбург, Силәбе, Новоуральск, Ульяновск, Киров ҡалаларынан ҡунаҡтар ҡатнаша. "Мюзет" төркөмө һуғыш осоро йырҙарынан торған концерт әҙерләй. Һуңынан авиашоу ойоштороласаҡ. Сара көндөҙгө сәғәт 1-ҙә башлана. Инеү ирекле. Автобус Көньяҡ автовокзалдан сәғәт 12-лә китә. "Первушин" аэродромы Кушнаренко районында урынлашҡан. Аэродромға "Өфө - Ҡаҙан" трассаһы буйлап барырға була.

# МАШИНАНЫ - БУРЫСҠА



**Башҡортостан халҡы бик теләп кредитҡа автомобиль һатып ала. Статистика мәғлүмәттәре күрһәтеүенсә, ағымдағы йылдың апрель айында республикала һатып алынған яңы автомобилдәрҙең 47,6 проценты өсөн ай һайын банкка түләүҙәр индерелә.**

Быйыл апрелдә "Автостат" аналитика агентлығы һәм Кредит хәленең милли бюроһы яңы еңел автомобилдәр һатыу һәм автокредит биреү һөҙөмтәләре буйынса тикшереү үткәрҙе. Уға ярашлы, бурысҡа алынған автомобилдәрҙең һаны ағымдағы йылдың беренсе кварталына ҡарағанда күберәк. Дөйөм алғанда, апрелдә рәсәйҙәр 110 479 яңы машина һатып алған, шуларҙың 35 процентын - бурысҡа. Беренсе квартал йомғаҡтары буйынса был күрһәткес 20,1 процент тәшкил иткән. "2015 йылдың апрелендә яңы автомобилдәр баҙары былтырғы ошо уҡ осор менән сағыштырғанда 49 процентҡа кәмерәк, - тип һөйләй "Автостат" аналитика агентлығының башҡарма директоры Сергей Удалов. - Әммә кредит ойошмаларының ярҙамы тойола, был иһә тармаҡта һатыуҙың артыуына өмөт бирә".

Башҡортостанда күрһәткес Рәсәйҙекенән юғары. Апрель айында республикала йәшәүселәр 3441 яңы машина һатып алған, шуларҙың 1638-ен - кредитҡа. Шулай итеп, Башҡортостанда кредитҡа алынған автомобилдәрҙең өлөшө - 47,6, Рәсәй буйынса 35 процент тәшкил иткән.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфөлә Ҡөрьән уҡыусылар конкурсы үтте. Мәрйәм Солтанова исемендәге мәҙрәсәлә ойошторолған бәйгелә 150 кеше ҡатнашты, тип хәбәр итә Башҡортостан мосолмандары Диниә назаратының матбуғат хеҙмәте. Бәйге йомғаҡтары буйынса Хәсән Раянов, Хәйҙәр Шәңгәрәев, Хәйретдин Әминев еңеүселәр тип танылды. Улар I дәрәжә диплом, шулай уҡ ноутбук менән бүләкләнде. Икенсе һәм өсөнсө урын яулаусыларға велосипедтар, скутерҙар, кеҫә телефондары һәм спорт инвентарҙары тапшырылды.

✓Сколково фонды менән Өфө дәүләт нефть техник университеты инновациялы эшмәкәрлеккә ярҙам итеү өлкәһендә хеҙмәттәшлек тураһында килешеүгә ҡул ҡуйҙы. Килешеү нигеҙендә Өфө дәүләт нефть техник университетында Сколково инновациялы үҙәгенең Башҡортостандағы вәкиллеге булдырылды. Документҡа ярашлы, төп ойошма уҡыу йортондағы һәм төбәктәге профилле эшмәкәрлеккә булышлыҡ итәсәк.

✓Италияла һуғыш сәнғәте буйынса донъя чемпионаты үтте. Унда Рәсәйҙең йыйылма командаһы составында башҡорт атлеты, һуғыш сәнғәте буйынса 29 тапҡыр донъя чемпионы Вил Ғабдуллин ҡатнашты. Яҡташыбыҙ каратэ буйынса уңышлы сығыш яһап, алтын миҙал яуланы һәм утыҙынсы тапҡыр һуғыш сәнғәте буйынса донъя чемпионы исеменә лайыҡ булды. Ярыштарға Австрия, Шотландия, Латвия, Венгрия, Хорватия, Иран, Үзбәкстан, Тажикстан, Италия һәм Рәсәйҙән иң яҡшы спортсылар килгәйне.

✓12-14 июндә Ейәнсура районында "Ҡош юлы" IV асыҡ бард фестивале ойошторола. Сарала 25 йәш автор-башҡарыусы ҡатнаша. Фестиваль-конкурс үҙешмәкәр композиторҙарҙың, шағирҙарҙың ижади эшмәкәрлеген әүҙемләштереү һәм оҫталыҡтарын арттырыуға ярҙам итеү маҡсатында ойошторола. Унда 16 йәштән өлкән гитарала уйнап йырлаусылар ҡатнаша.

✓Йыл һайын Башҡортостанда мең кешегә 15 самаһы бала тыуа, тип хәбәр итә Башҡортостанстат. Былтыр бөтәһе 60,2 мең сабый донъяға килгән. 2013 йылғы мәғлүмәттәр буйынса, Рәсәй төбәктәрендә мең кешегә 13 бала тыуа. Хәҙерге ваҡытта республикала 1567 мәктәпкәсә ойошма, 200 филиал хоҡуғына эйә булған ойошма, мәктәптәрҙә 380 мәктәпкәсә тәрбиә биреү төркөмдәре эшләй. 223,6 мең сабый балалар баҡсаһына йөрөй. Уҙған йылда 129 балалар-үҫмерҙәр спорт мәктәптәре һәм спорт клубтарында 74,7 мең бала шөғөлләнгән. Музыка, художество һәм сәнғәт мәктәптәренә 39,6 мең бала йөрөй.

***✓ Июнь-июль айҙарында Евросоюз вәкилдәре Рәсәйгә ҡарата ҡулланылған санкцияларҙың "киләсәген" билдәләү өсөн ҡорға йыйыласаҡ. Әгәр ҙә санкциялар оҙайтылһа, иҡтисади көрсөктөң тәрәнәйеүе ҡотолғоһоҙ, тип билдәләй эксперттар.***



*ИҠТИСАДИ ХӘЛДӘР*

**Донъялағы, илдәге һәр иҡтисади ваҡиға халыҡтың финанс тотороҡлоғона йоғонто яһай, кеҫәһенең йоҡарыуына йәки ҡалынайыуына тәьҫир итә. Шуға күрә был өлкәләге һәр яңылыҡ тураһында хәбарҙар булып тороу һәр кем өсөн мөһим һәм кәрәк. Ағымдағы йылдың уҙған айында Рәсәй иҡтисадында сағыу ваҡиғалар әллә ни күп булманы, тип әйтергә кәрәк. Ләкин нәҡ хәҙер алдағы айҙарҙа ҡабул ителгән ҡарарҙың тәүге һөҙөмтәләре күренә башланы һәм улар яҡын киләсәктә иҡтисадтағы хәл-тороштоң ниндәй булырын күҙалларға мөмкинлек бирә.**

# НИНДӘЙ КӨРСӨК КӨТӘ?



**Һумдың арзанайыуы.** Март айында күҙәтелгән һумдың үҫеү этабы үтеп, майҙың һуңғы көндәрендә ул долларға һәм евроға ҡарата тотороҡло рәүештә арзанайҙы. Аналитиктар фекеренсә, йыл аҙағына тиклем һум бер долларға ҡарата 60 һум тирәһендә тирбәләсәк. Бөгөнгө көндә сеймал баҙарындағы ситуация һумға төп баҫымды яһай. Нефть котировкаларының түбәнәйеүе һум курсына йоғонто яһамай ҡалманы. Шулай уҡ уҙған айҙа Рәсәйҙең Үҙәк банкы резервтарын тултырыу ниәтенән валюта һатып ала башланы - был да һумды ҡыҫырыҡлай. Артабан нефть котировкалары нығынған осраҡта ла һум ныҡлап нығынмаясаҡ, тип фаразлай белгестәр.

**Кредиттар һәм вкладтар буйынса ставкалар кәмеүе.** Илдең Үҙәк банкы мөһим ставканы (ключевая ставка) планлы рәүештә төшөрөүен дауам итә. Рәсәй Банкы директорҙар Советы мөһим ставканы 14 процентан 12,50 процентҡа тиклем төшөрҙө һәм инфляцияның түбәнәйеүе күҙәтелһә, артабан да ул аҫҡа төшеүен дауам итәсәк, тип белдерҙе. Мөһим ставканың түбәнәйеүенә банк секторы вәкилдәре вклад һәм кредиттар буйынса ставкаларҙы кәметеү менән яуап бирә. Беренсе сиратта, традицион рәүештә, вкладтар буйынса ставкалар кәмей. Бөгөнгө көндә физик шәхестәр өсөн вкладтар буйынса уртаса ставка һумдарҙа 11,66 процент, ә валютала 3,46 процент тәшкил итә. Бер ай эсендә ставка 0,2-2 процентҡа кәмене. Кредиттар буйынса уртаса ставка һумдарҙа йылына 16-19 процентҡа тиклем кәмене. Эксперттар билдәләүенсә, бында автокредит һәм ипотека буйынса ташламалы программаларҙың тормошҡа ашырыла башлауы үҙенең ролен уйнаны. Ҡулланыусылар кредиты иһә тик 1-1,5 процентҡа тиклем генә төштө.

**Инфляция темпының әкренәйеүе.** Росстаттан хәбәр итеүҙәренсә, Рәсәйҙә йыллыҡ инфляция 15,8-15,9 процентҡа тиклем төшкән. Һуңғы ваҡытта, ошо уҡ ведомство мәғлүмәттәренә ҡарағанда, инфляцияның аҙналыҡ күрһәткесе үҙгәрмәй - 0,1 процент ҡала килә. Эксперттар билдәләүенсә, хаҡтарҙың саманан тыш артыу мөмкинлеген Хөкүмәттең кризисҡа ҡаршы йүнәлтелгән саралары һәм Үҙәк банктың аҡсаға һәм кредитҡа ҡарата алып барған ҡаты сәйәсәте тотоп тора. Ләкин был өлкәлә йәй көнө күҙәтелә торған фактор тураһында ла онотороға ярамай - был ваҡытта, ғәҙәттә, инфляция темптары традицион рәүештә кәмей. Ә Рәсәйҙең Иҡтисади үҫеш министрлығының һуңғы күҙаллауҙарына ярашлы, ағымдағы йылдың июль - сентябрь айҙарында дефляцияны (хаҡтарҙың дөйөм күрһәткесенең төшөүе) көтөргә була.

**Иҡтисади көрсөк тураһында.** 21 майҙа Һаҡлыҡ банкы башлығы Герман Греф, көрсөктөң иң ҡырҡыу фазаһы үтте, тип белдерҙе. Хөкүмәт аппараты вәкилдәре лә әлеге мәлдә иҡтисадтың аяҡҡа баҫыу осоро бара, тигән фекерҙә. Былтырғы йыл аҙағындағы Рәсәйгә ҡарата пессимистик күҙаллауҙарҙың тормошҡа ашмауы ошондай белдереүҙәргә нигеҙ бирә. Әйтергә кәрәк, Moody"s халыҡ-ара рейтинг агентлығы ла Рәсәйҙәге иҡтисади хәл буйынса прогноздарын йомшартты. Аналитиктар фекеренсә, 2015 йылда Рәсәйҙә Эске тулайым продукт (ВВП) күрһәткесе 3 процентҡа төшәсәк, ә 2016 йылда нуль үҫеш күрһәтәсәк. Ә бынан алдағы прогноздарҙа иһә Рәсәйҙә иҡтисадтың түбәнәйеүе 2015 йылда - 5,5 процент, ә 2016 йылда 3 процент тәшкил итәсәк, тигән фекер төп урынды алып тора ине. Шул уҡ ваҡытта ҡайһы бер эксперттар, Росстаттың һуңғы күрһәткестәренә таянып, илдәге иҡтисади хәлдең насарайыуын билдәләй. Мәҫәлән, апрель айында иҡтисадтың төшөүе 4 процентҡа еткән. Ә йылдың I кварталында был күрһәткес 1,9 процентты тәшкил иткән. "Внешэкономбанк" баҫтырып сығарған иҫәпләүҙәрҙә лә апрелдә ВВП-ның түбәнәйеүе 4,3 процентҡа етеп, бер айҙа 0,6 процентҡа тиклем төшкән. Йылдың тәүге дүрт айы эсендә, "Внешэкономбанк" күрһәткестәренә ярашлы, ВВП төшә барып, дөйөм алғанда, 2,5 процентҡа кәмегән.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Аналитиктар фекеренсә, алдағы ике йыл Рәсәй иҡтисады өсөн ауыр һәм илдең киләсәге Хөкүмәттең дөрөҫ ҡабул ителгән ҡарарҙарына ныҡ бәйле буласаҡ. Июнь-июль айҙарында Евросоюз вәкилдәре Рәсәйгә ҡарата ҡулланылған санкцияларҙың "киләсәген" билдәләү өсөн ҡорға йыйыласаҡ. Әгәр ҙә санкциялар оҙайтылһа йәки улар тағы ла ҡәтғиләштерелһә, рәсәйҙәр быға әллә ни иғтибар итмәҫкә тырышһа ла, иҡтисади көрсөктөң тәрәнәйеүе ҡотолғоһоҙ, тип билдәләй эксперттар.**

**Гөлназ МАНАПОВА әҙерләне.**

*ҺОРАУ - ЯУАП*



## ӨҪТӘП ТҮЛӘРГӘМЕ?

**Йорт файҙаланыуға тапшырылғас, төҙөүсе компания мин һатып алған фатирҙың майҙаны бер аҙға ҙурайыуына һылтанып, минән өҫтәп түләү талап итә. Мин йорт һалыусыларға ышанмайым һәм бойондороҡһоҙ эксперт саҡыртып, фатир майҙанын яңынан үлсәтергә теләйем. Ләкин төҙөлөш компанияһы хеҙмәткәрҙәре өҫтәмә түләм индермәй тороп, фатир асҡысын бирмәйәсәктәре хаҡында белдерҙе. Улар законға ярашлы эш итәме?**

- Ысынлап та, йорт төҙөлөп бөткәс, фатирҙарҙың майҙаны алдан билдәләнгән майҙандан күберәк йә әҙерәк булыуы бар. Был осраҡта өҫтәмә түләү тураһында килешеүҙә айырым пункт булырға тейеш. Ул турала 2004 йылдың 30 декабрендә 214-ФЗ номеры менән ҡабул ителгән Федераль законда аныҡ әйтелгән. Шуға күрә, тәү сиратта килешеүҙе ентекләп уҡып сығығыҙ. Шуныһы ла мөһим: фатир майҙанының үҙгәреүе хаҡында фатирҙың техник паспортында теркәлгән булырға тейеш.

Төҙөлөш компанияһының өҫтәмә түләү индереү талабы менән килешмәгән осраҡта судҡа мөрәжәғәт итеү иң дөрөҫ юл булыр. Судта бойондороҡһоҙ экспертиза үткәреүҙе һорарға һәм фатир асҡысын биреүҙәре тураһында талабығыҙҙы еткерергә хоҡуҡлыһығыҙ.

## КРАНДА ТУТЛЫ ҺЫУ

**Фатирҙағы крандан ваҡыты-ваҡыты менән тутлы һыу аға. Ул һыуҙы бер нәмә өсөн дә ҡулланып булмай. Был осраҡта һыу өсөн нисек түләргә тейешбеҙ?**

- Әгәр ҙә күрһәтелгән коммуналь хеҙмәттәрҙең сифаты насар булһа, унын өсөн түләүҙәрҙе кәметергә була. Был хаҡта РФ Хөкүмәте тарафынан 2011 йылдың 6 майында раҫланған Ҡағиҙәләрҙең 8-се һәм 9-сы бүлектәрендә һәм шулай уҡ РФ Хөкүмәтенең 2006 йылдың 13 августындағы Ҡарарҙың 6-сы пунктында тулыраҡ мәғлүмәт алырға була.

Ҡабаттан иҫәпләүҙе йылдың һәр миҙгелендә лә үткәреү мөмкин. Бында иң мөһиме - сифатһыҙ хеҙмәт күрһәтеүҙе теркәү. Бының өсөн крандан тутлы һыу аға башлағас та авария-диспетчер хеҙмәтенә шылтыратыу мөһим. Һөйләшеү барышында мотлаҡ рәүештә мөрәжәғәтегеҙҙең теркәү һанын асыҡлағыҙ. Тикшереү һөҙөмтәһе буйынса акт төҙөлә һәм унын бер данаһы мотлаҡ фатир хужаһы ҡулына тотторола.

Әгәр ҙә идара итеү компанияһы мөрәжәғәтегеҙҙе иғтибарһыҙ ҡалдырһа һәм тикшереү үткәрмәһә, сифатһыҙ һыу ағыуы тураһында үҙегеҙ акт төҙөй алаһығыҙ. Барыһы ла ентекле теркәлгән актҡа үҙегеҙ һәм, иң кәмендә, ике күршегеҙҙән ҡул ҡуйҙырыу мөһим. Шулай уҡ актты ТСЖ йәки күп фатирлы йорт комитеты рәйесенән раҫлатығыҙ. Акттың күсермәһен яңынан иҫәпләү тураһындағы ғариза менән бергә идара итеү компанияһына илтеп тапшырығыҙ. Әгәр ҙә был проблема барлыҡ йортта күҙәтелһә, коллектив рәүештә мөрәжәғәт итеү күпкә һөҙөмтәлерәк буласаҡ.

**Сәлимә АРЫҪЛАНОВА әҙерләне.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Сүпте сығарыу

❖ Сүп ингән урындың тирә-яғына дегет һөртһәң, сүп өҫкә ҡалҡа. Уны эҫкәк менән алып ташлайһың.

### Нервылар яңырамы?

❖ Нервы күҙәнәктәре яңырһын өсөн илағы килгәндә - иларға, көлгө килгәндә көлөргә, йәғни хис-тойғоларҙы тыймайынса йәшәргә кәрәк. Шул саҡта ғына нервы күҙәнәктәре яңыра.

### Газлы һыу - зарарлы

❖ Газлы һыу эскән кешенең, айырыуса ҡатын-ҡыҙҙарҙың, һөйәктәре кибә, бәләкәйләнә, ныҡлығы кәмей. Сәй, һут эскәндәрҙең һөйәге ныҡ була. Газлы һыу ҡаты сирҙәргә алып килә, уны эсмәү хәйерлерәк.

### Каланхоэ

❖ Был гөлдөң һуты һыҙланыуҙы, төрлө яраларҙы, бешкән, өшөгән, ярылған тирене дауаларға ярҙам итә. Марляны гөлдөң һутында сылатып, ауыртҡан ерегә бәйләп ҡуяһың. Был гөл сиҡан, тимерәүҙе бөтөрөргә лә ярҙам итә. Гөлдөң 2-3 япрағын ит турағыс аша үткәреп, тимерәүле урынға ябаһың. Дауаны йоҡлар алдынан эшләһәгеҙ, бигерәк шәп. Дауаланыу курсы - 5-6 көн. Һығып алған һутты һыуытҡыста һаҡларға ла була.

### Тонзиллиттан

❖ Көнөнә 4-5 мәртәбә миндаль кеүек биҙҙәрҙе аҡ шыршы (пихта) майы һеңгән мамыҡ менән һөртөргә кәрәк. Дауаланыу курсы - 2-3 көн. Танау тишектәренә 1-әр тамсы шул майҙы тамыҙыу ҙа яҡшы һөҙөмтә бирә. Процедураны ас ҡарынға яһарға. Тик эфир майҙары көслө аллергия булдырыуы ихтимал, шуға ла һаҡ булығыҙ!

### Тире йәш булһын

❖ Тиренең һығылмалылығын һаҡлау өсөн даими әфлисун аша, йөҙ йәштә лә тирең йәп-йәш булыр.

### Һоло бутҡаһы

❖ Был ризыҡ зиһенде нығыта, йөрәк ауырыуын иҫкәртә, холестеринды ла нормаға килтерә һәм ҡан тамырҙарын тромбтарҙан һаҡлай. Һыуҙа ғына бешереп, һоло бутҡаһын гел ашағыҙ.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✓ *Өфөнө үҙенең уникаль архитектураһы булған, үҙенең милли үҙенсәлеген һаҡлаған, үҙенә генә оҡшаған ҡала итеп күрге килә. Шуға ла баш ҡалабыҙҙа милли архитектураны үҫтерергә кәрәк.*



*ЙОЛАЛАРЫБЫҘ*



# САЛ БӨРКӨТ - Тәңре ҡошо

**Күп халыҡтарҙың мифтарында һәм йолаларында бөркөт ҡатын-ҡыҙҙы һәм балаларҙы төрлө яуыз көстәрҙән һаҡлаусы ғына түгел, ә ир-атҡа ярҙам итеүсе булараҡ та һүрәтләнә. Башҡорт әкиәттәрендә бөркөт рәхмәт йөҙөнән йә батырға ҡаурыйын бүләк итә, был ҡаурый уға 12 башлы дейеү менән алышта көс бирә. Йә булмаһа, бөркөт әкиәт персонаждарын үҙенең арҡаһына ултыртып, кәрәкле урынға алып бара.**

Бөркөттөң төрлө тән өлөштәре лә шифа иҫәпләнә башҡорт халҡында. Ҡотorған эт тешләгән кешегә уның итен ашатҡандар. Яуыз көстәрҙе ҡурҡытыу өсөн бөркөт тырнаҡтары менән суҡышы ҡулланылған. Әгәр ҙә үҙең менән гел генә бөркөт тырнағы йөрөтһәң, кешегә бер зәхмәт тә ҡағылмай, тигән ышаныу ҙа бар. Яман шеште бөркөт тырнағы менән тырнау күренеше лә булған.

Йортто, ихатаны бөркөт һаҡлай, тип ышанғандар. Был турала Белорет районында өй ҡыйығына бөркөттөң үле кәүҙәһен бәйләп ҡуйыу һөйләй. Хәйбулла, Бөрйән, Белорет райондарында йәшәүселәрҙең тәҙрә йөҙлөгөн "бөркөт" тип аталған орнамент төшөрөүе, ҡымыҙ тәпәне һәм уның ҡапҡасындағы ошондай уҡ атамалағы биҙәк булыуы ла быны дәлилләй. Боронғо мифтарҙа бөркөт Тәңре ҡошо иҫәпләнгән. Шуның өсөн дә был ышаныуҙар бар халыҡтарҙа ла тиерлек бар. Башҡорт әкиәттәрендә лә бөркөткә төрлө сифаттар бирелә. Башҡорт йырҙарында ла бөркөт культы сағылып ҡала. "Аҡ яурын сал бөркөт" йыры легендаһы буйынса, йәш һунарсы Ирәндек тауындағы бейек ҡаяла бөркөт ояһы тап итә. Унда ике бөркөт балаһы була. Бөркөттәр ризыҡ эҙләп, осоп киткән мәлде һағалап, егет бер бөркөт балаһын алып төшә. Бөркөттәр һауала саң ҡағып, балаһын бик оҙаҡ эҙләй. Оло һунарсылар егеттең ҡылығын хупламай һәм уға бөркөт балаһын кире алып барырға ҡуша. Юғиһә, уға бөркөттәрҙең ҡарғышы төшә, ти улар. Әммә быны эшләү мөмкин булмай. Бөркөттәрҙең һағышлы ҡысҡырыуына түҙә алмай, егет ҡурайын алып, көй уйнап ебәрә.

Легенданың икенсе вариантында батыр ҙур йыйында тау башынан ҡолап төшкән бөркөт балаһын табып ала. Инә бөркөт быны күреп, егеткә ташлана. Алышта егет еңә һәм бик тәьҫирләнеп бер көй уйнап ебәрә. "Был - аҡ яурын сал бөркөттөң йыры", тигәндән һуң, батыр иҫен юя.

Башҡорт халыҡ хореографияһында "Бөркөттәр бейеүе", "Сәмреғош" тигән бейеүҙәр бар. Унда бейеүсе тәне һәм ҡулдары менән бөркөттөң хәрәкәттәрен яһай. Белгестәр был бейеүҙәрҙең дә тотемистик характерын билдәләй.

Бөтөн был этнографик һәм фольклор элементтары ниндәйҙер бер тотемистик йолала, мәҫәлән, бөркөт байрамында башҡарылған булыуы ла ихтимал. Бындай бейеүҙәр монголдарға ла хас. Каталонияла бер байрам мәлендә бөркөттөң алтын ялатылған фигураһы менән бейеү башҡарылған. Төньяҡ Себер индеецтарында ла бөркөт бейеүе осраған.

**Азалия ИЛЕМБӘТОВА.**
**"Башҡорттарҙың изге ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

*ЙӘШЛЕК ЙӘШНӘҮҘӘРЕ*

# МАТУР ЙӘШӘҮ ӨСӨН...

## йәмле мөхит тә кәрәк

**"Мин кешеләрҙең матур итеп йәшәүен теләйем. Ә матур йәшәүгә һинең бөтә өлкәлә уңышлы булыуың ғына етмәй, ә тирә-яғыңдағы мөхиттең дә матур, йәмле һәм йәнле булыуы кәрәк", - ти Лилиә Әбделмәнова. Йәғни, үҙе ошондай йәмле һәм йәнле мөхит тыуҙырыусы архитектор шулай фекер йөрөтә. Ә бындай һығымтаға килгәнсе Хәйбулла районы Әбеш ауылы ҡыҙы Өфөлә Ҡ. Дәүләткилдиев исемендәге Республика һынлы сәнғәт гимназия-интернатын тамамлаған, Санкт-Петербург дәүләт архитектура-төҙөлөш университетында уҡып, архитектор һөнәрен үҙләштергән. Әлеге көндә Өфөлә һөнәре буйынса эшләп йөрөй. Шул уҡ уҡыу йортонда магистратурала уҡыуын дауам итергә хыяллана. Тағы ниндәйерәк һығымталары, уй-фекерҙәре бар икән йәш белгестең - тыңлайыҡ.**



Архитекторлыҡ һөнәремдең нигеҙенә һалынған рәссамлыҡ һәләте атайымдан килә. Атайым яғынан туғандарымдың күбеһе һүрәт төшөрөргә әүәҫ. Мин дә яраттым һүрәттәр төшөрөргә, әлегә был шөғөл менән булышырға ваҡытым юҡ, ләкин киләсәктә, моғайын, был һәләтемә лә "йәшел урам" асырмын тип уйлайым. Был һәләтлектән тыш, әлбиттә, минең ныҡышмаллыҡ, алдыма алғанды эшләмәй ҡуймай торған холҡом булышлыҡ иткәндер архитекторлыҡ һөнәрен үҙләштереүемә. Бала саҡтан шулай ныҡышмал булдым. Тыуған ауылым Әбештәге йортобоҙ бәләкәй күл буйында урынлашҡайны. Хәтеремдә, бер саҡ малайҙар менән өйөбөҙ эргәһендәге күлдең икенсе ярына сығыр өсөн кәмә эшләргә булдыҡ. Килеп сыҡмағас, ныҡышып, тағы, тағы төҙөргә тотонабыҙ. Ниһайәт, бер ваҡыт кәмә әҙер булды. Ана шул ныҡышмаллығым миңә әле лә маҡсаттарыма өлгәшергә ярҙам итә.

Ғөмүмән, мәктәптә уҡыған саҡта күп нәмәләр менән ҡыҙыҡһына торғайным: шиғыр, хикәйәләр яҙа инем, әҫәрҙәрем журналдарҙа ла баҫылғыланы. Сәхнә лә үҙенә тартты, төрлө сараларҙың алып барыусыһы булдым. Шулай ҙа берҙән-бер көндө минең юлым архитектура буласаҡ икәнен аңланым. Әммә һынлы сәнғәт өлкәһендә сифатлы урта белем алмаһам, мине архитектура факультетына ҡабул итмәйәсәктәрен белә инем, шуға ла Өфөгә Ҡ. Дәүләткилдеев исемендәге Республика һынлы сәнғәт гимназия-интернатына уҡырға килдем.

Гимназияла уҡыған сағымда атай-әсәйемә әйтмәй генә үҙемде Мәскәү архитектура университетына әҙерләнем. Ҙур ҡала - ҙур мөмкинлектәр, үҙ һөнәремдә яҡшы белгес булыу өсөн үҙ алдыма ҙур талаптар ҙа ҡуйырға тейешмен, тип һананым. Ул ваҡытта Өфөлә Мәскәү университеттарына уҡырға инергә ярҙам итә алырлыҡ уҡытыусылар таба алмағанлыҡтан, үҙ аллы әҙерләндем. Аҡъярға ҡайтып, был теләгем тураһында һөйләгәс, атайым ҡырҡа ҡаршы төштө.

Тормош барыбер үҙенекен итә. Ике йыл буйы Өфө дәүләт нефть техник университетына һәм Мәскәү архитектура университетына барырға әҙерләнгәйнем, икеһендә лә экзамендар бер көнгә тура килде. Өфөнө һайланым, Мәскәү төшөп ҡалды. Бер үк ваҡытта бер класташым менән Санкт-Петербург ҡалаһындағы университетҡа барып ҡарау тураһында уйлана башланыҡ. Документтар ҡабул итеү осоро тамамланыуға бер-ике көн генә ҡалғайны. Тәүәккәлләнем дә, кисенә үк самолетҡа билет алып, Рәсәйҙең төньяҡ баш ҡалаһына остом - класташым бара алманы. Иртән иртүк Питерға килеп төштөм. Ҙур ҡала, таныштар юҡ, берәү ҙә ҡаршы алмай. Университетты табып, асылыуын көтөп алып, документтарымды тапшырҙым да, ҡала буйлап йөрөргә сығып киттем. Санкт-Петербург һәм уның билдәле урындары тураһында күпме ишеткәнем булды! Бөтәһен дә барлап сығырға тигән ниәт менән, метроға төшөп, ҡаланың үҙәгенә йүнәлдем. Бер көн эсендә бөтә билдәле урындарҙы йөрөп сыҡтым, күркәм биналар, парктар мине әсир итте. Нишләптер, ят ҡалала мин үҙемде ят итеп тойманым. Барыһы ла минең күңелгә яҡын ине. Архитектор күңелле булғанғамы икән...

"Пушкин ("Царское село") ҡалаһындағы микрорайон үҫешенең концепцияһы" - диплом проектымдың темаһы был. Университетта уҡыу дәүерендә, биш йыл буйы мин Санкт-Петербургтың һәм Ленинград өлкәһенең бар регламенттарын, ҡанундарын өйрәндем, һәм был оло бер фәнни һәм график хеҙмәткә әйләнде. Пушкин ҡалаһы ЮНЕСКО һаҡлауы аҫтына ингән мәҙәни ҡомартҡыларҙың береһе. Проектты эшләгәндә ошо нескәлектәрҙе лә күҙ уңында тотоу кәрәк ине, шуға ла эш ауыр, ләкин ҡыҙыҡлы булды.

Университетта уҡығанда фатирҙар дизайны менән ҡыҙыҡһына башланым. Ҡатын-ҡыҙ архитекторҙар өсөн был айырыуса ҡыҙыҡлы йүнәлеш. Хәҙер бына Өфөгә ҡайтып, үҙ һөнәрем буйынса эшләй башлағас, ҙур булмаған йорт өсөн башҡорт колоритлы дизайн өҫтөндә эшләйем. Башҡорттар йәшәгән йорттар нисек булған, ниндәй элементтар менән биҙәлгән - ошоно өйрәнәм. Материалдарҙы туплап бөткәс, уны үҙаллы бер проектҡа әйләндерәсәкмен, тип ниәтләнәм. Әлбиттә, был тема буйынса әллә ни китаптар, хеҙмәттәр юҡ тиерлек, шулай ҙа үҙ күҙәтеүҙәремдән, ишеткән-күргәндәрҙән сығып, башҡорттар йәшәгән көнкүреш мөхите тураһында ниндәйҙер һығымталар яһай алам. Ғөмүмән, башҡорт кешеһе йәшәгән йорттоң тышы ла, эске биҙәлеше лә "Бында башҡорттар йәшәй!" тип ҡысҡырып торорға тейеш, тип иҫәпләйем. Замандаш милләттәштәр был хаҡта оноҡҡан икән, тимәк, иҫкә төшөрөргә кәрәк. Беҙҙә барыһы ла европаса йәшәргә, көнитмешен дә европаса ҡорорға тырыша. Ләкин Европа архитекторҙары, мәҫәлән, йорттар дизайнын бит үҙ милләтенең үҙенсәлегенә, колоритына яраҡлаштырып эшләгән...

Илһамланыр, элек китаптан күреп белгән биналарҙы "тереләй" күрер өсөн йыш ҡына сит илдәргә йөрөйөм. Сәйәхәтемдән милләттәштәремдең тормошон яҡшыртырлыҡ идеялар алып ҡайтам. Шундай уҡ нәмәне Өфөлә лә эшләп була, шуны төҙөп була, бындай ысулды ҡулланып була, тип уйланам. Хәҙер бөтә ғаләм бейек быяла биналар төҙөй, күп ваҡыт урындағы халыҡтың менталитеты, йолалары, мәҙәниәте иҫәпкә алынмай. Глобализация милли сиктәрҙе ҡабул итмәй. Ул кешенең зауығына, ҡараштарына, хатта йәшәү рәүешенә агрессив йоғонто яһай. Хәҙергә сәнғәт һәм мәҙәниәттә төп критерий итеп эстәлектең тәрәнлеген түгел, ә формаларҙың яңы булыуын күрәләр. Ә Өфөнө үҙенең уникаль архитектураһы булған, үҙенең милли үҙенсәлеген һаҡлаған, үҙенә генә оҡшаған ҡала итеп күрге килә. Шуға ла баш ҡалабыҙҙа милли архитектураны үҫтерергә кәрәк. Шул саҡта ғына ҡала үҙ халҡы өсөн үҫенсәлекле, уңайлы буласаҡ. Архитектура өлкәһендә алға киткән илдәрҙән, әлбиттә, өлгө алыу насар булмаҫ, тик уларҙы һуҡырҙарса күсерергә ярамай. Сөнки беҙ биналарҙы матур объект булараҡ ҡына ҡабул итһәк тә, уны ижад иткәндә архитектор үҙ эшен ниндәйҙер концепция сиктәрендә башҡара, уға бер йөкмәтке һала бит.

Архитектураны икенсе тәбиғәт, тиҙәр. Әйе, Башҡортостаныбыҙҙың, Өфөбөҙҙөң дә тәбиғәте ныҡ бай, ләкин ул беҙгә Хоҙай тарафынан бирелгән, ә кеше ҡулы менән булдырылған "икенсе тәбиғәт" менән беҙ ғорурлана алабыҙмы икән, тигән һорауға минең үҙ фекерем бар. Минеңсә, беҙ Өфөләге уникаль ағас һәм таш архитектура менән ғорурлана алабыҙ. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ҡайһы бер өйҙәр үҙҙәренең тарихи статусын юғалта. Хәҙер архитекторҙар һәм төҙөүселәрҙең төп бурысы - йәшәүгә һәләтһеҙ массовый төҙөлөштәр территорияһын тергеҙеү ысулдарын табыу. Аңлатам. Ҡала нормаль йәшәһен өсөн күпмелер ваҡыт арауығынан һуң уға тергеҙеү, йәғни яңыртыу кәрәк. Ә яңыртыу ысулдары төрлө. Йыш ҡына был яңы төҙөлөш өсөн территорияны таҙартыуға ҡайтып ҡала. Ошондай ваҡытта йәшеллекте юҡҡа сығарыуға һәм уникаль ағас һәм таш архитектура ҡомартҡыларын һүтеүгә юл ҡуйылмаһын ине. Ошонда Хельсинки (Финляндия) ҡалаһын миҫалға килтереп киткем килә. Ул да, Өфө һымаҡ, рельефта урынлашҡан, ләкин унда йорттар рельефтың, тәбиғәттең дауамы булып тора, һәм был граждандарға уңайлы йәшәү шарттары тыуҙыра. Ошондай миҫалдарҙы күҙҙән үткәреп, өлгө алғанда шәп булыр ине беҙгә лә, тип әйтмәксемен. Юҡһа, беҙҙә яңы төҙөлөштәр башлағанда тәүҙә ағастарҙы ҡырҡалар, шунан ағас ултырталар.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Лилиәнең ҡасандыр үҙе тамамлаған Ҡ. Дәүләткилдиев исемендәге гимназияла йыш булыуы, уҡыусылар менән осрашыуҙары тураһында ишетеп белә инем. Әңгәмә һуңында: "Әле мәктәп тамамларға әҙерләнгән балаларға ниндәй кәңәштәрең бар?" - тип һораным. "Киңерәк, масштаблыраҡ уйларға өйрәнһендәр. Иң мөһиме, һөнәрҙе аңлап һайлаһындар, уға яҡшылап әҙерләнһендәр. Күптәр архитектор, төҙөүсе булырға хыяллана, ләкин улар, ғәҙәттә, бер уҡыу йортон ғына күҙҙә тота. Әгәр ҙә унда инә алмаһалар, башҡа уҡыу йортонда ла бәхеттәрен һынап ҡарау тураһында уйламайҙар ҙа. Бына шундайҙарҙы күҙ уңында тотоп әйтәм дә инде, масштаблыраҡ фекер йөрөтөргә өйрәнегеҙ, тигән кәңәшемде", - тине. Урынлы кәңәш.**

**Фатима ЯНБАЕВА.**

✓ ***Герард Меркатор үҙенең атласында Урал тауҙарын сағылдыра һәм шуның менән хата фекергә юл яба. Тап шуның менән бөйөк фламанд картографының хеҙмәте беҙҙең өсөн мөһим.***



*ТАРИХЫҢДЫ ТАНЫТ!*

**Урта быуат сығанаҡтарының бер төрө булып карталар тора. Бигерәк тә Көнбайыш Европа илдәрендә эшләнгән карталар йәки уларҙың йыйынтыҡтары ҡыҙыҡлы. Шундай йыйынтыҡтарҙы бөйөк фламанд картографы Герард Меркатор беренсе тапҡыр "Атлас" тип атай. Ул атаманы Ливия иленең мифик батшаһы Атлас хөрмәтенә бирә.**

# МЕРКАТОР КАРТАҺЫНДА...

## Башҡорт ҡалаһы күрһәтелгән

Герард Меркатор 1512 йылда Көнсығыш Фландрияның Рупель-монде ҡалаһында тыуа. Уның ысын исеме Герард Кремер, ләкин ул уны латин вариантына үҙгәртеп, Меркатор тип ала. Герард Меркатор астрономия һәм геодезия ҡоралдары, глобустар, ә һуңынан географик карталар эшләү менән шөғөлләнә. Ул Лувен университетын тамамлап, Лувен ҡалаһында йәшәп ҡала. Реформация яҡлы булғаны өсөн тыуған илендә эҙәрлекләнә башлағас, 1552 йылда немец ҡалаһы Дуйсбургка күсә. География ғилемен өйрәнгәндә, Меркатор антик ғалимдарҙың ҡараштары яңы географик асыштарға ҡаршы килеүен аңлай. Шуға күрә ул барлыҡ географик мәғлүмәттәрҙе туплап, донъяның ысынбарлыҡ картинаһын күрһәтеүҙе үҙенә маҡсат итеп ҡуя.

Был ҙур эшкә Меркатор әүҙем тотона һәм 1569 йылда 18 биттән торған донъя картаһы баҫып сығара, айырым илдәрҙең карталарын берҙәм принципка һала. 1585 йылда 51 картанан торған атластың беренсе өлөшө нәшер ителә. Ә 1589 йылда икенсе өлөшө донъя күрә, унда 22 карта тупланған була. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был сикһеҙ эште Герард Меркатор тамамлап өлгөрә алмай, 1594 йылда үлеп китә. Ул эшләгән яңы 28 карта тороп ҡала. Әммә Герард Меркаторҙың Румольд исемле улы тағы ла бер нисә карта төҙөй. Румольд атаһының 107 картанан торған атласын Дуйсбургта 1595 йылда нәшер итә. Г. Меркатор Атласының икенсе баҫмаһы 1604 йылда сыға.




Башҡортостан иле лә Г. Меркаторҙың карталарында һәм атласында үҙ урынын биләй. Мәҫәлән, уның 1554 йылғы Рәсәй (Russia) картаһында Урал тауҙары (Rhymnici montes) һүрәтләнгән, Өфө ҡалаһы урынында Башҡорт (Pascherti) ҡалаһы күрһәтелгән. Бында шуны әйтеп китергә кәрәк: урта быуат, хатта XVIII быуат башы Көнбайыш Европа карталарында Өфө ҡалаһы, ул ерҙә йәшәгән халыҡ исеме Башҡорт формаһында бирелә. Меркаторҙың атласында бер нисә картала Башҡортостан ере, Көньяҡ Урал һүрәтләнә. Унда Кама, Ағиҙел, Яйыҡ, Ырғыҙ йылғалары, Башҡорт ҡалаһы билдәләнгән.

1517 йылда Краков ҡалаһында поляк тарихсыһы һәм географ Матвей Меховскийҙың "Трактат о двух Сарматиях, Азиатской и Европейской, и о находящемся в них" тигән хеҙмәте нәшер ителә. Меховский унда "Урал тауҙары ысынбарлыҡта юҡ, мин быны асыҡ беләм", тип яҙа. Ул китап Европала бик популяр була. Уны төрлө телдәрҙә күп тапҡырҙар баҫып сығаралар. М. Меховскийҙың шул хеҙмәтенә ышанып, күп кенә Көнбайыш Европала эшләнгән карталарҙа Урал тауҙарын күрһәтмәй башлайҙар! Герард Меркатор үҙенең атласында Урал тауҙарын сағылдыра һәм шуның менән хата фекергә юл яба. Тап шуның менән бөйөк фламанд картографының хеҙмәте беҙҙең өсөн мөһим.

**Айбулат ПСӘНЧИН, география фәндәре докторы.**




*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# ӘЛМИСАҠТАН...



➔ XV б. 2-се яртыһы - XVI б. баштары - Мәшһүр Ҡобағош сәсән йәшәгән осор.

➔ 1508 йыл - Ҡаҙан ханлығының Иван Өсөнсөгә ебәрелгән илселәре араһында башҡорт Ҡара Килембәт тә була.

➔ 1552 йыл - Иван Грозный Ҡаҙанды яулай. Татарҙар, сыуаштар, удмурттар, мордвалар урыҫтан ҡасып, Уралға килеп һыйына.

➔ 1554 йыл ахыры - 1555 йыл башы - Төньяҡ-көнбайыш башҡорттарҙың гәйнә, уран, буләр, байлар, ирәктә, ҡара-табын һәм танып ҡәбиләләре үҙ теләктәре менән Рус дәүләтенә ҡушыла.

➔ 1555 йылдың көҙө - Мендәр (Ҡәнзәфәр бей етәкселегендә), юрматылар (Тәтегәс бей), аҙнайҙар (Ҡармыш бей) Рәсәй дәүләтенә ҡушыла.

➔ 1556-1557 йылдар - Рус дәүләтенә шулай уҡ үҫәргәндәр (Бикбау бей), бөрйәндәр (Иҫке бей), ҡыпсаҡтар (Муша бей), тамьяндар (Шәғәле Шаҡман бей) ҙа ҡушыла.

➔ 1556 йыл - Табындар (Күрпәс бей) менән көҙәйҙәр Рәсәй составына инә.

➔ 1558 йыл - Иван Грозный Григорий менән Яков Строгановтарға Кама йылғаһы башынан алып уның урта төшөнә тиклем 10 миллион дисәтинәнән ашыу ерҙе "мәңгелеккә файҙаланыуға" бирә. Уралда Строгановтар вотчинаһының барлыҡҡа килеүе. 1556 йылдан Строгановтар ере опричнинаға индерелә. 1574 йылдан Уралда һәм Себерҙә ҡалалар төҙөлөшө өсөн Строгановтарға грамоталар тапшырыла.

➔ 1574 - Батша приказы буйынса воевода Иван Нагой Өфө нығытмаһы төҙөй башлай. Өфөнең эргә-тирәһенән Иван Нагой менән бергә килгән баяр балаларына, стрелецтарға ер бүлеп бирелә, рус ауылдары барлыҡҡа килә.

➔ 1575 йыл - Өфө төҙөлөшө менән ризаһыҙлыҡ белдереүсе Себер хандары нығытмаға һөжүм яһап ҡарай, ләкин уңышһыҙлыҡҡа осрайҙар һәм әсирлеккә эләгәләр.

➔ 1582 йылдан башлап - Рәсәйгә Мейәс, Исет, Әй, Ҡариҙел йылғалары буйында йәшәгән һәм көнсығыш башҡорттар ҡушыла.

➔ 1586 йыл - Башҡорттар Обь йылғаһы янында себер ханы Күсемдең ғәскәрен ҡыйрата. Күсем хан Урта Азияға ҡаса. Армия менән уның улы етәкселек итә башлай.1608 йылда ул башҡорттарға әсирлеккә эләгә. Шуның менән себер халыҡтарының башҡорттарға ҡаршылығы һындырыла һәм башҡорт ерҙәренең Рәсәй дәүләтенә ҡушылыуы тамамлана.

➔ 1586 йыл - Яйыҡ йылғаһы ярҙарына казактар күсеп ултыра, Ҡош-Яйыҡ ҡалаһына нигеҙ һалына.

**Дәүләт МӘҺӘҘИЕВ төҙөгән. (Дауамы бар).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Башҡорттарҙың этногенезы мәсьәләләре

Күрше илкүлмең-күлмең башҡорттары слы-мендәргә ҡарағанда көслө пигментацияға эйә (81,2 процент ҡуңыр тип), ҡыҫҡа аяҡлы булһалар ҙа (уртаса скелия күрһәткесе 87,8), оҙон буйлылар (169,8 сантиметр), уртаса түңәрәк башлылар (түңәрәк башлылар 65,6 процент булғанда уртаса баш күрһәткесе 80,9), бигүк тар танаулы түгелдәр (уртаса танау күрһәткесе 74), сағыштырмаса киң йөҙләләр (бит киңлегенең уртаса күрһәткесе 77,6). Әгәр 90 процент слымендәрҙең әсәләре татар йәки типтәр булыуын иғтибарға алһаҡ, этник планда таҙараҡ булған илкүлмең-күлмеңдәр һәм үҙ районының башҡа ҡәрҙәштәре менән сағыштырғанда ни өсөн уларҙа бындай айырмалыҡ булыуы аңлашыла ла.



Был район башҡорттарының типтары **һүрәттәрҙә** бирелгән.

Өсөнсө, башҡорттарҙың шул айырым тибы менән айырылып торған төньяҡ-көнбайыш өлкә Башҡортостандың төньяҡ, Өфө ҡалаһы параллеленән төньяҡтараҡ һәм Урал һырттарынан көнбайыштараҡ өлөштө алып тора. Был өлкә башҡорттары әҙерәк пигментация менән айырыла (ҡуңыр тип ни бары 61,3 процент). Уларҙың уртаса буйы 165 сантиметр, оҙон аяҡлылар (уртаса скелия күрһәткесе 89,3), мезатикефалдар менән сиктәш булғанса уртаса түңәрәк башлылар (түңәрәк башлылар 51,6 процент булғанда уртаса баш күрһәткесе 80,3), сағыштырмаса тар танаулылар (танау күрһәткесе 72,1), бит киңлеге ҙур булмағанлыҡтан (уртаса бит диаметры 141,6мм), тар йөҙләләр (бит һөйәге күрһәткесе 75,5), ҡолаҡтары ла сағыштырмаса ҡыҫҡа һәм киң.

Халыҡты ҡылыҡһырлау өсөн мең самаһы башҡорт тикшерелгән был ҙур өлкә ике районға - көнсығыш һәм көнбайыш - бүленә. Көнбайыш район башҡорттары көнсығыштыҡыларҙан ҡатнаш пигментация һәм уртаса оҙон буйлы башҡорттарҙың күплеге менән генә айырыла.

Көнсығыш район Көньяҡ Уралдың төньяҡ өлөшөн, Әй йылғаһы араһын, Урал армыттарының көнбайыш өлөшөн, атап әйткәндә Инйәр йылғаһы бассейнын алып тора. Был район халҡы составына әйләләр (көнсығыш сиктәге әйле дачаһынан башҡа), көҙәйҙәр, инйәр-ҡатайҙар, Ҡариҙел йылғаһы түбәнендә йәшәүсе мендәрҙәрҙең бер өлөшө, әйләләр араһында йәшәүсе таныптар инә. Бында йәшәүселәрҙең пигментацияһы өлкәнең көнбайыш районы менән сағыштырғанда көслөрәк (ҡуңыр тип 68,3 процент). Буй оҙонлоғо күрше көнсығыш өлкәнең төньяҡ районы кеүек үк (164,1 сантиметр), әммә оҙонораҡ аяҡлылар (уртаса скелия күрһәткесе 88,7). Баш күрһәткесе буйынса улар мезатикефалдар менән сиктәш булған уртаса түңәрәк башлы булыуҙары менән айырыла (түңәрәк башлылар 48,4 процент булғанда баштың уртаса күрһәткесе 80,1). Тар танаулылар (уртаса танау күрһәткесе 72,2), Урал аръяғындағы көнбайыш күршеләренә ҡарағанда тарыраҡ йөҙләләр (бит күрһәткесе 75,4, бит һөйәге диаметры күрһәткесе 141,9 мм).

*✓ Әгәр ауырыуҙарҙы бушлай дауалауҙы иҫәпкә алып, уны бюджет аҡсаһына әйләндергәндә, бер кешеләге бәләкәй формалағы сирҙе дауалау өсөн 500 мең һум аҡса кәрәк була. Шуға күрә сирҙе ваҡытында асыҡлап дауалау отошлораҡ.*



# ТУБЕРКУЛЕЗ – тик ниңәлер халыҡ

**Бөгөн һүҙ алып барасаҡ ауырыуҙың тамырҙары тарих төпкөлөнә барып тоташа. Мысыр мумиялары табылған археологик ҡаҙыныу эштәре уларҙа умыртҡа һөйәге туберкулезы булыуын асыҡлай. Гректар уны phtisis, йәғни ябығыу, сихут тип атай. Был сир хәҙер донъяла кешенең һәм хайуандарҙың төрлө микобактериялар һөҙөмтәһендә киң таралған ауырыуы булып иҫәпләнә. Бөгөнгө медицина алға киткән тип һаналған ваҡытта уны булдырмау, артабан таратмау өсөн нимәләр эшләнә? Ошо һәм һүҙ ыңғайында килеп тыуған башҡа һорауҙарға Республика клиник туберкулезға ҡаршы диспансерының баш табибы урынбаҫары, БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығының штаттан тыш фтизиатры Миннинур АЗАМАТОВА һәм БДМУ профессоры, медицина фәндәре докторы Хәниф ӘМИНЕВ яуап бирә.**

**► Республикала туберкулез сиренән дауалау буйынса ниндәй учреждениелар бар һәм был күрһәткес буйынса ниндәй хәл-торош күҙәтелә?**

**М. Азаматова:** Башҡортостанда өс ҙур диспансер: 1578 урынға иҫәпләнгән Республика клиник туберкулезға ҡаршы диспансеры, Стәрлетамаҡта - 275, Сибайҙа 185 койкалыҡ район-ара диспансер, шулай уҡ республика буйынса 51 тубкабинет эшләй. Мәғариф системаһында ла беҙҙең менән хеҙмәттәшлек итеүсе учреждениелар, йәғни Шафранда һәм Өфөлә ике шифахана-мәктәп бар. Унда балалар реабилитация, ата-әсәһе туберкулез менән сирләгән ғаиләләр балалары артабан дауалау үтә. Баш ҡаланың үҙендә генә ошо йүнәлештәге 9 мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһы эшләй. Уларға ла фтизиатрҙар балаларҙы ата-әсәһенән айырып тороу талап ителгән йәки Манту реакцияһына ныҡ һиҙгерлек булған осраҡта йүнәлтмә буйынса ебәрә һәм бындай категория йыл һайын тикшерелеп тора. Шулай уҡ 575 урынға иҫәпләнгән һәм дүрт филиалға эйә "Толпар" балалар шифаханаһы бар.

Ололарҙы Шафран, Аксаков, Глуховская шифаханаларына дауаланырға ебәрәбеҙ. Уларҙың тәүге икәүһе үпкә туберкулезы сирлеләрен дауалау һәм реабилитациялау менән шөғөлләнһә, өсөнсөһө үпкә булмаған туберкулез сирлеләр өсөн. Ауырыуҙар бушлай дауалана. Бюджетта был сығымдар ҡаралған һәм һалынған. Ололар араһында ла реабилитация саралары уҙғарылып тора. Былтыр 1500 кеше бушлай санаторийҙарҙа дауаланды. Рәсәй Һаулыҡ һаҡлау министрлығы "Голубая бухта" санаторийына ла путевкалар бүлә.

Илдә дөйөм алғанда ауырыуҙың кәмеүе күҙәтелә, ә Башҡортостанда ул Рәсәйҙә иң түбәндәрҙең береһе булып ҡала. Волга буйы, Урал федераль округында күрһәткестәр күпкә юғары. Мәҫәлән, Ырымбурҙа ул 100 мең кешегә 90 кешегә етә. Былтыр беҙҙә 100 мең кешегә 44 кеше ауырыны. Ҡаҙағстанда ауырыусылар һаны күп һәм улар Ырымбурға ныҡ йоғонто яһай. Күрше Татарстанда, Мордовияла, Удмуртстанда беҙҙәгегә ҡарағанда ауырыусылар күберәк.

Республикала быltыр йәмғеһе 1772 кеше сирләһә, шуларҙың 500-ө генә ауыл кешеһе. Күберәген ҡала халҡы ауырый. Ҡалалар буйынса Өфөлә кәмеү күҙәтелһә лә, республика буйынса ҡарағанда юғары булып ҡала. Бөрө, Салауат ҡалалары, Иглин районы үҙҙәрендә был сирҙең күп булыуын тимер юл буйында урынлашыуҙары менән бәйләһә, әлшәйҙәр Шафран шифаханаһын сәбәп итә. Дөйөм алғанда, ҡала эргәһендәге районда туберкулез күберәк асыҡлана. Асоциаль тормош алып барыусылар, бигерәк тә ир-ат күп ауырый, сөнки улар тәмәке тарта, эсә, гигиена һаҡламай, төрмәгә эләгә. Хатта беҙҙең стационарҙа ла, 80-90 койкалыҡ бүлексәлә, нигеҙҙә, ир-ат ята. Балалар араһында күрһәткестәр төрлөсә. Иң хәүефле ваҡыт - 0-4 йәш араһы. Аҫаба халыҡ был сир менән аҙыраҡ сирләй. Сирҙе йоҡтороу мөмкинлеге булған хәүеф төркөмөнә шәкәр сире, тын алыу юлдары сирҙәре, гастрит, сей яра, гепатит, ашҡаҙан-эсәк юлдары ауырыуҙары менән яфаланыусылар инә. Шуныһы хәүефләнергә мәжбүр итә: нигеҙҙә хеҙмәткә яраҡлы категория - 25-50 йәшлектәр ауырый. Һирәк кенә балалар ҙа был сиргә дусар була.

Республикала мигранттар менән проблемалар ҙа бар. Һаулыҡ һаҡлау министрлығы бойороғона ярашлы, улар поликлиникаларға беркетелә һәм, туберкулез осрағы асыҡланһа, мәғлүмәт миграция хеҙмәтенә ебәрелеп, граждандар депортациялана. 2013 йылда - 18, быltыр 15 кеше үҙ илдәренә ҡайтарылды. Әммә уларҙың бәғзеләре Башҡортостан теркәлеүен алған һәм республика граждандары булып иҫәпләнә. Ундайҙар араһынан беҙҙең пациент булып китеүселәр аҙ, әммә ауырыу асыҡлана икән, дауалайбыҙ.

Бынан тыш, туберкулездың башҡа төрҙәре лә бар. Бындай ауырыуҙар оҙаҡ ваҡыт дөйөм медицина селтәрендә дауалана. Мәҫәлән, умыртҡа һөйәге, бәүел юлдары, енси ағзалар, тире, күҙҙәр, һөйәктәр, быуындар, лимфа төйөндәре туберкулезы. Дөйөмләштереп әйткәндә, туберкулез - ул социаль сир, иҡтисади күрсәк: аҡса юҡлығы, туҡланыу наҡыҫлығы, йәшәү шарттарының насар булыуы тап туберкулез ауырыуына туранан-тура йоғонто яһай.

**Х. Әминев:** 2012 йылда донъяла туберкулез менән 8 миллион 600 мең кеше ауырыған. 2014 йылда был һан 9 миллионға еткән. Үлем күрһәткесе 1 миллион 300 мең булһа, быltыр - 1 миллион 460 мең.

Донъя буйынса 2013 йылда 100 мең кешегә 126 ауырыу иҫәпләнһә, сир 178 кешегә таралған, 16 кеше үлгән. Рәсәй буйынса 100 мең кешегә 63 кеше ауырый, 147 кешегә таралған, 11,4 кеше үлгән.

Ил буйынса сирләүселәрҙең иң юғары күрһәткесе Себерҙә һәм Алыҫ Көнсығышта. Унда 100 мең кешегә 100 сирленән дә артып китә. Себер киңлектәренә ни тиклем төпкәрәк үтәһең - шул тиклем ауырыу киңерәк ҡолас ала. Быны инде унда элек-электән төрмәләрҙең күплеге менән бәйләйҙәр. Һөргөн ваҡытынан алып унда күп ауырыуҙар эләккән һәм таралған. Унда ла диспансерҙар эшләй, әммә быға тиклем туберкулезға етди иғтибар булмауы арҡаһында сир таралырға өлгөрҙө.

Күршеләрҙә - Түбәнге Новгородта, Һарытауҙа хәлдәр беҙҙәгегә ҡарағанда күпкә насар. Әгәр етди иғтибар юҡ икән, һөҙөмтә лә булмаясаҡ.



**► Әйтеп китеүегеҙсә, иҡтисади күрсәк тә был сирҙең таралыуында үҙ ролен уйнай. Ләкин тотош илдә барған был күренеште тиҙ генә туктатып булмауы көн кеүек асыҡ. Шулай ҙа туберкулез тағы ла ниндәй факторҙар арҡаһында киң тарала?**

**Х. Әминев:** Республикала вич-инфекциялыларҙың һаны арта. Уларҙың иммунитеты булмауы сәбәпле, тиҙ генә туберкулез йоҡтороуҙары мөмкин. Биш йыл элек вич-инфекциялы 193 кеше иҫәптә торһа, бөгөн ундайҙар һаны 464 кеше. 2013 йылда донъяла туберкулез менән ауырыусы 9 миллион кешенең 1 миллион 100 меңе - вич-инфекциялылар. Йәғни улар 13 процентты тәшкил итә. Шуға күрә лә хәҙер проблема киҫкенләшә бара. Әгәр вич-инфекцияны туҡтата алмаһаҡ, туберкулезды бөтөрөү тураһында хыялланырға ғына ҡала.

Төньяҡ һәм Көньяҡ Американы алып ҡараһаҡ, 100 мең кешегә сирләүселәр һаны 29, үлеүселәр - 2. Шул фонда Африкаға күҙ һалайыҡ. 100 мең кешегә ауырыусылар һаны 280, үлеүселәр - 74. Көньяҡ Африкала ауырыуҙарҙың яртыһы - вич-инфекциялылар. Шуға ла үлем кимәле юғары.

Беҙҙә, үкенескә күрә, вич-инфекциялылар арта бара һәм 60 процент осраҡта сир енси юл менән тарала. Быltыр республикала 2862 вич-инфекциялы кеше асыҡланған. Йыл дауамында уларҙың 10 проценты туберкулез йоҡторған. Шуға күрә, әгәр быltыр вич-инфекциялы 167 кеше ауырыһа, тиҙҙән был һан 280-гә етеүе мөмкин. Үкенескә күрә, вич-инфекциялы балалар һаны 144. Ошо фонда балаларҙың туберкулез менән сирләүенең артыу хәүефе бар һәм бында инде көрәш ауыр буласаҡ.

Икенсе проблема - туберкулездың күп дарыуҙарға тотороҡло, киң спектр дарыуҙарға тотороҡло һәм дарыуҙарға бөтөнләй тотороҡло төрҙәренең артыуы. Быltыр беренсе тапҡыр күп дарыуҙарға тотороҡлолоғо асыҡланған ауырыуҙар 3,5 процент тәшкил итте. Быға тиклем дауаланыусылар араһында был күрһәткес 20, 5 процент ине. Йәғни һәр дүртенсе ауырыу - күп дарыуҙарға тотороҡло. Әгәр был процесты туҡтата алмаһаҡ, туберкулезды киң күләмле ауырыу булараҡ бөтөрөү хыялда ғына ҡаласаҡ. Был турала Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы 1997 йылда уҡ иҫкәрткәйне. Шуға күрә барлыҡ тырышлыҡ шул йүнәлештә алып барылырға тейеш.

Быltыр бактерия бүлеп сығарыусы ауырыуҙар араһында беренсе тапҡыр дарыуҙарға тотороҡлолоҡ 56,5 процент кешелә асыҡланған. Иҫәптә тороусылар араһында - 83 процент. Күп дарыуҙарға тотороҡлолоҡ - 34 процент, киң спектр дарыуҙарға тотороҡлолоҡ - 7,2 процент.

Туберкулез буйынса Үҙәк институт мәғлүмәттәренә ҡарағанда, күп спектрлы дарыуҙарға тотороҡло ауырыуҙы дауалау 2 миллион 858 мең һум тора. Әгәр бындай төр ауырыуҙар һанының артыуын туҡтата алмаһаҡ, бик күп финанс сығымдары тотонорға тура киләсәк. Сөнки әле бүленгән аҡса бындай ауырыуҙарҙы дауаларға етмәй. Уларҙы дауалау ике йылға һуҙыла. Был беҙҙең генә мәғлүмәттәр түгел, ә американдарҙыҡы.

Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы мәғлүмәттәре буйынса туберкулезды һәм вич-инфекцияны дауалау һөҙөмтәлелеге 40-48 процент тәшкил итә. Әлбиттә, ваҡытында дауаланыусылар, ретровирусҡа ҡаршы терапия алыусылар ғүмерен оҙайта ала, вич-инфекциялы булып та 20 йылдан ашыу йәшәүселәр бар, туберкулез диагнозы 10 йыл элек ҡуйылыусылар ҙа иҫәндәр.

**► Халыҡтың шундай ғәҙәте бар: ниндәйҙер ауырыуҙан дауалана башлай ҙа, саҡ ҡына еңеллек тойһа, дауаланыуын туҡтата ла ҡуя. Туберкулез сирлеләр ҙә шундай уҡ "тыңлауһыҙмы"?**

**М. Азаматова:** Эйе, дауаланыуҙы ахырынаса алып барып еткермәгән кешеләр ҙә бар. Әлбиттә, дауаланыу ваҡыты бик оҙайлы һәм ҡиммәтле. Әгәр ауырыуҙарҙы бушлай дауалауҙы иҫәпкә алып, уны бюджет аҡсаһына әйләндергәндә, бер кешеләге бәләкәй формалағы сирҙе дауалау өсөн 500 мең һум аҡса кәрәк була. Шуға күрә сирҙе ваҡытында асыҡлап, ваҡытында дауалау күпкә файҙалыраҡ та, отошлораҡ та. Быltыр республикала сирҙең аҙған бер генә осрағы теркәлде. Әммә хроник сирлеләр бар. Улар, нигеҙҙә, хөкөм ителеүселәр. Уларҙың ҡайһы берҙәрен дауаланыуға мәжбүр итеүҙең берҙән-бер юлы - хоҡуҡ һаҡлау органдары аша, суд ҡарары буйынса эшләү. 77-се Федераль закон ҡабул ителгән ваҡытта бындай категорияны дауалауҙы мәжбүри итергә кәрәк, тигән тәҡдим индерелгәйне, әммә был кеше хоҡуҡтарын боҙа, тип, ҡабул итмәнеләр. Шулай булһа ла, беҙ ошо ҡануындың 10-сы статьяһы нигеҙендә дауаланыу режимын яуыз ниәттә боҙоусыларҙы суд аша диспансерға килергә мәжбүр итәбеҙ. Был, үкенескә күрә, ҡайһы бер ошо категория сирлеләр беҙгә янаған осраҡтар булғанда ла - берҙән-бер юл. 2013 йылда суд аша 75 кешене дауаланырға мәжбүр иттек. Быltыр 300 кеше ирекtән мәхрүм итеү урындарынан сыҡһа, уларҙың 85 проценты ғына килеп дауаланды, ә 45 кеше менән мәсьәлә суд аша хәл ителде. Ҡалғандар һыуға төшкәндәй юғалды. Хәҙер уйлап ҡарағыҙ инде: әгәр ул кешеләрҙә сир аҙған булһа, тирә-яҡ мөхиткә ҙур күләмдә микобактериялар бүлеп сығарыуы менән республика халҡы өсөн ҙур хәүеф тыуҙыра. Участка фтизиатрҙары ундай кешеләрҙе эҙләй, күрһәтелгән адрес буйынса йәшәһәләр, табабыҙ, әгәр инде икенсе яҡҡа сығып киткән булһалар, хәлдәр

*Республикала вич-инфекциялыларҙың һаны арта. Уларҙың иммунитеты булмауы сәбәпле, тиҙ генә туберкулез йоҡтороуҙары мөмкин. Биш йыл элек вич-инфекциялы 193 кеше иҫәптә торһа, бөгөн ундайҙар һаны 464 кеше. 2013 йылда донъяла туберкулез менән ауырыусы 9 миллион кешенең 1 миллион 100 меңе - вич-инфекциялылар. Йәғни улар 13 процентты тәшкил итә. Шуға күрә лә хәҙер проблема киҫкенләшә бара. Әгәр вич-инфекцияны туҡтата алмаһаҡ, туберкулезды бөтөрөү тураһында хыялланырға ғына ҡала. Төньяҡ һәм Көньяҡ Американы алып ҡараһаҡ, 100 мең кешегә сирләүселәр һаны 29, үлеүселәр - 2.*

✓ ***Мөмкинлектәре булыусыларға мин генетикаһын билдәләргә тәҡдим итер инем. Бөгөнгә кешенең туберкулез микобактерияларына һиҙгер булған генотиптары билдәле. Генотип - һиҙгер антигендарҙы асыҡлау.***



# ҠУРҠЫНЫС СИР,
## унан ҡурҡмай...

ҡатмарлана. Шулай уҡ Башҡортостан буйынса Яза башҡарыу федераль хеҙмәте (ФСИН) менән берлектә эш алып барабыҙ. Уларҙың ауырыуҙарҙы дауалауҙың барлыҡ шарттары, үҙҙәренең СИЗО-һы, республика дауаханалары бар. Былтыр унда 410 урын ине, быйыл 300 самаһы ҡалған. Ләкин был кәмеү сағыштырмаса ғына. Сөнки хөкөм ителеүселәр араһында 100 мең кешегә ауырыусылар һаны 1200-гә етә. Республика күрһәткесе эргәһендә был бик юғары. Ҡайһы бер тотҡондар ирекккә сығып, күпмелер ваҡыттан һуң ҡабат ниндәйҙер тәртип боҙоп, ҡабат тимер рәшәткә артына эләгә.

**Х. Әминев:** Былтыр БР Фәндәр академияһы менән берлектә 323-сө Закон проектына бактерия бүлеп сығарыусы һәм дауаланырға теләмәүсе яуыз ниәтле ауырыуҙарҙы ҡайһы бер илдәрҙәге кеүек мәжбүри изоляциялау тәҡдиме менән сыҡҡайныҡ. АҠШ-та был хаҡта ҡысҡырып һөйләмәһәләр ҙә, бактерия бүлеп сығарыусы ауырыуҙарҙы айырым бикләп ҡуялар һәм бактерия бүленеү туҡтағансы бер ҡайҙа ла сығармайҙар. Хәл-тороштан сығып ҡарағанда, үкенескә күрә, үҫеп килеүсе йәш быуындың төрлө башҡа сирҙәр менән ауырыу осрағы арта. Әгәр анализлап ҡараһаҡ, беҙҙең сирлеләрҙең 24,9 проценты, йәғни һәр дүртенсе кеше, бер үк ваҡытта икенсе ауырыуҙар менән сирләй. Был инде өҫтәмә сығымдар талап итә һәм дауалау ҙа ҡатмарлаша.

▸ **Быға тиклем туберкулезды ярлылар ауырыуы тип нарыҡлаһалар, күптән түгел Беренсе каналдан уның менән байҙар ҙа сирләүен белдерҙеләр. Ғәмәлдә, кемдәрҙең ауырыуы ул "сихут"?**

**Х. Әминев:** Эйе, ауырыу баймы, ярлымы, ҡарап тормай, әммә бер "ләкин" бар. Беҙҙең ауырыуҙарҙың 67 проценты - эшһеҙҙәр. Вич-инфекциялылар араһында 90 процент - эшһеҙҙәр. Шуға күрә, был ярлыларҙың өлөшөнә төшкән сир, тиергә мөмкин. Әммә килемдәренә зарланмаусылар араһында ла туберкулез сирлеләр һаны арта. Сәбәбен оҙаҡ уйлап йөрөй торғас, шундай һығымтаға килдем: стресс торошо. Был үҙ сиратында иммунитетты кәметә һәм теләһә ниндәй сир, шул иҫәптән туберкулез да, йоғорға мөмкин.

Килемдәре юғары каста тураһында һүҙ башлағас, бында шул турала ла әйтеп китеүҙе урынлы һанайым: бер бай сирле диагнозы асыҡланғас, сит илгә консультацияға барған. Уға: "Барлыҡ шарттар тыуҙыра алабыҙ, әммә Рәсәйҙәге коллегаларыбыҙҙан да яҡшыраҡ дауалай алмаясаҡбыҙ, сөнки беҙҙә туберкулез бөтөнләй тиерлек юҡ, тәжрибә онотолған", - тигәндәр. Быны менән нимә әйтергә теләйем: Рәсәй табиптары ла башҡаларҙан кәм түгел. Һуңғы йылдарҙа бронхоблокада ысулы индерҙек. Ул ярағa имен генә уңалыу мөмкинлеге бирә. Шулай уҡ тераскопия операцияһын, халыҡса әйткәндә, тишек аша ғына операция эшләү ысулын үҙләштерҙек. Хәҙер был ысулдар зыянлаған туҡыма бәләкәй күләмдә булғанда киң ҡулланылыш ала бара.

Мөмкинлектәре булыусыларға мин генетикаһын билдәләргә тәҡдим итер инем. Бөгөнгә кешенең туберкулез микобактерияларына һиҙгер булған генотиптары билдәле. Генотип - Ошаго системаһы буйынса һиҙгер антигендарҙы асыҡлау. Төрлө милләттәрҙә ул төрлөсә. БР Фәндәр академияһы менән хеҙмәттәшлек иткәндә 27 тикшеренеү үткәргәйнек, әммә артабан тикшеренеүҙәр алып барыуға аҡса бирмәнеләр һәм эш туҡтап ҡалды. Генетик лаборатория мөдире, профессор Эльза Хөснөтдинова менән былтыр һөйләшеп килешкәйнек, әммә мәсьәлә тағы ла шул аҡса юҡлыҡҡа барып төртөлдө. Рәсәйҙең Үҙәк институты ла был эш менән шөғөлләнә башлағайны, әммә ҡыҙыҡһыныусылар үлеп бөттө, артабан дауам итеүсе булманы. Әгәр ошо генотиптарҙы белһәк, ул ваҡытта инде йыш ауырыусылар менән түгел, ә кем туберкулезға һиҙгер, шулар менән маҡсатлы эш алып барыр инек.

▸ **Башҡортостан, Рәсәй буйынса туберкулез сирлеләрҙең иҫәбе алып барыламы?**

**М. Азаматова:** Беҙҙә һәр ауырыу иҫәптә, компьютерға инделгән. Әгәр берәй сирле вафат булып, ул беҙҙә иҫәптә тормаһа, ә уны туберкулездан үлде, тиҙәр икән, ундайҙар барлығы дүрт кеше булды, уларҙы тикшерәбеҙ, сәбәптәрен асыҡлайбыҙ. Иң дөрөҫ мәғлүмәт - Росстаттың халыҡтың туберкулездан үлеү күрһәткесе. Әлбиттә, кеше туберкулездан үлергә тейеш түгел, әммә ваҡытында табипҡа мөрәжәғәт итмәй, профилактика маҡсатында ла тикшерелеү үтмәй йөрөүселәр бар. Шул сәбәпле 2013 йылда 398 кеше мәрхүм булды. Был 100 мең кешегә 9,8 кеше тигән һүҙ. Әммә былтыр был һан 333 кеше ине. Сағыштырып ҡарағанда, һиҙелерлек кәмеү күҙәтелә.

Иҫәптә тороусы бацилярлы ауырыуҙарҙы, башҡаларҙы зарарламаһындар өсөн, госпитализацияларға тырышабыҙ. Бөгөн дауалауҙың терапевтик алымдарын ғына түгел, хирургия ысулдарын да ҡулланабыҙ, хатта ауыр сирлеләргә лә операция яһайбыҙ

Шулай уҡ беҙ Роспотребнадзор менән берлектә эшләйбеҙ. Туберкулез асыҡланған осраҡтар һәр саҡ етди контроль аҫтында була, сығанаҡтар эшкәртелә. Әгәр кеше ҡайҙалыр эшләгән икән, уның эш урынына хәбәр итергә һәм унда эшкәртеү үткәрергә тейешбеҙ. Әлбиттә, күптәр үҙенең ауырыуы тураһында эшендә белгертеп бармай, ләкин беҙ йәшереп ҡалдыра алмайбыҙ. Сөнки был сир башҡалар өсөн хәүеф сығанағы булып тора.

▸ **Туберкулез тормошобоҙға ныҡлы үтеп инмәһен өсөн ниндәй профилактик саралар үткәрергә мөмкин?**

**М. Азаматова:** Тәү сиратта, сәләмәт тормош алып барыу, спорт һәм физик культура менән шөғөлләнеү, ваҡытында ашау, тәмәке тартмау, спиртлы эсемлектәр эсмәү һәм, әлбиттә, сирлеләр менән аралашмау. Кемдең ауырығанын, кемдең ауырымағанын белеп булмай, әлбиттә, сөнки барлыҡ ауырыуҙар ҙа диспансерҙа ятмай. Әммә диспансер иҫәптә бик күп кеше тора. Балалар араһында был һан 10 мең. Улар ауырыу түгел, ә хәүеф төркөмө тип әйтер инем, йәғни йә Манту реакцияһы ыңғай булған, йә саманан артыҡ һиҙгерлек күҙәтелгән, оҙаҡ һәм йыш ауырыған балалар. Кәрәк икән, беҙ уларға дауаланыу билдәләйбеҙ. Бөгөнгә балаларҙа туберкулезды диагностикалау өсөн диакинтест тигән аллерген бар. Барығыҙ ҙа бала тыуыу менән уға БЦЖ прививкаһы эшләнеүен беләһегеҙ. Былтыр республикала 55 мең бала тыуһа, уларҙың 98 процентына прививка яһалған. БЦЖ бала организмында яһалма иммунитет булдыра һәм кешелә ғүмер дауамында Кох таяҡсаларына бирешмәүсәнлек барлыҡҡа килә. Хатта барыһы ла ауырығанда ла, был кеше сәләмәт тормош алып бара, ваҡытында һәм яҡшы итеп туҡлана, ваҡытында тикшерелеп тора икән, улар бер ҡасан да сиргә бирешмәйәсәк. Ете йәшкә тиклем йыл һайын Манту прививкаһы эшләнә. Ул инде БЦЖ организмда йәшәп киткәнме, юҡмы икәнлеген тикшереү өсөн яһала. Ете йәштә ревакцинация яһала, йәғни тағы ла яһалма иммунитет булдырыла.



> ***Тәү сиратта, сәләмәт тормош алып барыу, спорт һәм физик культура менән шөғөлләнеү, ваҡытында ашау, тәмәке тартмау, спиртлы эсемлектәр эсмәү һәм, әлбиттә, сирлеләр менән аралашмау. Кемдең ауырығанын, кемдең ауырымағанын белеп булмай, әлбиттә, сөнки барлыҡ ауырыуҙар ҙа диспансерҙа ятмай. Әммә диспансер иҫәптә бик күп кеше тора. Балалар араһында был һан 10 мең. Улар ауырыу түгел, ә хәүеф төркөмө тип әйтер инем, йәғни йә Манту реакцияһы ыңғай булған, йә саманан артыҡ һиҙгерлек күҙәтелгән, оҙаҡ һәм йыш ауырыған балалар. Кәрәк икән, беҙ уларға дауаланыу билдәләйбеҙ.***

Европаның туберкулез күрһәткесе түбән булған илдәрендә, мәҫәлән, Германияла, Испанияла туберкулезға ҡаршы прививкалар эшләнмәй. Унда 100 мең кешегә 5 ауырыу тура килә. Бәлки, беҙ ҙә ҡасандыр ошо кимәлгә төшөрбөҙ. Уйлап ҡараһаң, бөтөн ер шарында сәсәк бөттө һәм беҙ уға ҡаршы прививка яһамайбыҙ. Сәсәк бөткәйне, башҡа инфекциялар килеп сыҡты. Биҙгәк юҡҡа сыҡҡайны, Эбола, төрлө пневмониялар барлыҡҡа килде.

15 йәштән үҫмерҙәргә флюорографик тикшереү үткәрәбеҙ. Сәләмәт кешеләр, Һаулыҡ һаҡлау министрлығының бойороғона ярашлы, ике йылға бер тапҡыр был процедураны үтеп торорға тейеш. Балалар учреждениеларында, аҙыҡ-түлек блоктарында, йәмәғәт туҡланыуы урындарында, сауҙа өлкәһендә эшләүселәр йышыраҡ тикшерелә: кемдер йылына бер тапҡыр, кемдер йылына ике тапҡыр. Эш биреүсе тикшереү үткәреүҙе ойошторорға бурыслы. Ә эшләмәүселәр менән дөйөм медицина селтәре шөғөлләнә. Әгәр ауырыу төпкөл райондан, төпкөл ауылдан һәм түшәктә ята икән, беҙ уның ҡаҡырығын алып тикшерәбеҙ, микроскопия үткәрәбеҙ.

**Х. Әминев:** Бик йыш вакцинация һәм ревакциянация мәсьәләһе буйынса мөрәжәғәт итәләр. Ҡайһы бер 100 мең кешегә 5-6 ғына ауырыу иҫәпләнгән илдәрҙә кешеләрҙе өҫтәмә дарыуҙар менән ағыуламаясаҡтар һәм был аңлашыла ла. Швецияла, сир ҡапыл кәмегәс, айырым территорияларҙа вакцинациянан баш тарттылар. Әммә бынан һуң туберкулез менингиты барлыҡҡа килде һәм улар ҡабаттан вакцинацияны тергеҙергә мәжбүр булдылар. Шуға күрә, бындай хәүеф тураһында ла иҫтән сығармайыҡ. Әлеге ваҡытта көрсөккә һылтанып, Манту прививкаһы һәм флорографиянан баш тартыу тураһында һүҙ алып баралар. Был идеологияны "дуҫтарыбыҙ" үҙгәртеп ҡороуҙар башланғандан уҡ тормошҡа ашырырға тырыша ине, хатта илдең баш фтизиатрын эштән дә ебәреүгә өлгәштеләр, әммә көрәш һаман дауам итә. Быға бер нисек тә юл ҡуйырға ярамай. Сөнки беҙҙең илдә туберкулез менән сирләүселәр һаны күп. Әгәр был күрһәткес 100 мең кешегә 10 кеше була икән, ул саҡта уйлап ҡарарға мөмкин. Ә инде вакцинациянан баш тартҡан илдәрҙә был һан 4,7 - 4,8 кеше тәшкил итә.

Францияла, мәҫәлән, вакцинация индергәс, өс йыл эсендә балаларҙың һәм үҫмерҙәрҙең туберкулез менән сирләүе 15 процентҡа кәмегән. Был вакцинаның туберкулезға ҡаршы эшмәкәрлегенең яҡшы күрһәткесе. Бөгөн тағы ла 12 вакцина эшләнелә, уларҙың икеһе - профилактика, 10-һы дауалау йүнәлешендә. Улар нисек тормошҡа ашырылыр - ваҡыт күрһәтер.

▸ **Туберкулез сирлеләрҙең тышҡы күрһәткесенең береһе - йүтәл. Беҙ ябай сир тип һанаған респиратор инфекция менән ауырыусыларҙың йүтәлен туберкулез сирлеләрҙекенән айырыу мөмкинме?**

**Х. Әминев:** Үкенескә күрә, бер нисек тә айырып булмай. Туберкулез ОРВИ, ОРЗ, хатта киҙеү кеүек тә башланырға мөмкин. Әгәр ҡаҡырыҡ көслө бүленә, ҡан төкөрөү, төнөн тирләү, йүтәл барлыҡҡа килә, ябыҡтыра, аппетит юғала икән, тимәк, кеше туберкулезға дусар булған. Шулай ҙа туберкулезды ябай ауырыуҙан айырыуҙың бер ысулы бар: пневмония булғанда ҡаҡырыҡ еҫле булһа, туберкулезда бер ниндәй еҫ юҡ. Әммә кеше үҙенең сәләмәтлегенә битараф булмаһа, тәбиғәт уға һаҡланыу мөмкинлектәрен һалған. Микобактериялар тын юлдарына үтеп ингәс, ундағы керпекле (мерцательный) эпителийға эләгә, эпителий лайла бүлеп сығара һәм улар Кох таяҡсаларын урап алып, кеше ҡаҡырғанда кире сығара. Ә инде тәмәке тартҡан кешеләрҙең йәки елһенеү, бронхит ваҡытында эпителий зарарлана һәм микобактериялар ҡаршылыҡһыҙ альвеолаға, ваҡ бронхиолаларға үтеп инә. Артабан инде лимфаген ҡан юлдары аша тарала. Туберкулез менән сирләүселәрҙең 98 проценты - тәмәкеселәр.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**РФ Һаулыҡ һаҡлау министрлығы 2020 йылға туберкулезды бөтөрөргә тигән бурыс ҡуя... Әммә, әңгәмә барышында асыҡланыуынса, республикала әлегә йыллыҡ кәмеү - 3, ил буйынса 1,5 процент ҡына тәшкил итә. Һәм бөгөнгө динамика, сирҙең дарыуҙарға тотороҡлолоғо арта барыуы, ә яңы ысул - генетика буйынса тикшеренеүҙәр алып барырға финанстар юҡлығы, тағы ла күпмегә һуҙыласағы билдәһеҙ көрсөк фонында был талап хыял ғына булып ҡалмағайы. Сөнки ошо өлкәлә эшләүсе табиптарҙың быға өмөтө бик юҡ. Бында бары тик йәмғиәттең әхлаҡи принциптарын үҫтереү һәм күпләп сәләмәт тормош алып барырға ҡарар итеү генә үҙ һүҙен әйтеүе мөмкин. Ниндәй юлды һайлауыбыҙ үҙебеҙҙән тора.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

**✓ Бөйөк Ватан һуғышы башланыр алдынан уларҙың ауылында тик малайҙар ғына тыуған. Кем белә, әллә уларҙың нәҫеленә Хаҡ Тәғәлә тик ҡыҙҙар ғына ебәреп, ниндәйҙер оло бәлә-ҡазанан аралаймы икән?**



Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ

# ХОҘАЙ БИРГӘН МАЛАЙ*

(Хикәйә)



*Аптыраным был ҡатынға:*
*Ҡыҙ таба ла, ҡыҙ таба.*
*Һин тимен, малай хаҡында*
*Докторға барып ҡара...***

Шағир был юлдарҙы фәҡәт Кәримгә һәм уның ҡатыны Зөләйхаға арнап яҙған һымаҡ. Ҡулынан балтаһын төшөрөрлөк, атаһын шатлыҡ атына атландырырлыҡ, һис юғы фамилияһын дауам итерлек йоморо ҡара малай табып бирмәне бит тәки ҡатыны. Һис юғы, берәүҙе. Орлоҡ өсөн. Атай нигеҙен кем һаҡлар? Әллә Аллаһы Тәғәлә уларға малай лимиты бүлмәгәнме? Уларға ғына булһа, бер асыу. Кәримдең ир туғандары араһында ла һуңғы ун йылда малайлы кешеләр юҡ. Шыр ҡыҙҙар. Гел ҡыҙҙар тыуыуҙы донъя тыныслығына, бәрәкәтле тормошҡа юрау ҙа бар халыҡта. Өлкәндәрҙең иҫләүе буйынса, Бөйөк Ватан һуғышы башланыр алдынан уларҙың ауылында тик малайҙар ғына тыуған. Герман һуғышы сығыр алдынан да шундай уҡ хәл күҙәтелгән, тиҙәр. Кем белә, әллә уларҙың нәҫеленә Хаҡ Тәғәлә тик ҡыҙҙар ғына ебәреп, ниндәйҙер оло бәлә-ҡазанан аралаймы икән?

Ҡыҙҙарға бай булғандары өсөн Кәримдең затындағы ир-аттарҙы мәрәкәләп-шаяртып "ювелир оҫталары" тип атап йөрөтәләр. Имеш тә, ҡыҙ баланы донъяға яралтыу өсөн бигерәк тә атай кешенән ювелир оҫталығы, уның әйберҙәрҙе һырлағандағы нәзәкәтлеге, биҙәгәндәге нескәлеге, илаһи һөләте талап ителә икән дә. Ә малай тыуҙырыу өсөн арлы-бирле балта тотоп, утын яра белһәң дә етә, имеш. Бына һинә - мә! Берәү әйтер: ҡыҙ табыуҙың ни ауырлығы бар, бына һин малай табып ҡара. Ҡайһы берәүҙәрҙең әлегә туҙға ғына яҙған фекеренсә, әгәр ҙә ир кеше ҡатынын нығыраҡ яратһа - ҡыҙ бала, ҡатын ирен нығыраҡ һөйһә - ир балалар донъяға ярала, имеш. Бәй, ошонан һуң да Кәримдең хәләле, мине ирем яратмай, тип әйтеп ҡараһын. Ә бына һис малай тапмаған ҡатынына ул шулай тип әйтә ала. Хатта әйткәне лә бар.

Ир бала тыуҙырыуҙың ауырлығы ла бар, тиҙәр. Быныһын табиптар әйтә: ҡыҙ балалар сос, етеҙ була, мөҙҙәте етер-етмәҫтән әсәһенең балаятҡыһынан яҡты донъяға сығырға ашҡына, тибешә башлай. Ҡыҙҙарҙың ир затына ҡарағанда иртәрәк өлгөрөүе лә шул сослоҡҡа һәм етеҙлеккә бәйле. Малайҙар иһә, әллә инде үҙҙәрен мең михнәттәр көткән донъяға тыуырға теләмәйенсә, үҗәтләнеп ята бирә, кендек аша әсәһенең һутын һурыуын ғына белә. Хәс тә ата-әсәһенең пенсияһына йәшәгән ялҡау бешәлкәһеҙ егет һымаҡ.

Ҡатын менән йоҡларға ятыр алдынан түшәк йә яҫтыҡ аҫтына балта һалыу тураһындағы лаҡап та тап ошо хәлгә бәйле. Имеш тә, был йоланың аҫылын аңламаған ситтән төшкән бер килен, ирем мине төндә сабып үлтерер өсөн балтаһын шунда һалып йоҡлай, тип уйлап, шикләнеп йөрөгән-йөрөгән дә, тегеһе был ғәҙәтен ташламағас, ахыр сиктә, милицияға мөрәжәғәт иткән. Улар йоҡларға ятыр алдынан килгән тәртип һаҡсылары. Йәш сержанттар. Улар ҙа был йолаһырым хаҡында белмәйҙәр икән. Протокол төҙөгәндәр. Йәш кейәү йоланың мәғәнәһен тегеләргә ҡат-ҡат аңлатып ҡараған. Тәүҙә унан көлгәндәр, аҙаҡ нығыраҡ тотонғандар. Һөҙөмтәлә кейәү баланы баллы-майлы айындағы йылы түшәгенән айырып, алып барып бикләп үк ҡуйғандар. Ваҡиғаның аҙағы нисек бөткәндер, иллә-мәгәр, ирем мине балта менән сабып үлтерә, тип милиция саҡыртҡан ҡатын бер-бер артлы дүрт малай тапҡан, тиҙәр. Ҡурҡышынан микән? Әллә теге ырымдың тәьҫире көслө булғанмы?

Зөләйха малай тапманы, уның ҡарауы, ике йылға бер тапҡыр береһенән-береһе гүзәлерәк, береһенән-береһе нәфисерәк, береһенән-береһе иркәрәк ҡыҙҙары берәм-берәм тупылдап тыуып ҡына торҙо. Исемдәрен дә әсәләренекенә оҡшатып ҡушырға тырыштылар: Зөлхизә, Зөбәйҙә, Зөлхәбирә, Зәлифә, Зөмәрә. Йорттағы бер түгел алты "З" хәрефенә башланған исемдәрҙең тәүлек әйләнәһендәге туҡтауһыҙ яңғырашында Кәримдең башы "зыйылдап" ҡына торҙо.

Теге шағир дөрөҫ әйткән икән: ҡыҙ булһа ла, белдегеҙме, нисауа була икән дә. Ҡыҙ бала - назлы бала. Ҡыҙ бала күберәген атаһына тартылыусан. Зөләйханы республиканың биш бала табыусы әсәләре менән берлектә баш ҡалаға саҡырып миҙал менән бүләкләнеләр. Тик атай кешегә һис юғы "Маладис атай" тигән маҡтау ҡағыҙы ла бирмәнеләр. Әммә күп балалы ғаилә башлы булыуҙың заманына күрә бик күп кенә уңайлыҡтары, йәғни льготалары бар...

Бик-бик иртә өйләнде Кәрим. Атаһы менән әсәһенең бер-бер артлы фанилыҡҡа күсеүе лә быға булышлыҡ иткәндер. Атаһының васыят итеп әйткән һуңғы һүҙе лә шулай булды: "Кеше, улым, утыҙ йәшкә тиклем үҙе өйләнмәй, утыҙҙан һуң ҡурҡып өйләнмәй. Буйҙаҡлыҡта бәхет юҡ ул. Өйлән, ҡырҡ йәшеңә тиклем өйөң балалар тауышы менән тулмаһа, мәхшәр менән тулыр..." Тиңдәштәре әле әрмеләрҙән ҡайтып, институт-фәләнгә инергә, аҡсалыраҡ эшкә урынлашырға, тип ҡалаларға юлланған бер ваҡытта Кәрим ағайыбыҙ назлы көләш ҡуйынында ине инде. Башҡалар белем эстәне, карьера яһаны, ҡалаларҙы яуланы, ә ул иһә урта мәктәпте тамамлағас, әрмегә барып килде лә, үҙенән өс йәшкә кесе Зөләйханы мәктәбен бөтөрөр-бөтөрмәҫтән әйттереп, ҡыҙ аттестат алғас, туй ҙа үткәрҙеләр. Кинйә малай булараҡ, Кәрим атай йортонда тороп ҡалғайны. Зөләйха йортҡа килен дә, хужабикә лә, ҡәйнә лә булып төштө. Кәримдең һөнәре етмештән ашып китһә лә, махсус уҡып алғаны сварщик һөнәре булды. Атаһы тимерсенең улы ла тимерсе.

Кәрим Зөләйханы балаға күмде. Әллә киреһенсәме икән? Зөләйха башта ҡалаларға ағылған әхирәттәренә көнләшеп ҡараны. Ҡалаға китәйек, тип, иренә туҡтауһыҙ тылҡыны. Әммә һәр бер ынтылышы сиратта тыуған ҡыҙ балаға ҡарата хәстәрлек менән баҫырыла килде. Ғаиләлә ҡыҙҙар һаны артыу менән был ынтылыш кәмей-кәмей барып, аҙаҡтан бөтөнләй онотолдо.

Шартына килтереп эшләй ҙә, йәшәй ҙә белә ине Кәрим. Барыһына ла өлгәште ул: иҫкеһен ҡутарып, сарҙаҡлы итеп йортон да һалды, ҡураһы тулы мал, ҡош-ҡорт, баҡса артындағы урман ситендә умарталары гөүләп ултыра. Баҡсаһында емеш-еләге, йәшелсә-фәләне күтәргеһеҙ булып уңа. "Ир хәстәрле булһа, ҡатын таҫтарлы" тиҙәр. Зөләйхаһы ла берҙе биш итергә тора.

Кәримдең тормошҡа ашмаған хыялдары ла бар. Бер түгел, икәү улар. Тәүгеһе йоморо ҡара малай булһа, икенсеһе - халыҡ телендә "Крузак" тип йөрөтөлгән "Ленд-Крузер" машинаһы. Тәүге хыялы, нимә генә итмәһен, үҙенән тормай - Хоҙай ихтыярында. Ә бына икенсеһенә килгәндә, Кәрим инде нисәмә йыл ир исемен күтәреп йәшәп, әҙәм рәтле машинаға тейенә алғаны юҡ.

"Ҡатын-ҡыҙ күрке - сепрәк, ирҙеке - ат". Был әйтем халыҡтыҡы иҫәпләнәме-юҡмы, иллә-мәгәр Кәрим йыш ҡына уны ҡабатларға ярата. "Ат" тигәне - хәҙергесә әйткәндә, машина. Быға тиклем Кәрим ауылда йәшәүсе күптәр һымаҡ 1-сенән башлап 15-сегә тиклемге "атамарка"ның кәттәһе "Жигули"ҙа елдереүҙе иң ҙур егетлеккә тиңләй ине. Әммә йәй башында үткән класташтары менән осрашыуы был мәсьәләлә уның ҡарашын тегүәл 180 градусҡа үҙгәртте. Ниндәй генә "инәмаркаларға" атланып килмәгән ҡалаларҙа һәм ер шарының башҡа төбәктәрендә көн итеүсе класташтары? Уларҙың ҡайһы берҙәрен Кәрим хатта төшөндә лә күргәне юҡ. Уларҙың эргәһендә Кәримдең 15-се һанлы "Жигули"һы төҫһөҙләнеү генә түгел, интерьерҙы боҙған музей экспонаты кеүек. Хатта күренмәй ҙә. Эйәр һалған һыйырға, баҡтаһы ҡойолған һәүерек алашаға атланып килгән мәхлүктәй хис итте үҙен Кәрим. Уның намыҫсан йөрәге дөпөлдәп тибеп ҡуйҙы. Етмәһә, Себерҙә йәшәүсе класташы Сәмиғулла үҙенең һуңғы сериялы "Тойота"һы янында тороусы Кәримдең машинаһына ишаралап:

- Был машинаға магазинда запчастар бармы әле һаман да? - тип төрттөрөп һорау биреп ҡуйҙы.

- Булмаһа ни, мин бит сварщик. Үҙем тимерҙән әтмәләп алам, - тип класташының төрттөрөүен үҙенсә мәрәкәгә борорға теләне Кәрим.

- Ә, онотоп торам. Һеҙ бит "ювелир оҫталары..."

- Ҡыҙ яһау һиңә "Тойота" һатып алыу йә малайҙар әтмәләү түгел...

Кәрим Сәмиғулланың ике малайы барлығын, ҡыҙҙары булмауын иҫенә төшөрҙө. Тик класташы ла бирешерлек түгел. Оторо ярһыны ғына. Уҡтарын ире менән класташтар осрашыуына килгән Кәримдең ҡатыны Зөләйхаға тоҫҡаны.

- Ир аҫылы мал таба, ҡатын аҫылы ул таба, ти ҡарсәйем. Өйөң тулы ҡыҙҙар, йөрәген машинаң музей экспонаты булғас, артабан ни әйтеп тораһың инде...

- ...

Кәримдең бармаҡтары үҙенән-үҙе йоҙроҡҡа төйнәлде. Асыуын теш араһына ҡыҫып, көскә йотоп, ул барыһына ла ишеттерерлек итеп:

- Тағы ла биш йылдан осрашҡанда бына ошо урында "Крузак" ултырмаһа, бына был фуражканы кейеп тә йөрөмәйем. Исемем дә Кәрим булмаһын... - Ул машинаһының капотына фуражкаһын сисеп бәрҙе.

-"Крузак"? - Сәмиғулла мыҫҡыллы йылмайҙы. - Уны һатып алырға аҡсаны ҡайҙан алмаҡсыһың? Ә-ә-ә... Онотоп торам, һин бит "ювелир оҫтаһы". Ҡыҙҙарыңды гастарбайтер үзбәктәргә һатһаң, алаһың инде...

Кәрим артабан түҙеп тора алманы. Бер-береһенә көҙгө әтәстәй ябырылып йәбешкән ике класташты көскә айырҙылар. Сәмиғулланан ғәфү үтендерҙеләр класташтары. Эскәнлегенә һылтанып маташҡан булды ул тәүҙә. Әммә табындағы башҡа ир-аттар уны ағаһынан нығыраҡ бороп алғас, тәүҙә әртисләнеп маташты, аҙаҡ майлаған ҡайыш хәленә килде.

- Инде һаҡалың биленә етеп бара, Сәмиғулла. Һаман малайҙарса ҡыланмаһаң, - тине ауыл хакимиәте башлығы булып эшләүсе класташтары Мәсҡүҙә.

- Үҙе шаяртҡанды аңламай бит, ауылдан сыҡмағас, кеше менән һөйләшә белмәй, - тип аҡланды Сәмиғулла.

Әммә байрамдың ҡото киткәйне инде. Кәрим класташына тыныс күңел менән ҡарай алманы. Уға тиҙ генә машинаһына ултырып ҡайтып китеүҙән башҡа сара ҡалманы.

Ҡыҫҡаһы, һаҡмар буйына йыйылған класташтарҙың был осрашыуы, дөрөҫөрәге, Сәмиғулла менән һүҙгә килешеүе Кәримдең тормошона ҡырҡа боролош алып килде. Иллә-мәгәр, уның намыҫы ҡуҙғалды. Тағы ла биш йылдан уҙасаҡ класташтар осрашыуына "Крузак"ҡа атланып барыһының да танауына сиртмәһәме, исеме, ысынлап та, Кәрим булмаясаҡ. Әгәр класташтарының береһе лә бындай машина менән маҡтана алмай.

"Асыулы сағында хөкөм сығарма, бәхетле сағында вәғәҙә бирмә", тип әйтәләр әйтеүгә. Кәрим нык асыулы сағында барлыҡ класташтары алдында "Крузак" алмаһаммы, тип вәғәҙә биргәндәй булды. Ысынында иһә, үҙ-үҙенә хөкөм дә сығарҙы. Әйткән һүҙ - атҡан уҡ. Хәҙер инде ул шул һүҙендә, үлһә лә, торорға бурыслы. Кем уйлаһын инде: тап ошо осрашыуҙа Кәримдең тормошо ҡырҡа боролош кисерер, тип. Һе, мәле еткәс, бәлки, Сәмиғуллаға рәхмәт тә әйтер әле Кәрим. Тик әйтерме икән? Күрһәтер шул сағында ошо Сәмиғулла ишеләргә кемдең кем, нимәнең нимә икәнлеген. Көлкөләрен яңыртыр. "Ювелир оҫтаһы", имеш...

**(Дауамы бар).**

* Хикәйәгә тормошта булған ике ваҡиға нигеҙ итеп алынды
** Ғамил Афзалдың шиғыры

*✓ Хәҙер милли кейемде береһенән-береһе арттырып "ижад" итә башланылар. Ҡашмауҙарҙы ла төрләндерәләр, улар араһында мари, удмурт башлыҡтарына оҡшағандары ла, төрлө төҫтәге страздар менән биҙәлгәндәре лә бар.*

РУХИӘТЕБЕҘ АСЫЛЫ

# БОРОНҒО БАШҠОРТ КЕЙЕМДӘРЕН...

## Ишембайға барып күрегеҙ!

**Ишембайҙағы "Юрматы" Йәмәғәт этнография музейы экспонаттары менән таныштырыуҙы дауам итәбеҙ.**

Ҡашмау - башҡорт милли баш кейеме. Кейәүҙәге ҡатын-ҡыҙҙың ҡашмауы башты ҡаплай, ә оҙон һәм киң таҫманан яһалған олоно арҡа буйлап аҫҡа төшөп тора. Ҡашмау ҡыҙыл мәрйен менән биҙәлә. Был баш кейеме кейеп йөрөү өсөн бик уңайлы, матур ҙа.

Әммә боронғораҡ фотоларҙа ҡашмауҙың туҡыма нигеҙе күренмәй. Ятҡан саҡта ул мәрйен, көмөш тәңкә һәм бетеүҙәрҙән генә торған кеүек тойола. Уның соңҡа өлөшөндәге ҙур уйымы ла аптырата. Ул тамсы формаһында һәм осло өлөшө елкәгә ҡарап тора. Бындай ҡашмауҙы кейгәндән һуң соңҡа өлөшөндәге уйымдан һәм ҡашмауҙың башлығын биҙәп торған мәрйендәр араһынан сәс күренеп тора. Был - сәсте сит күҙҙәрҙән һаҡлау йолаһын боҙа. Тап баштағы сәс аша кешегә күҙ тейә тип иҫәпләнгәндән, был бөтөнләй мөмкин булмаған хәл. Шуға ла миңә ҡашмауға нимәлер етешмәй кеүек тойолдо. Һәм ғилми әҙәбиәттә һүҙҙәремде раҫларҙай миҫал табылды. 1822 йылда И. И. Лепехин билдәләүенсә, соңҡалағы уйымды ҡаплай торған конус формаһындағы өҫтәмә бер әйбер булған. Бынан тыш, маңлайға һарыуыс бәйләгәндәр, ә башҡа таҫтар ябынғандар. Соңҡа өлөшөндә конусы булған ҡашмауҙы 1768 йылғы Б. Лепренс тигән авторҙың бер гравюраһында күрҙем. Унда һүрәтләнгән ҡатын-ҡыҙҙың баш кейемендә конус артҡа сығып тора (1-се фото).

Беләбеҙ, төрки телле халыҡтарҙың мәҙәниәтендә оҡшаш яҡтар байтаҡ, был һүрәттәге ҡатын-ҡыҙ башҡорт булмаған хәлдә лә, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының баш кейемендә лә бындай конус мотлаҡ урын алған булырға тейеш. Күптәрҙең ишеткәне барҙыр, ҡәйнәһе килененең һуғыу станогы артында төнгә тиклем эшләүен ишетһен өсөн уның башына шөңгөр тағып ҡуйғандар. Шуға ла был баш кейеме килендеке булған, тигәнгә раҫлау булды. Беҙҙең реставраторҙар уны ҡаты туҡыманан еңел генә эшләп тә ҡуйҙы (2-се фото). Маңлайы биҙәкле, соңҡаһы конуслы баш кейеме килеп сыҡты. Сәс толомдары яулыҡ эсендә ҡалды, ҡашмауҙағы кеүек олондоң да кәрәге ҡалманы. Маңлайҙы ҡаштарға тиклем - һарыуыс, ә сикәләрҙе һәм муйынды яулыҡ менән ҡапланыҡ.

Йәш килен - эш өсөн, ул сит күҙҙәрҙән ҡаплаулы булырға тейеш булған. Әммә һарыуыс, яулыҡ, конус формаһындағы ҡалпаҡ ҡасандыр ҡашмауға әйләнергә тейеш бит инде. Был, бәлки, килен бала тапҡас ғәмәлгә ашырылғандыр. Беҙ боронғо фотоларҙа күргән, мәрйен, көмөштән торған ҡашмау, бәлки, тап "әсәлек билдәһе"лер? (3-сө фото). Соңҡа өлөшөн конуслы ҡалпаҡ ҡапланы, мәрйендән торған баш өлөшө башты ике яҡтан ҡыҫып ҡына торҙо, күҙҙәргә өс тәңкә (изге көнсығыш йондоҙҙары) төштө, маңлайҙа Ислам дине билдәһе ялтыраны, киң олон сәс толомдарын ҡапланы, ҡолаҡ эргәһендәге сулпылар күкрәктәрҙе һаҡлап ятты. Бөтөн өлөштәр бер-береһен тулыландырып, берҙәм баш кейеменә әүерелде (4-се һүрәт). Хәҙер инде ҡашмау бөтөн ырыуға йәш килендең яңы ғаиләһендә һынауҙарҙы үтеп, әсә булыуы һәм ырыу тарафынан ҡабул ителеүе тураһында һөйләп тора.

**В. БЕССАРЕНКО.**
**"Юрматы" йәмғиәт этнографик музейы хеҙмәткәре.**


*Лепренс гравюраһы*


*"Йәш килен". Модель: Г. Закирова.*


*"Йәш әсә". Модель: Н. Иванова.*


*"Башҡорт ҡатын-ҡыҙы". Модель: Г. Вәхитова.*

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...



# МИЛЛИ КЕЙЕМЛЕ БУЛҒЫҢ КИЛҺӘ...

**Ишембай ҡалаһындағы "Юрматы" Йәмәғәт этнография музейы хеҙмәткәре Владимир Бессаренконың мәҡәләһе, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының боронғо милли кейем өлгөләре менән танышыу бик ҡыҙыҡлы булды. Ысынлап та, әле беҙ башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының XX быуат башындағы милли костюмын классик өлгө тип ҡабул иткәнбеҙ. Ә бына әлеге музей хеҙмәткәрҙәренең, етмәһә, икенсе милләт вәкилдәренең, башҡорт костюмдарын этнографтар хеҙмәттәренә, төрлө фрагменттарға, ғилми баҫмаларға таянып тергеҙеүе хуплауға, беҙҙең рәхмәтебеҙгә лайыҡ.**

Республикала ағинәйҙәр хәрәкәте көндән-көн киңерәк ҡолас ала бара. Бына әле генә 15-ләп район ағинәйҙәре Учалы ағинәйҙәрендә ҡунаҡта булып ҡайттыҡ. Ул көндө Әүештау итәге мең төҫтәрҙә балҡып, күҙҙең яуын алған сәскәле болондо хәтерләтте - ағинәйҙәрҙең барыһы ла тиерлек сағыу милли кейемдәрҙә килгәйне. Эйе, республикала ағинәйҙәр ҡорҙары ойошторола башлағас, һәр ағинәй эште үҙенә милли кейем тектереүҙән башланы. Беҙҙең Әбйәлил яҡтарында элек-электән милли кейемһеҙ ҡатын-ҡыҙ булманы, тиһәм дә хата булмаҫ. Хатта 3-4 йәшлек ейән-ейәнсәрҙәребеҙгә лә таҫмалы күлдәк, бишмәттәр тектерәбеҙ. Амангилде ауылы биләмәһе ағинәйҙәре лә бер иштән милли күлдәктәр тектереп кейҙе. Башҡа райондарҙа ла шул уҡ хәл күҙәтелә.

Әммә мәсьәләнең икенсе яғы борсоуға һала. Хәҙер милли кейемде береһенән-береһе арттырып "ижад" итә башланылар. Ҡашмауҙарҙы ла төрләндерәләр, улар араһында мари, удмурт башлыҡтарына оҡшағандары ла, берет һымаҡтары, төрлө төҫтәге страздар менән биҙәлгәндәре лә бар. Һаҡал, иҙеүҙәр буйынса ла шул уҡ хәл.

Үҙебеҙҙең район фестивалендә бер фольклор төркөмө ҡатын-ҡыҙҙарындағы "дөрөҫ булмаған" ҡашмауҙарҙы күреп, сыҙамай, эргәләренә барҙым. "Ҡайҙан ҡарап эшләнегеҙ был ҡашмауҙарҙы?" тигәс, "Үҙебеҙ уйлап сығарып тектек", тигән яуап алдым. Урыҫ мөхитендә йәшәгән был ҡатындарҙың фольклор төркөмө төҙөп, кейем хәстәрләп, район кимәленә сығыуҙары һоҡландыра, әлбиттә, тик уларҙың кәңәш, ярҙамға мохтаж икәне лә асыҡ күренә бит. Бөтәһе лә оҫта, мәғлүмәтле түгел, әммә милли кейемле булғыһы килә. Хәҙер тегенселәр күп ауылдарҙа, тик улар милли кейем өлгөһөн бигүк белеп бөтмәй.

Бына шулай, ағинәйҙәр милли ҡанундарҙы һаҡлап, һәр төбәктең, ырыуҙың орнамент, биҙәктәрен иҫәпкә алып, заман ялтырауыҡтарын самалап ҡулланып кейем тегергә өйрәтеүселәрҙең, этнографтарҙың кәңәшенә, һүҙенә мохтаж. Ҡаш төҙәтәбеҙ, тип, күҙ сығарып ҡуймайыҡ. Юғиһә, милли кейем үҙенсәлектәрен үҙ ҡулдарыбыҙ менән юҡҡа сығарыуыбыҙ ихтимал. Ә бит "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһының бер бурысы - халыҡ йолаларын, милли кейемдәребеҙ өлгөләрен аяҡҡа баҫтырыу.

**Ләлә ҒҮМӘРОВА,**
**Әбйәлил районы Амангилде ауылы "Ағинәйҙәр ҡоро" етәксеһе.**

***✓ Башҡаларҙың уңышына көнләшеүселәрҙә инфаркт хәүефе ике тапҡырға юғары. Көнләшеү - гормональ тайпылыштарға алып килә. Үҙен ғәйепле тойған кешегә һалҡын тейеп бара, онкологик сирҙәр хәүефе ҙурая.***



ИНТЕРНЕТТАН



# ҺАРАНДАР СИРЕ НИ?

■ Беҙҙең халыҡ һалҡын тейеү, йүткереү кеүек сирҙәрҙе ауырыуға ла һанамай инде, шулай ҙа тамаҡ шешеү сирен аҙҙырырға ярамай, ти белгестәр. Был осраҡта шалфей үләненән яһалған төнәтмәләр тиҙ ярҙам итәсәк. Билдәле булыуынса, "шалфей" һүҙе латин теленән "ҡотолоу" тигәнде аңлата. Шалфейҙы төрлө шештәрҙе дауалау өсөн күптән ҡулланалар. Ул антиоксидант сифаттарына ла эйә.

■ 18-27 айлыҡ сабыйҙарҙы тикшереп, ғалимдар шундай фекергә килгән: организмдағы бактерияларҙың күп булыуы һәм төрлөлөгө баланың үҙен тотошона ла йоғонто яһай. Генетик яҡтан ҡарағанда эсәктәге бактериялар максималь рәүештә төрлө икән, баланың кәйефе яҡшы була, ул башҡалар менән яҡшы аралаша, төрлө нәмә менән ҡыҙыҡһына. Белгестәр әйтеүенсә, бактериялар стресс гормондары менән бәйләнешкә инәлер, моғайын. Ошо гормондар һимереү, астма кеүек хроник ауырыуҙар менән дә бәйле. Фараздар буйынса, тирә-яҡ мөхиткә асығыраҡ булған балаларҙа ашҡаҙан-эсәк трактына йоғонто яһаусы стресс гормондары аҙыраҡ. Бактерияларҙың стресс гормондарының көсөн түбәнәйтеүе лә ихтимал. Тикшеренеүҙәрҙә 77 бала ҡатнашҡан, ғалимдар уларҙың микрофлораһын 18 төрлө характеристика буйынса тикшергән. Шуның өсөн гел хәүеф тойғоһо менән йәшәүселәргә файҙалы бактериялар кимәлен күтәреү тәҡдим ителә. Микрофлора менән шизофрения, аутизм араһында бәйләнеш барлығы ла асыҡланған.

■ Ҡайһы бер минералдар һәм кислоталар йоҡоно яҡшырта ала, әммә иң тәүҙә бының өсөн дөрөҫ туҡланырға һәм әүҙем тормош алып барырға кәрәк, ти Америка ғалимдары. Йоҡлар алдынан бер стакан һөт эсеп, бер ус сәтләүек ашаһаң, яҡшы йоҡлайһың икән. Сәтләүектәрҙән бразилия сәтләүегенә өҫтөнлөк бирегеҙ, ул калий менән селенға бай, ә һөттә кальций бар. Насар йоҡлаусылар туҡланыу рационынан майлы ризыҡтарҙы, бигерәк тә, аҡ майҙы һәм сырҙы алып ташларға тейеш.

■ Күптәр дарыуҙарҙы дөрөҫ ҡабул итмәй. Cochrane Library баҫмаһында бер төркөм ғалимдар 182 төрлө тикшеренеүҙәрҙең һығымталарын баҫтырып сығарған. Һынауҙарҙа ҡатнашыусыларҙың яртыһы табиптарҙың күрһәтмәләрен үтәмәй. Кемдер дарыуҙы тейешле курс менән эсмәй, кемдер уны ҡасан һәм күпме эсергә кәрәклеген онота. Был хаталарҙы төҙәтеү өсөн тәүҙә үҙеңдең хаталаныуыңды танырға кәрәк, ти ғалимдар. Бөгөн төрлө сығанаҡтар ниндәй дарыуҙы нисек һәм ҡасан ҡабул итеү хаҡындағы мәғлүмәт менән тулған, уларҙың араһында ҡайһыһы дөрөҫлөккә тап килеүен билдәләүе лә ауыр.

■ Австрияла йәшәүсе психолог биш йыл дауамында бер тикшеренеү үткәргән һәм ниндәй тойғо организм өсөн иң зыянлыһы булыуын асыҡлаған. Башҡаларҙың уңышына көнләшеүселәрҙә инфаркт хәүефе ике тапҡырға юғары. Көнләшеү - гормональ тайпылыштарға алып килә. Етмәһә, иң тәүҙә тестостерон бүленеп сығыу кәмей, шуға ла ир-егеттәргә был насар ғәҙәт менән дуҫлашыу уларҙың файҙаһына түгел. Үҙен ғәйепле тойған кешегә һалҡын тейеп бара, онкологик сирҙәр хәүефе ҙурая. Үҙ-үҙен йәлләүселәр бауыр сирҙәре менән яфаланыуы ихтимал. Был саҡта хәлһеҙлек гормоны күберәк бүленә, ҡанда шәкәр күләме арта. Һарандар күбеһенсә ашҡаҙан сиренә дусар була.

ШАНДАУ

# БЕҘҘЕ ЛӘ УҠЫТТЫ УЛ...

**"Киске Өфө"лә Самат Мөхәмәтйәновтың "Һуғыш яланында сыныҡҡан уҡытыусылар" тигән мәҡәләһен уҡығас, бынан 56 йыл элек мин дә Әдип Усман улы Нияҙғоловта белем алдым, тип яҙып ебәрәйем әле, тинем.**

Асҡарҙа һигеҙенсе синыфта уҡығанда Әдип Усман улы математиканан белем бирҙе. Шундай шәп уҡытыусы булған икән ул. Мин хәҙер етмештең аръяғындамын, математика уҡытыусыһы ла түгелмен (филолог), ләкин төн уртаһында торғоҙоп һораһалар ҙа, алгебра, геометрия, физика, тригонометрия функцияларымы, формулаларымы, һаман иҫтә. Дәрес әҙерләшергә балаларыма ярҙам итештем, хәҙер ейән-ейәнсәрҙәремә мәсьәләләр сисешәм...

Әдип ағай бер юлы 3-4 уҡыусыны таҡтаға сығара ла, бер үк мәсьәләне сисеүгә, йә бер үк формуланы иҫбатларға ҡуша ине. Ҡалғандар ҙа шуны үтәй торғайны. Бала саҡта, йәш саҡта сәмле булаһың бит инде ул.

- Әйҙә, мәсьәләне кем алда эшләй, кем уны икенсе юл менән сығара? - ти ҙә уҡытыусыбыҙ ярыш башлап ебәрә. Тәнәфестәрҙә, йә дәрес ваҡытында һуғыш тураһында ла һөйләй ине. Һуғыштың ҡот осҡос хәл икәнен, һуғыш - ул бысраҡлыҡ, ҡан, ҡыйралыш икәнен тәүге тапҡыр уның ауыҙынан ишетеп аңланыҡ. "Танктарҙың тәгәрмәстәренә кеше эсәктәре уралып бөтә ине", - тигән һүҙҙәре хәтерҙә.

Беҙҙең синыфта төрлө ауылдарҙан йыйылған егермеләп бала уҡыны. Бөтәбеҙ ҙә тигәндәй юғары белем алдыҡ: лётчик, инженер, врач, мал табибы, зоотехник, уҡытыусылар һәм башҡа һөнәр эйәләре бар арабыҙҙа. Бында, әлбиттә, көләс йөҙлө, аҡыллы ҡарашлы, юморға бай уҡытыусы, ил уҙаманы Әдип Усман улының роле баһалап бөткөһөҙ.

**Гөлдәр ӘЛИБАЕВА.**
**Әбйәлил районы Билал ауылы.**

# ҠУРАЙЫБЫҘҘЫ ЯФАЛАМАҒЫҘ!

**Һорауҙарыма яуап таба алмай йөрөй инем, "Киске Өфө" гәзитенә рәхмәт - "Зыялылар майҙаны" рубрикаһындағы "Балаларға... Оҙон көйҙәребеҙҙе тыңларға өйрәтәйек!" мәҡәләһендә педагогика фәндәре кандидаты Вәкил Хажин яуабыма асыҡлыҡ индергәндәй булды.**

Ни өсөн ҡурайға ҡушып, барабан һуғыу, барабан ҡағыу менән мауығып китте әле беҙҙең эстрада музыкаль төркөмдәре? Уларҙы тыңлағанда ниндәйҙер хәүеф барлыҡҡа килә. Ә яңғыҙ ҡурайҙан моң һыҙылып ҡына ага ла, тура йөрәккә барып инә, күҙҙәрҙән йәштәр ағыҙа. Беҙ үҫкән осорҙа оҙон көйҙәр, ҡурай тыңлап булмаһа ла, ул моң ҡаныбыҙҙа һаҡланғандыр. Әле кинәнеп тыңлайбыҙ. Тағы ла шул: башҡорт ҡурайында итальян һәм башҡа халыҡтарҙың көйҙәрен уйнап яфаланыусы ҡурайсылар бар хәҙер. Уларҙы тыңлап, әллә музыканттарыбыҙ асылыбыҙҙан тайпыла, әллә заман талаптары уларҙы шулай үҙгәрергә, нимәгәлер, кемгәлер яраҡлашырға мәжбүр итәме икән, тип аптырайым. "Ҡурайыбыҙҙы яфаламағыҙ!" тип кенә әйтке килә уларға. Ш. Бабичтың "Ҡурайҡайға" шиғыры иҫегеҙҙәлер:

*Һыҙҙырт, ҡурай, үткән ҡайғыларҙы,*
*Өҙҙөрт, ҡурай, йөрәккәй ҡылдарын,*
*Һиҙҙерт, ҡурай, ҡайнар тойғоларҙы,*
*Һөйҙөрт, һөйләп башҡорт моңдарын...*

Шау-шыуға, заман әтнәкәләренә эйәрмәй, үҙ асылыбыҙҙы ҡурайыбыҙҙа ла һаҡлап ҡалырға тырышһаҡ ине.

**Фәүзиә ЯХИНА.**

# ДОШМАНДЫҢ ДОШМАН ИКӘНЕН...

**"Киске Өфө" гәзитенең быйылғы 3-сө һанында Рәхимә Мусинаның "Дошманыңды дуҫҡа әйләндереп ең!" тигән мәҡәләһен уҡығас, ҡалай дөрөҫ яҙған, тигән фекергә килдем. Ә шулай ҙа үҙ тирәңдә дошмандар булдырмауҙан да хәйерлеһе юҡ.**

Һинең тарафҡа бер ауыҙ ҡаты һүҙ, нәфрәтле ҡараш атҡан кешене үҙеңә дошман тип ҡабул итергә ярамай шул. Бының өсөн сабырлыҡ менән түҙемлекте үҙ холҡоңдан алда йөрөтөргә кәрәк. Дошманлашыу иң элек һаулыҡҡа, ятраҡан шөғөлгә, ваҡытҡа зыян килтерә. Дошманым, тигән кеше һинең хаҡһыҙ ҡылған ҡылығыңды иҫкәртергә, фәһем бирергә уйлағандыр. Беҙ барыбыҙ ҙа Хоҙай мәрхәмәте аҫтында йөрөйбөҙ. Тормошоңдоң иң ауыр сағында ошо дошманың тәүге булып ярҙам ҡулы һуҙмаҫ, тимә. Кешене тышҡы ҡиәфәте, йәмғиәттә тотҡан урыны, йәшәү рәүешенә ҡарап баһалау яҙыҡ. Ябай ғына кешенең дә бай эске донъяһы бар. Ундағы сафлыҡ, ихласлыҡ, хис-тойғоларҙың, илһамдың урғылып тороуын күрә белһәң, ул кеше һинең дуҫың буласаҡ. Боронғолар шуның өсөн дә дошман менән дуҫты айырырға өйрәткән.

**Айһылыу ХӘСӘНОВА.**
**Әбйәлил районы Рысҡужа ауылы.**

# ӘЙҘӘГЕҘ, ИҪКӘ ТӨШӨРӘЙЕК!

**"Киске Өфө" гәзитенең быйылғы 1-се һанында Ҡасим Янбаевтың "Әйҙәгеҙ... Иҫкә төшөрәйек" исемле мәҡәләһе донъя күргәйне. Унда Ейәнсура яҡтарында ҡулланылған арба өлөштәре атамалары килтерелә, һыҙмаһы бирелә.**

Ҡасим Янбаевты ситтән (русса әйткәндә - "заочно") беләм. Ҡыҙыҡһыныусан кеше. Заманында мин дә тәгәрмәс һуҡтым. Бөтә ҡорамалдарым да һаҡлана. Арба өлөштәренең атамалары төрлө ерҙә төрлөсә икән. Ҡасим Янбаев атаған арба өлөштәре беҙҙең яҡта бына шулай әйтелә:

**тәгәрмәс ҡоршауы** - эске/тышҡы;
**көпсәк** - беҙҙә көбәк;
**субағас** - беҙҙә кәләмсәү. Һуңынан ул тимер менән алыштырылды, уныһын "стремянка" тинеләр;
**яҫтыҡ** - башан, тиҙәр. Алғы/артҡы башан;
**үрәсә** - башандарға келәм менән тоташтырыла;
**яндау** - башандар осо яндау менән нағышлана.

**Йәмних ҠАШҠАРОВ.**
**Баймаҡ районы Әбделкәрим ауылы.**

# ҠӘБЕР ЭСЕНДӘ БАЛА ИЛАЙ...

**Гәзитебеҙҙең былтырғы һандарында ("Киске Өфө", 2014, №39-40) Байгилде Моталлап тигән авторҙың, мәрткә китеп, яңылыш күмелгән һәм ҡәберҙән сыҡҡан кеше яҙмышын һүрәтләгән "Үлемдән ҡасып та..." тигән хикәйәһе баҫылғайны. Мин дә ошондайыраҡ бер тарихты ишетеп үҫкәйнем.**

Был хәлде Исҡужа ауылында йәшәүсе ҡартатайым Аҡтаев Мәхәмәтсадиҡ Иҙрис улы һөйләй торғайны. Ул 1955 йылда 82 йәшендә вафат булды. Шуға ла был тарихҡа байтаҡ ваҡыт үткәндер, тип фараз итергә була. Ҡартатайым иҫән саҡта был ваҡиға тураһында яҡшылап һорашып ҡалмағанмын тип үкенәм. Иҫтә ҡалғаны ошо: ауылда бер ауырлы ҡатын вафат булған. Ерләп, күпмелер ваҡыт үткәс, бер кеше ҡәберҙән бала илаған тауыш килеүен ишетеүе тураһында хәбәр итә. Ҡәберҙе ҡаҙып ҡараһалар, унда тере ир бала ята, үлгән әсәнең бөтөн тәне кибеп бөткән, әммә күкрәге имен, ти. Ер төҫө сығып, баланың йөҙө ҡап-ҡара булған, шуға уны Ҡараҡай тип йөрөткәндәр.

Ҡараҡайҙың яҙмышы менән ҡыҙыҡһыныусылар күп була, шуға ла бала иғтибар үҙәгендә үҫә. Һуңынан ул ишан булып китә. Ҡараҡайҙың аҡ тәнле улы тыуғас, уны Аҡтай тип атағандар. Хәҙерге Аҡтаевтарҙың нәҫеле унан киткән. Аҡтайҙың улы - Ғәле, Ғәленең улы - Иҙрис, Иҙристән минең ҡартатайым Мәхәмәтсадиҡ менән Абдулла олатайҙар тыуа. Ҡартатайымдың 5 ҡыҙы, 1 улы булды. Мин белгән Аҡтаевтар тоғро, эшкә әрһеҙ, үҙҙәренең хәләл көсө менән көн итте. Балаларының барыһы ла юғары, урта белем алды.

**Асия САПТАРОВА.**
**Йылайыр районы Юлдыбай ауылы.**

**✓ Яҙҙың ҡояшлы бер иртәһендә Маҡар ауылы ағинәйҙәре лә Ырымбурға юлланды. Беҙ килгәндә Ырымбурҙың күк йөҙөндә ап-аҡ болоттар йөҙә ине, шул фонда мәсеттең манараһы, бәүелеп-бәүелеп, беҙҙе сәләмләгән кеүек тойолдо.**



*ҺАЙ, БАШҠОРТ АШТАРЫ!*

# Ә БЕҘҘӘ ШУЛАЙ БЕШЕРӘЛӘР



**"Киске Өфө" гәзитендә әбйәлилдәрҙең бишбармағынан "ауыҙ" иттергәйнеләр. "Һеҙҙең яҡта нисек бешерәләр?" тигән мөрәжәғәткә яуапһыҙ ҡала алманым.**

Ғәйниямал инәйем Баймаҡ ҡалаһының үҙәгендә йәшәй ине. Ул саҡта ҡалала мәсет булманы. Инәйем аҙна һайын йома намаҙҙарын үҙенең өйөндә уҡытты. Артабан ҡала мәсете унын өйө эргәһендә генә төҙөлдө.

Ғәйниямал инәйемдең өйөнән йома көндәрендә генә түгел, башҡа ваҡытта ла кеше өҙөлмәне, ә ул бешергән ҡуллама ашының тәмлелеге! Ҡулламаны инәйем башлыса һарыҡ итенән ҡаҙанда бешерҙе. Ите ҡайнап сығыр-сыҡмаҫтан күбеген ала, һапыра-һапыра утын яйлата. Ите бешкәс кенә тоҙлоғон айырып алып, уға һуған турап һала. Алдырға итен алып, ҡаплап ҡуя.

Һалма баҫыр өсөн ҙур кәсәгә эҫе һурпа һоҫоп ала. Он иләп, 5-6 кешелек ике йәйем һалма өсөн һыуытылған шул һурпала ҡамыр баҫа. Һурпаға бер ниндәй һыуыҡ һыу, йомортҡа, аш содаһы ҡушмай. Ҡамырҙы оҙаҡ ҡына тасҡап, ҡаты итеп баҫа. Уны йоҡарғансы, өҫтәлгә йәйелгән ашъяулыҡ биҙәге үтә күренгәнсе йәйә. Артабан уны ашъяулыҡта бер сәғәттәй киптереп, дүрткел итеп ҡырҡа. Һалма ваҡ ҡына була. Бешә килә ҙурая ул, тигәндер, күрәһең. Артабан ҡаҙандағы һурпаны иләк менән һөҙөп, кире ҡойоп, утты шәбәйтә, урғылып ҡайнауға һалманы бүлә-бүлә төшөрә башлай. Бөтә эште үҙе башҡара, миңә һапырып, болғап ҡына торорға ҡуша торғайны. Бешкәс, оло табаҡҡа һоҫоп, табынға килтерә, алдыр менән итен дә ултыртып, бүлеп-бүлеп өлөш тарата ла, ҡалғанын тәрилкә менән табынға ҡуя. Аш ашалып, табаҡ алынғас, һәр кем алдына бәләкәс кенә кәсәгә ҡоротло һурпа ҡойоп сыға, һурпаны ҡалдырмай эсеп бөтөргә тейешһең - шарты шул. Ҡунаҡ мәжлесе булһа, һоғондороу йолаһы аш ашап бөткәс, табаҡты алыр алдынан башҡарыла. Хужабикә үҙ ҡалағы менән һәр кемдең тәрилкәһендәге ағас ҡалағына һурпаһыҙ һалма һалып сыға. Ул һалманың тәме үҙе бер башҡа була. Йола үтәлгәс кенә табындан табаҡ алына. Ҡутарылып уңһа ла инәйем ҡулламаһына картуф һалманы. Егерме йылдан ашыу ваҡыт үтте, инәйемдең ашының тәме әле лә тел осонда.



Мин үҙем бишбармаҡты шулай бешерәм. Унын өсөн башлыса йылҡы ите тотонам, һыйыр ите булһа, өҫтәп, ҡаҙ ите ҡушам. Әгәр көҙөн ҡаҙҙы һуйғас та эс яғына бер ус тоҙ ялатып ҡуйһаң, ул ҡаҡланған кеүек дан була, ашҡа ифрат шәп тәм бирә. Бешереү ысулы инәйемсә. Күмәк табынға ҡунаҡ йыйғанда һалма 2-3 көн алдан әҙерләнә. Картуфты эре көйө уртаға ярып, айырым һурпала бешереп, өҫтөнә ит, һуған өйөмө һалып, табынға ҡуям. Картуф мотлаҡ айырым кәстрүлдә бешә, сөнки картуф бешкән һурпаның тәме китә. Тағы шул: итте бешергәндә һыуы өҫтөнә саҡ ҡына сығып торһон, һалманы ҡайнар һыуға баҫығыҙ.

**Зөһрә АЙЫТҠОЛОВА,**
**Баймаҡ ҡалаһы "Ағинәйҙәр ҡоро" ағзаһы.**

*ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ*

# МАҠАР АҒИНӘЙҘӘРЕ...

## тарихи ҡалаға сәфәр ҡылды



**Каруанһарай исемен ишетеүҙән генә лә күңел ғорурланыу һәм әсенеү, һоҡланыу һәм һыҙланыу менән тула. Бизмәндең бер яғында - ата-бабаларыбыҙҙың ер йөҙөндә башҡорттоң мәртәбәһен күтәрерлек ҡомартҡы һалыуы менән ғорурланыу, икенсе яғында - был тарихи комплекстың артабанғы яҙмышы, ҡулдан-ҡулға күсеүе, үҙ тәғәйенләнешен үтәмәүенә әсенеү.**

Каруанһарай - ысын архитектура ҡомартҡыһы. Мәшһүр архитектор А.П. Брюллов уны башҡорттарҙың йәшәү рәүешенә яҡын итеп, мәсетен тирмә формаһында эшләгән, эстәге биҙәктәр, төҫтәр ҙә башҡорт халыҡ сәнғәте өлгөһөндә һүрәтләнгән. Ҡылыс һалған яугир ҡунып китһен, үҙенә, атына ял бирһен, күңелен тәртипкә килтерһен тип, башҡорттоң үҙ көсө, үҙ аҡсаһына изге ниәттәр менән һалынған Каруанһарай тирәләй низағтар күп булды һуңғы йылдарҙа. Башҡорт йәмәғәтселегe унын мәсетен булһа ла халҡыбыҙға хеҙмәт иттереү өсөн бик оҙаҡ айҡашты, ҡултамғалар йыйҙы, судлашыуға барып етте. Шөкөр, хәҙер Каруанһарай мәсете милләттәштәребеҙҙең осрашыу урынына әйләнде.

Ишембай районы Байғужа ауылы ағинәйҙәренең Ырымбурға, Каруанһарайға сәйәхәт ҡылыуы хаҡында ишетеп тә, уҡып та белгәйнек. Уларҙың ҡул арты еңел булды. Яҙҙың ҡояшлы бер иртәһендә Маҡар ауылы ағинәйҙәре лә Ырымбурға юлланды. Беҙ килгәндә Ырымбурҙың күк йөҙөндә ап-аҡ болоттар йөҙә ине, шул фонда мәсеттең манараһы, бәүелеп-бәүелеп, беҙҙе сәләмләгән кеүек тойолдо. Маҡар ағинәйҙәре Каруанһарайға изге ниәттәр, бай программа, бүләктәр менән килде. Тәүҙә мәсеттә төрлө йылдарҙа яуҙа һәләк булғандарҙың, Маҡар ауылының данлыҡлы шәхестәренең рухына аят уҡылды. Бер кемдең дә күңеленә бик һалынмаған: һәр кем үҙ әруахтарын барланы, доғалар уҡыны, хәйер-саҙаҡаһын юлланы. Артабан маҡарҙар мәсет тирәләй үҙ тыуған төйәгенән тупрағы-нийе менән алып килгән шыршы, ҡарағай үҫентеләре ултыртты.

Бына беҙҙең автобус Ырымбур урамдары буйлап елдерә: ҡаланың боронғо йорттарын күҙҙән үткәреп, бөгөнгө төҙөлөшөнә һоҡлана-һоҡлана, Милли-мәҙәни үҙәккә килеп туҡтаныҡ. Ырымбурҙы төйәк иткән һәр халыҡтың үҙ мөйөшө урынлашҡан бында. Башҡорттарҙың йорто тирмә рәүешендә төҙөлгән, тирә-яғы умарталар, олатай ихатаһы, аласыҡ кеүек ҡоролмалар менән уратып алынған. Бында милли кейемдәге Маҡар ағинәйҙәре, музыка инструменттары, милли аш-һыуы, хатта көйәнтә-биҙрәләрен дә ҡалдырмай, халҡыбыҙҙың "Ҡар һыуына барыу" йолаһын күрһәтте. Ырымбурҙар ҙа яуапһыҙ ҡалманы: моңлолары йыр һуҙҙы, сәсәндәре ҡобайыр әйтте, ҡурай моңо яңғыраны...

Хушлашҡанда Каруанһарай мәсете хәҙрәте Хөрмәтулла Буранбаев рәхмәт һүҙҙәрен һәм ихлас теләктәрен еткерҙе:

- Хаҡ мосолман донъяһы Мәккәгә хаж ҡыла. Изге, сауаплы ғәмәл. Ә беҙҙең тирәләге мосолмандар хаж ҡылған кеүек Каруанһарайыбыҙға килһә ине, сөнки ул да Мәккәләге Ҡәғбәтулла проектына нигеҙләнеп эшләнгән. Әле беҙ яңы ғына Баймаҡ тарафтарынан килгән ҙур делегацияны ҡаршылағайныҡ, бөгөн ишембайҙар менән осрашып һөйөндөк. Килегеҙ, күрегеҙ, башҡаларға һөйләгеҙ...

Осрашыу аҙағында Маҡар ауылы ағинәйҙәр ҡоро етәксеһе, һәүәҫкәр композитор Мәрйәм Ғәзизрахман ҡыҙы Солтанова көйөнә яҙылған "Маҡар гимны" яңғырай, баян моңона ҡушылып йырлаған ағинәйҙәрҙең йөҙҙәре яҡтыра, күңелдәре тулыша, ә аһәңле көй күктәргә олғаша...

**Әнисә ҺӨЙӘРҒОЛОВА.**
**Ишембай районы.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# НИ ӨСӨН ҺЕҘ АУЫРЫУ ҺӘМ ЯРЛЫ?

## Уңышлы булыуҙың бөйөк сере

### 3-сө бизнес модель. Күп кимәлле йәки селтәрле маркетинг

Ҡайһы берҙә МЛМ тип аталған был модель - ирекле эшҡыуарлыҡ системаһының һуңғы тереге. Унын ярҙамында инвестиция өсөн етерлек күләмдәге средствоға, ҙур тәжрибәгә йәки белемгә эйә булмаған индивидуум үҙенә кәрәкле капитал туплай ала. Юғары белеме, ҙур күләмдә аҡсаһы, яҡшы бәйләнештәре булмаған күптәр селтәрле маркетинг ярҙамында үҙҙәренә байлыҡ тупланы ла инде.

Үҙегеҙҙе, хыялымдағы өйөмдә йәшәйем, хыялымдағы машинала йөрөйөм, хыялымда тыуҙырған тормош менән йәшәйем, тип күҙ алдына килтерегеҙ: тормошоғоҙға бәхет өҫтәгән кешеләр менән аралашаһығыҙ, башҡаларға хыялдарын тормошҡа ашырырға ярҙам итеп, үҙегеҙҙең именлегегеҙҙе булдыраһығыҙ. Был хыял ғына булырға тейеш түгел, был - селтәрле маркетинг өлкәһендә өйҙәге эшҡыуарлығын булдырған күптәр өсөн ысынбарлыҡ.

Аҙнаһына 10-12 сәғәт йоҡо йәки аш бүлмәһенән килемле эшҡыуарлыҡ менән идара итә алаһығыҙ. Ғаилә хәстәрҙәре һәм башҡа шәхси йөкләмәләргә муйындан батҡан кешеләр өсөн был эшмәкәрлек идеаль вариант буласаҡ һәм кем менән эшләргә теләүегеҙҙе үҙегеҙ һайлайһығыҙ.

Һалым өҫтөнлөктәренә эйә буласаҡһығыҙ һәм ҡыҙыҡлы, һоҡланғыс урындарға сәйәхәт ҡыласаҡһығыҙ. Килем күләме сикләнмәгән.

Башҡаларға уңыш ҡаҙанырға ярҙам иткән эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнеүе үҙегеҙгә лә оҡшаясаҡ. Үҙ-үҙегеҙгә етәксе булып, һеҙ барлыҡ өҫтөнлөктәргә һәм азатлыҡҡа, шул уҡ ваҡытта белем алыу, артығыҙҙа торған төп корпоратив структураның барлыҡ ресурстарына һәм ярҙамына, компанияның тауарын һатыу өҫтөнлөгөнә эйә буласаҡһығыҙ, әммә бынын өсөн ҙур күләмдә старт игәнәһе, артабан продукцияны һатыуҙы дауам иткән өсөн кемгәлер "откат" бирмәйәсәкһегеҙ. Халыҡтың күпселеге аҡса проблемалары менән күҙгә-күҙ осрашҡанда, һеҙҙең бизнесығыҙ артабанғы килем үҫешен тәьмин итәсәк.

Әйткәндәй, һүҙ финанс пирамидалары, "бәхет хаттары", Понци схемалары һәм башҡа финанс мутлыҡтары тураһында бармай. Был тиҙ байыуға ҡоролған алдаҡтар меңәр йылдар йәшәй һәм тағы ла шулай уҡ йәшәйәсәк. Минең һөйләгәнем - ваҡыт һынауын үткән селтәрле маркетингтың бизнес моделе. Был модель 1950 йылдар һуңында Amway, Shaklee кеүек компаниялар арҡаһында барлыҡҡа килә, артабан башҡалары ошо концепцияны дауам итә. Һуңғы 20 йыл эсендә был тармаҡ 91 процент килемгә өлгәшеп, ныҡлы үҫеш ала.

Бөгөн селтәрле маркетинг индустрияһы тотош донъяны ялмаған: был эшмәкәрлек 100-ҙән ашыу илдә ҡулланыла һәм көндән-көн киңәйә бара. 53 миллион кеше уларҙа ҡатнаша һәм фараздар буйынса бөтөн донъяла уларҙың килеме 100 миллиард долларҙан артып китә.

**Рэнди ГЕЙДЖ.**



## 8 ИЮНЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Вести".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (16+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Последний янычар". Мелодраматический сериал (12+).
16.00 "Загадка судьбы". Ток-шоу
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Оплачено любовью". 1-3-я серии (16+).
23.45 "Жить на войне. Фронт и тыл" (12+).
00.45 "Жить на войне. Оккупация" (12+).
01.45 "Надежда". Мелодраматический сериал (16+).
02.45 "Люди и манекены".
04.20 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 Гимн Республики Башкортостан (16+).**
**07.05 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 Новости недели (на башк. яз.).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Городок АЮЯ" (0+).**
**11.00 Новости недели.**
**11.45 "Бедная Настя" (12+).**
**12.30 "Специальный репортаж" (12+).**
**12.45 "Весело живем" (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә" (0+).**
**13.30, 14.30, 22.30 Новости (на башк. яз.) (0+).**
**13.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.15 "Учу башкирский язык" (0+).**
**15.00 "Бауырһаҡ" (0+).**
**15.15 "Ғәләмәт донья" (0+).**
**15.45 "Юные виртуозы Уфы" (0+).**
**16.00, 17.45 "Золотой фонд Башкирского ТВ" (12+).**
**16.30, 21.30 Новости.**
**16.45 "КЛИО" (0+).**
**17.30 Новости культуры (0+).**
**17.45 "Застава" (12+).**
**19.30 Новости спорта.**
**20.00 "Полезные новости" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.30 "Народы Башкортостана" (12+).**
**21.00 "Дознание" (16+).**
**22.00 "Следопыт" (12+).**
**23.00 "Сундук предков" (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

## 9 ИЮНЯ ВТОРНИК

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (16+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Последний янычар". Мелодраматический сериал (12+).
16.00 "Загадка судьбы" (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Оплачено любовью". 4-6-я серии (12+).
23.45 "Договор с кровью" (12+).
01.45 "Надежда". Мелодраматический сериал (16+).
02.45 "Люди и манекены".
04.20 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 Гимн Республики Башкортостан (16+).**
**07.05 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Настоящие охотники за привидениями" (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Зеркальце" (0+).**
**11.00 "Замандаш" (6+).**
**11.15"Орнамент" (0+).**
**11.30, 12.30, 16.30, 21.30 Новости (0+).**
**11.45 "Бедная Настя". Сериал (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә" (0+).**
**13.30, 14.30, 22.30 Новости (на башк. яз.) (0+).**
**13.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.15 "Учу башкирский язык" (0+).**
**15.00 "Семәр" (0+).**
**15.15 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**15.45 "Фанташ" (0+).**
**16.00 "Башҡорттар" (12+).**
**16.45 "Дорога к храму" (0+).**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Золотой фонд башкирского ТВ" (6+).**
**18.15 "Бизнес-обзор" (12+).**
**18.30 "Застава" (12+).**
**19.30 Новости. Тема дня.**
**20.00 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.30 Новости. Тема дня (на башк. яз.).**
**21.00 "Үткән ғүмер" (12+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко" (12+).**
**23.00 "Мой лучший любовник". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

## 10 ИЮНЯ СРЕДА

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Вести".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (16+)
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Последний янычар". Мелодраматический сериал (12+).
16.00 "Загадка судьбы". Ток-шоу (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Оплачено любовью". 7-я и 8-я серии (12+).
22.50 "Специальный корреспондент" (16+).
00.30 "Страшный суд" (12+).
01.45 "Надежда" (16+).
02.45 "Люди и манекены".
04.10 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 Гимн Республики Башкортостан**
**07.05 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 "Настоящие охотники за привидениями" (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Борсаҡ" (0+).**
**11.00 "Замандаш" (6+).**
**11.15, 17.15 "Орнамент" (0+).**
**11.30, 12.30, 16.30, 21.30 Новости (0+).**
**11.45 "Бедная Настя". Сериал (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә" (0+).**
**13.30, 14.30, 22.30 Новости (на башк. яз.) (0+).**
**13.45 "Башҡорт йыры-2015" (12+).**
**14.15 "Учу башкирский язык" (0+).**
**15.00 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**15.15 "Шәп арба" (0+).**
**15.45 "Физ-ра. Спортблог спецкора" (6+).**
**16.00 "Тәмле" (12+).**
**16.45 "Здоровое решение" (12+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Золотой фонд башкирского ТВ" (12+).**
**18.15 "История признания" (6+).**
**18.30 "Застава". Сериал (12+).**
**19.30 Телецентр.**
**20.15 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.30 Новости. Тема дня (на башк. яз.)**
**21.00 "Автограф" (12+).**
**22.00 "Историческая среда" (12+).**
**23.00 "Вихрь". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

## 11 ИЮНЯ ЧЕТВЕРГ

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном".
11.00, 14.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Последний янычар". Мелодраматический сериал (12+).
16.00 "Загадка судьбы". Ток-шоу (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Юморина". Главный юмористический фестиваль года (12+).
22.55 "Ночной гость". Мелодрама (12+).
00.55 "Соседи по разводу". Худ. фильм (12+).
02.55 "Надежда". Сериал (16+).
03.50 "Люди и манекены". Сериал

### БСТ

**07.00 Гимн Республики Башкортостан**
**07.05 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 "Настоящие охотники за привидениями" (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Цирк в 13 метров" (0+).**
**11.00 "Замандаш" (6+).**
**11.15, 18.15 "Орнамент" (0+).**
**11.30, 12.30, 16.30, 21.30 Новости (0+).**
**11.45 "Бедная Настя". Сериал (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә" (0+).**
**13.30, 14.30, 22.30 Новости (на башк. яз.) (0+).**
**13.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.15 "Учу башкирский язык" (0+).**
**15.00 "Шәп арба" (0+).**
**15.15 "Семәр" (0+).**
**15.45 "Книга сказок" (0+).**
**16.00 "Автограф" (6+).**
**16.45 "Алтын тирмә" (0+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Золотой фонд башкирского ТВ" (12+).**
**18.30 "Застава". Сериал (12+).**
**19.30 Новости. Тема дня (12+).**
**20.00 "Полезные новости" (12+).**
**20.15 "Сәнгелдәк" (0+).**
**20.30 Новости. Тема дня (на башк. яз.)**
**21.00 "Наука 102" (6+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко" (12+).**
**23.00 "Гениальный папа". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

## 12 ИЮНЯ ПЯТНИЦА

### РОССИЯ 1

05.35 "Наша армия. Внезапная проверка" (12+).
06.25 "Ах, водевиль, водевиль..." Худ. фильм.
07.50 "Высота". Худ. фильм.
09.45 "Верные друзья". Комедия.
11.50 "Екатерина". Историко-драматический сериал (12+).
14.00 Москва. Кремль. Церемония вручения Государственных премий Российской Федерации.
15.00 "Екатерина". Продолжение фильма (12+).
22.00 "Вести".
22.30 "От Руси до России". Праздничный концерт. Трансляция с Красной площади.
24.00 "День России". Праздничный концерт в Крыму.
01.50 "Обменяйтесь кольцами". Мелодрама (16+).
04.00 "Семь стариков и одна девушка". Худ. фильм.

### БСТ

**07.00 Гимн Республики Башкортостан**
**07.05, 17.45, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро, Башкортостан!" (12+).**
**08.00 "Косуля" (0+).**
**08.40 "Солнечная песенка" (0+).**
**10.30 "Кукушкин чай" (0+).**
**11.00 "Замандаш" (6+).**
**11.15 "Орнамент" (0+).**
**11.30, 21.30 Новости (0+).**
**11.45 "В поисках затерянного города" (6+).**
**12.15 "Весело живем" (12+).**
**12.30 "Уфа - любимый город!" (12+).**
**13.30 "Судьба, выбранная мной" (12+).**
**15.00 "Дружат дети на планете" (0+).**
**16.00 "Золотой фонд Башкирского ТВ"**
**16.45 "ФК "Уфа" - наша команда!" (0+)**
**17.15 "Романовы. Уфимский след"**
**18.00 "Йома" (0+).**
**18.30 "Обыкновенное чудо". Худ. фильм (12+).**
**21.00 "Содружество" (12+).**
**22.00 "Аль-Фатиха" (12+).**
**23.00 Концерт Айгуль Сагинбаевой**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.20 "Прогулка". Худ. фильм (16+).**

## 13 ИЮНЯ СУББОТА

### РОССИЯ 1

05.50 "Не сошлись характерами". Худ. фильм (12+).
07.30 "Сельское утро".
08.00 "Вести".
08.20 "Вести-Башкортостан".
08.30 "Планета собак".
09.10 "Укротители звука" (12+).
10.05 "Качество жизни".
11.00 "Вести".
11.20 "Вести-Башкортостан".
11.30 "Кулинарная звезда" (12+).
12.35 "Москва-Лопушки". Худ. фильм (12+).
14.00 "Вести".
14.20 "Вести-Башкортостан".
14.30 "Москва-Лопушки". Продолжение фильма (12+).
15.00 "Субботний вечер".
16.55 "Улица Веселая". Юмористическая развлекательная программа (12+).
17.50 "Работа над ошибками". Мелодрама (12+).
20.00 "Вести в субботу".
20.45 "Домработница". Драма (12+).
00.40 "С чистого листа". Худ. фильм (12+).
02.45 "На всю жизнь". Худ. фильм (16+).
04.40 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 Гимн Республики Башкортостан.**
**07.05, 22.30 Новости (на башк. яз.) (12+).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.15 "Энн из поместья Зеленые Крыши" (6+).**
**09.30 "Здоровое решение" (6+).**
**10.00 "КЛИО" (6+).**
**10.45 "Большой чемодан" (6+).**
**11.30 "Аль-Фатиха" (6+).**
**12.00 "Следопыт" (12+).**
**12.30, 21.30 Новости.**
**12.45 "Наука 102" (12+).**
**13.15, 17.30 "Весело живем" (12+).**
**13.30 "Автограф" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Баик-2015" (12+).**
**17.00 "Хазина". "История песни" (6+).**
**17.45 "Киностудия "Башкортостан" - 25 лет" (6+).**
**18.15 "Орнамент" (0+).**
**18.30 "Замандаш" (0+).**
**18.45 "Мелодии души" (12+).**
**19.30 "Башҡорттар" (12+).**
**20.00 "Полезные новости" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.30 "Башҡорт йыры" (12+).**
**21.00 Экономический атлас стран ШОС и БРИКС (12+).**
**22.00 "Легенды спорта" (6+).**
**23.00 Закрытие 76-го концертного сезона БГФ им.Х.Ахметова (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.20 "Патруль". Худ. фильм (16+).**

## 14 ИЮНЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### РОССИЯ 1

05.50 "О бедном гусаре замолвите слово". Мюзикл.
09.10 "Смехопанорама Евгения Петросяна".
09.40 "Утренняя почта".
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.10, 03.50 "Россия. Гений места" (12+).
12.10 "Смеяться разрешается".
14.00 "Вести".
14.20 "Живой звук". Конкурс караоке.
16.15 "Тили-тили тесто". 4 серии. Мелодраматический сериал (16+).
20.00 "Вести недели".
22.00 "Воскресный вечер" с Владимиром Соловьевым (12+).
00.35 "Кино про кино". Трагикомедия (12+).
02.35 Торжественная церемония закрытия XXVI кинофестиваля "Кинотавр".

### БСТ

**07.00 Гимн Республики Башкортостан**
**07.05 Новости (на башк. яз.) (12+).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Йома" (0+).**
**08.30 "Энн из поместья Зеленые Крыши" (6+).**
**10.00 "Физра. Спортблог спецкора" (6+).**
**10.15 "Перекличка" (6+).**
**10.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Фанташ" (0+).**
**11.00 "Ал да гөл" (0+).**
**11.15 "Байтус" (6+).**
**11.30 "Сулпылар" (0+).**
**11.45 "Алтын тирмә" (0+).**
**12.30 Новости недели (на башк. яз.) (0+).**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Үткән ғүмер" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.00 "Китай: правила для жизни", "Живые святыни Индии" (12+).**
**16.00 "Дорога к храму" (0+).**
**16.30 "Девушка с монистами" (12+).**
**18.30 "Замандаш" (0+).**
**18.15 "Мир настоящих мужчин" (12+).**
**18.30 "Историческая среда" (6+).**
**19.00 "Быстрее! Выше! Сильнее!" (6+).**
**19.15 "Любимое дело" (12+).**
**19.45 "История признания" (6+).**
**20.00 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).**
**20.45 "Мать". Худ. фильм (12+).**
**21.30 Новости недели.**
**22.15 "Специальный репортаж" (12+).**
**22.30 "Баик-2015" (6+).**
**23.30 "Вечер.com" (12+).**
**00.15 "Свидание с джазом" (12+).**
**00.45 "Дерзкие дни". Худ. фильм (12+).**

*СӘНҒӘТ ДОНЪЯҺЫНДА*

# "БЕРҘӘМЛЕК"ТӘ БЕРЛӘШТЕК

**Өфөлә "Берҙәмлек" Халыҡ-ара милли мәҙәниәттәр фестивале башланды. Сара республика ҡала һәм районларында 9 июнгә тиклем уҙа. Фестивалгә ШОС һәм БРИКС саммиттарында ҡатнашыусы илдәрҙән: Бразилиянан, Һиндостандан, Ҡытайҙан, Көньяҡ Африка Республикаһынан, Ҡаҙағстандан, Ҡырғыҙстандан, Үзбәкстандан, Тажикстандан һәм Рәсәйҙән 200 ҡунаҡ килде.**

Фестиваль рәсми рәүештә Бәләбәй ҡалаһында асылды. Сара дүрт көн дауам итә һәм Октябрьский, Өфө ҡалалары, Бәләбәй, Туймазы һәм Дәүләкән районлары буйлап уҙҙы. Ҡунаҡтар 5 июндә Октябрьскийҙа Ҡурай байрамын тамаша ҡылды. Гала-концертта улар легендар башҡорт ҡурайы менән таныштылар. 6-7 июндә районларҙа үткән һабантуй байрамдарынан һуң коллективтар Өфөгә ҡайта. Гала-концерт 8 июндә "Башҡортостан" дәүләт концерт залы алдындағы майҙанда була.

-Беҙ бик тулҡынланабыҙ. Мәҙәниәтебеҙҙе күрһәтә алыуыбыҙ өсөн генә түгел, шулай уҡ Рәсәй, төрлө илдәрҙән килгән коллективтарҙың вәкилдәре менән тәжрибә алмашыу мөмкинлеге булыуына шатбыҙ. Фестивалдә барыһына ла билдәле Бразилия самбаһын, карнавалын, шулай уҡ илебеҙҙең көньяғындағы мәҙәниәтте күрһәтәсәкбеҙ, - тип билдәләне "Cadica Dance Company" ансамбленең продюсеры Нильсон Болгерони.

Башҡортостандағы фестивалдән һуң Һиндостан, Ҡытай һәм Бразилия коллективтары Бөйөк Новгородҡа "Садко" һөнәрҙәр фестиваленә юлланасаҡ.

# "КӘКҮК СӘЙЕ"НДӘ ҠУНАҠТА

**Башҡортостандың Нуриман районында "Кәкүк сәйе" икенсе республика этно-фестивале уҙғарылды. Байрамда 500-ҙән ашыу кеше ҡатнашты. Фестиваль сиктәрендә "Кәкүк карнавалы", "Иң яҡшы башҡорт сәйе рецебы", "Иң яҡшы кәкүк бейеүе", "Иң яҡшы кәкүк йыры", "Иң яҡшы кәкүк костюмы", "Иң яҡшы кәкүк бутҡаһы рецебы" конкурстары ойошторолдо.**

Нуриман районының мәғариф учреждениелары күргәҙмәләр әҙерләне, тарихи-мәҙәни үҙәктәр "Кәкүк сәйе" йолаһын күрһәтте, фольклор коллективтары ҡунаҡтарҙы йыр-бейеүҙәр менән шатландырҙы. Ғафури районы Сәйетбаба ауылының тарихи-мәҙәни үҙәге байрамдың мәҙәни өлөшөн тәҡдим итте. Шулай уҡ шифалы үләндәр буйынса белгес Гордеевтың семинары булды, белгестәр кәңәштәр бирҙе. Барыһы ла тәмле үлән сәйҙәре, бал һәм милли ризыҡ менән һыйланды.

"Республикала Кәкүк сәйе кеүек байрамдарҙы һаҡларға һәм үҫтерергә, Рәсәйҙең башҡа төбәктәренән ҡунаҡтарҙы ҡабул итергә кәрәк", - тип билдәләне Дәүләт Думаһы депутаты, Башҡортостан халыҡтары ассамблеяһы Советы рәйесе Зөһрә Рәхмәтуллина.

Фестиваль ҡунаҡтары араһында Нуриман районы ветерандары һәм Өфө ҡалаһынан Өсөнсө быуын университеты тыңлаусылары бар ине. Сарала ҡатнашыусы балалар өсөн анимациялы программа әҙерләнгәйне. Башҡортостандың Туризм үҙәге социаль приюттарҙағы балалар фестивалдә ҡатнашһын өсөн махсус программа төҙөгән. Балаларҙың фотоэштәре махсуслаштырылған күргәҙмәгә индерелде.

"Фестиваль артабан да үҫешер һәм Нуриман районының туристик брендына әүерелер, тип ышанабыҙ", - тип билдәләне Нуриман районы хакимиәте башлығы Азамат Носратуллин.

# ЗӨҺРӘНЕҢ ЕҢЕҮЕ



**Яҙыусы Зөһрә Бураҡаеваның "Гүзәл" исемле хикәйәһе Мәскәүҙә үткән "Яңы әҙиптәр" халыҡ-ара конкурсында өсөнсө урын яуланы. Бәйгене "Дикси Пресс" нәшриәте ҡарамағындағы бер үк исемдәге әҙәби агентлыҡ ойоштторған.**

Зөһрә Бураҡаеваның хикәйәһе конкурста ҡатнашыусыларҙың "Иҫтәлеккә фотоһүрәттәр" йыйынтығында донъя күрәсәк. Авторҙарға конкурс лауреаттары дипломдары, аҡсалата бүләк һәм "Яңы әҙиптәр-2016" бәйгеһендә ҡатнашыу хоҡуғы биреләсәк.

Зөһрә Бураҡаева - прозаик, тәржемәсе, сценарист, публицист, драматург, Башҡортостандың һәм Рәсәйҙең Яҙыусылар союзы ағзаһы. Документаль, анимациялы, нәфис фильмдарҙың сценарий авторы, башҡорт телендәге "Хыялый япраҡ" хикәйәләр йыйынтығы, тәржемәләр китабы авторы. Рәми Ғарипов исемендәге әҙәби премия, Шәйехзада Бабич исемендәге республика йәштәр премияһы лауреаты. Төрлө концерттарҙың, театрлаштырылған тамашаларҙың, мәҙәниәт һәм әҙәбиәт эшмәкәрҙәренең юбилей кисәләренең, Башҡортостан юлдаш телеканалы проекттарының сценарий авторы.

# ДРАМАТУРГЛЫҠҠА САҠЫРЫУ

**11-14 июндә Башҡортостандың йәш драматургтары һәм режиссерҙары Өфөлә үтәсәк икенсе семинар-лабораторияға йыйыласаҡ.**

Әҙәбиәт йылында семинарҙа ҡатнашыуға 30-ҙан ашыу ғариза килгән, эксперт комиссияһы шуларҙан 12 авторҙы һайлап алған, тип хәбәр иттеләр Мәҙәниәт министрлығынан. Улар араһында театр берләшмәһендә билдәле драматургтар Шәүрә Шәкүрова, Мөнир Ҡунафин, Игорь Яковлев, Анна Ерошина, Дамир Йосопов бар.

Башҡорт һәм рус телдәрендә яҙылған ижади эштәр өлкәндәр, үҫмерҙәр, балалар өсөн пьесалар йүнәлештәре буйынса ҡабул ителә. Конкурсҡа эштәрҙе 1 июнгә тиклем dramaturgiya@inbox.ru почтаһына ебәрергә кәрәк ине. Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың танылған театр эшмәкәрҙәре драматургтарға ҡыҫҡа курстар уҙғара. Семинар программаһында пьесаларҙы уҡыу һәм тикшереү, оҫталыҡ дәрестәре, эксперттар менән айырым дәрестәр үткәреү ҡаралған. Эксперттар сифатында билдәле тәнҡитсе Павел Руднев, театр һәм кино режиссеры Ольга Субботина, шулай уҡ Өфө дәүләт сәнғәт академияһы уҡытыусылары Айһылыу Сәғитова менән Рида Буранова саҡырылған. Заманса драматургия һәм режиссура республика семинары Мәҙәниәт министрлығы, Башҡортостандың Театр эшмәкәрҙәре союзы һәм Заманса драматургия үҙәге булышлығында уҙғарыла.

✓ *Әйткәндәй, пион бик йәшәмеш үсемлек, уның тамырында "йоҡоға талған" бөрөләр күп була. Үсемлектең һабағын ҡырау алһа йәки ҡороһа, ошо бөрөләр шытып сыға. Әммә тамыры һыуға бирешеп бара, артыҡ дымдан пион үлә.*



*БАҠСА*



# ПИОНЫҒЫҘ СӘСКӘЛӘНМӘҺӘ...

**Сәскә үҫтереүселәр араһында пион, башҡортса әйткәндә дөр-дөр сәскәһен яратыусылар күп. Әммә бик нескә был сәскә ҡайһы берҙә сәскә атмай йонсота. Пион үҫтереү буйынса бер нисә кәңәш биргем килә.**

Сәскәне күсереп ултыртҡанда тамырында 3-5 бөрөһө булғанды һайлағыҙ. Яҡтылыҡ яҡшы төшкән урынға ғына сәсегеҙ. Яҙын һәм көҙөн һыу йыйылып ята торған урын да пион өсөн ҡулайлы түгел. Әйткәндәй, пион бик йәшәмеш үсемлек, уның тамырында "йоҡоға талған" бөрөләр күп була. Үсемлектең һабағын ҡырау алһа йәки ҡороһа, ошо бөрөләр шытып сыға. Әммә тамыры һыуға бирешеп бара, артыҡ дымдан пион үлә. Төүге йылда пиондар тамыр йәйә, шуға уларҙың һабағы ҡуйы булып шытмауы ла бар. Әйткәндәй, сәскәнең тамыры 3-4 йыл эсендә саҡ ныҡып етә. Тап ошо мәлдән улар яҡшылап сәскә ата башлаясаҡ. Төүге йылда уҡ сәскә атһын, тип, оло пион үсемлеге сәсмәгеҙ, ул аҙаҡҡы тапҡыр сәскә атып, ҡороуы ла бар. Пиондың тамырын 5-6 сантиметр тәрәнлектә ултыртығыҙ, унан тәрәнерәк ултыртылһа, сәскә атмаясаҡ. Пион сәскәлеге ағастар, ҡыуаҡтар, башҡа эре үсемлектәр эргәһенән йырағыраҡ урынлашһын, сөнки уларҙың тамырҙары сәскәләргә үҫеп китергә ҡамасаулаясаҡ. Пионды икенсе урынға күсереп ултыртҡанда, уның тамырын өлөштәргә бүлегеҙ. Юғиһә, сәскә оло ҡыуаҡтың запасы иҫәбенә туҡланып йәшәй һәм яңы тамыр системаһы үҫешмәй, һөҙөмтәлә, пион насар сәскә ата. Тамырҙарҙы бүлеү август аҙағында - сентябрь башында башҡарыла.

**Сәскәләр эре булһын өсөн:**

- сәскәләрҙе ултыртҡан ваҡыттан 4 йыл самаһы ваҡыт үтергә тейеш;
- үсемлекте даими рәүештә туҡландырып тороу кәрәк, миҙгеленә 3-4 тапҡыр минерал ашламалар менән ашлағыҙ. Тәжрибәле баҡсасылар әсетелгән тиҙәк менән дә ашлай, ул магазиндан һатып алынған ашламаларға ҡарағанда, яҡшыраҡ һөҙөмтә бирә, тиҙәр. Пионды беренсе йылдан уҡ ашлай башлайҙар, сөнки ҡырҡып алынған тамырҙарҙа файҙалы матдәләр бик аҙ була. Иртә яҙҙан алып июнь аҙағына тиклем ашларға була;
- сәскәгә тумаланған бөрөләрҙе кәрәгенсә генә ҡалдырып, ҡалғандарын өҙөп ташлағыҙ;
- сәскә атыр алдынан һәр ҡыуаҡтың тупрағын йомшартып, 3-4 биҙрә һыу ҡойоғоҙ;
- алһыу төҫтәге пиондың сәскәләрен асылып етмәҫ элек, ә аҡ төҫтәгеһен сәскәләр тулыһынса асылып бөткәс ҡырҡалар.

**Пиондар үңәҙ менән ауырымаһын өсөн:**

- йыл һайын тупраҡты көл, эзбиз оно менән туҡландырығыҙ;
- зарарланған япраҡтарҙы, ботаҡтарҙы ҡырҡып ташлап тороғоҙ;
- көҙөн сәскәнең ботаҡтарын ҡырҡығыҙ;
- сама менән азот ашламалары өҫтәгеҙ;
- профилактика өсөн составында баҡыр булған препараттар, марганцовка, "Фундазол", "Максим", "Гамаир", "Глиокладин" кеүек фунгицидтар ҡулланығыҙ.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

*КӘҢӘШ-ТӨҢӘШ*

## КЕЙЕМЕНДЕ ҮТЕК ӨТҺӘ



Ҡабаланып кейем үтекләгәндә яңылыш эҫе үтек баҫып, өтөп ебәргән осраҡтар була. Һуңынан яратып кейгән, йә булмаһа яңы ғына һатып алған матур кейемде ташларға йәлләп, өтөлгән урынын йәшереп ҡуйырға маташалар. Шуға күрә, төрлө туҡымаларҙа үтектән ҡалған тимгелде бөтөрөү буйынса бер-нисә кәңәш тәҡдим итмәксебеҙ.

Бер төҫтәге кейемдәге үтек табын бөтөрөү өсөн уны бер нисә тамсы нашатыр спирты ҡушылған водород перекисы менән еүешләп, ҡояшҡа элеп ҡуйырға кәрәк. Ә бына сағыу төҫлө кейемде башта ҡул менән ышҡып алырға, шунан бураның (натрий тоҙо) көсһөҙ иретмәһе менән еүешләп, ҡояшта киптерергә. Һйалма ебәк кейемдәге үтек эҙен - денатурат, аҡ төҫтәге кизе-мамыҡ туҡыманан тегелгән әйберҙе хлорлы эзбиз иретмәһе (бер стакан һыуға 5-6 грамм эзбиз һалырға) менән һөртөп, һыуҙа яҡшылап сайҡатырға тәҡдим итеlә. Етен һәм кизе-мамыҡ туҡыманан тегелгән аҡ күлдәк, ашъяулыҡ, майлыҡ һәм таҫтамалды таҙартыу өсөн һыуға әсегән һөт ҡойоп (1:1), әйберҙе төнгөлөккә еберергә һалырға кәрәк. Бына ошондай ябай ғына ысулдар ярҙамында яратҡан әйберҙәрҙә ҡалған үтек эҙен бөтөрөп була.

Үтек йөҙөндә һарғылт, ҡытыршы ҡуныҡ барлыҡҡа килгән осраҡта ла уны таҙартыу әмәлен табырға мөмкин икән. Иң ябай ысул - шырпы ҡабының ситендәге көкөрт менән ҡырып, йомшаҡ сепрәк менән һөртөп алыу. Тағы ла мамыҡты аш һеркәһенә манып алып, үтек йөҙөн һөртөргә була. Яҡшыраҡ таҙартыу өсөн аш һеркәһенә нашатыр спирты өҫтәргә мөмкин. Әммә был осраҡта үтек һыуынған һәм электр селтәренә тоташтырылмаған булырға тейеш. Ҡағыҙға тоҙ һибеп, ҡыҙған үтек менән бер нисә тапҡыр өҫтөнән йөрөтөп алыу уның көйгән бөтөрөргә ярҙам итә. Әгәр ҙә аңғармаҫтан ҡыҙған үтекте полиэтилен пакет өҫтөнә ҡуйһағыҙ, үтек һыуынғанын көтөп тороғоҙ һәм йөҙөн ацетон менән һөртөп алығыҙ.

Үтек йөҙөн таҙартыу буйынса килтерелгән бихисап кәңәштәр араһында наждаклы ҡағыҙ ҡулланырға ла тәҡдим ителә, ләкин уның менән үтек йөҙөн ышҡырға һис ярамай. Сөнки наждаклы ҡағыҙ үтек йөҙөндәге ҡуныҡты ғына ҡырып төшөрмәй, ул үтеккә зыян да килтерә - сыймаҡланып, тигеҙһеҙләнеп бөткән үтек кейем үтекләгәндә ҡыйынлыҡтар тыуҙырыуы бар.

## СӘЙНҮКТЕҢ ЮШҠЫНЫН ТАҘАРТЫУ



Сәйнүктең юшҡынын таҙартыу өсөн һыуға һеркә ҡушып ҡайнатырға, уны түгеп, яңынан һыу алып, сода менән ҡайнатып түгергә кәрәк. Һеркә урынына лимон кислотаһы ҡулланырға мөмкин, уны 2-4 балғалаҡ күләмендә һалырға була. Шулай уҡ, артыҡ ныҡ юшҡын ултырмаған сәйнүктәргә сода һалып, 10 минут көткәндән һуң, ышҡып алыу ярҙам итә.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1436 һижри йыл.*

| Июнь (Шәғбан) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 8 (21) дүшәмбе | 3:13 | 4:43 | 13:30 | 20:16 | 21:46 | 23:06 |
| 9 (22) шишәмбе | 3:13 | 4:43 | 13:30 | 20:17 | 21:47 | 23:17 |
| 10 (23) шаршамбы | 3:12 | 4:42 | 13:30 | 20:18 | 21:48 | 23:18 |
| 11 (24) кесе йома | 3:12 | 4:42 | 13:30 | 20:19 | 21:49 | 23:19 |
| 12 (25) йома | 3:11 | 4:41 | 13:30 | 20:19 | 21:49 | 23:19 |
| 13 (26) шәмбе | 3:11 | 4:41 | 13:30 | 20:20 | 21:50 | 23:20 |
| 14 (27) йәкшәмбе | 3:11 | 4:41 | 13:30 | 20:21 | 21:51 | 23:21 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙән алынды.*


*ИҒТИБАР*

Һеҙҙе Өфөлә велосипедтарҙы ҡуртымға алып тороу һәм ремонтлатыу буйынса яңы асылған **"ВелоЦентр"** үҙәгендә көтәбеҙ. Һеҙҙең ҡарамаҡта:

- ➔ **яңы велосипедтар;**
- ➔ **уңайлы хаҡтар;**
- ➔ **сифатлы ремонт;**
- ➔ **бүләктәр.**

Килегеҙ! "Бәйләнештә" сайтында **vk.com/velocenter_ufa** төркөмөнә ҡушылығыҙ.

**Беҙҙең адрес:** переулок Пархоменко, 6-сы һанлы йорт.

Бәйләнештәр өсөн телефон:
**+7 (963) 900-99-66,**
**+7 (987) 14-666-35,**
**+7 (937) 304-74-89**


## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Өфө районы Шамонин мәктәбе уҡыусыһы, ҡәҙерле туғаныбыҙ
**Светлана Әхәт ҡыҙы ЮЛБИРҘИНАНЫ**
тыуған көнө менән ихлас ҡотлайбыҙ! Унған һәм яҡшы күңелле кеше - Азат кейәү менән ҡорған донъяғыҙ гел шулай нурлы, ҡотло булһын; ҡыҙығыҙ Азалинаны ла үҙегеҙ кеүек итағәтле, һөнәрле, уңған итеп тәрбиәләгеҙ. Йортоғоҙға - ырыҫ, ғаиләгеҙгә - ныҡлыҡ, йән-тәнегеҙгә шифа теләйбеҙ.

**Фәүзиә инәйегеҙ менән Гөлфиә һеңлегеҙ Мөхәмәтшиналар.**

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**8 июнь "Серле көршәк"** (З. Биишева), хикәйәт. Башлана 11.00

**9 июнь "Алтын асҡыс"** (А.Толстой), музыкаль мажара. Башлана 11.00

**10 июнь "Белмәсйән мажаралары"** (Н. Носов), әкиәт. Башлана 11.00

**11 июнь "Итекле бесәй"** (Ш. Перро, В. Гонзенко), әкиәт. "Химиктар" мәҙәниәт һарайы. Башлана 11.00

**15 июнь "Итекле бесәй"** (Ш. Перро, В. Гонзенко), әкиәт. "Орион" мәҙәниәт һарайы. Башлана 10.30, 12.00

**16 июнь "Алтын асҡыс"** (А.Толстой), музыкаль мажара. "Химиктар" мәҙәниәт һарайы. Башлана 11.00

**17 июнь "Итекле бесәй"** (Ш. Перро, В. Гонзенко), әкиәт. Башлана 11.00

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**8 июнь "Нух кәмәһе"** (У. Хуб), ғаилә өсөн тамаша. Башлана 11.00

**9 июнь "Чиполлино"** (Дж. Родари), мажара. Башлана 10.00, 12.00

**10 июнь "Чиполлино"** (Дж. Родари), мажара. Башлана 11.00

**11 июнь "Чиполлино"** (Дж. Родари), мажара. Башлана 11.00

**16 июнь "Аладдин"** (И. Казакова), әкиәт. Башлана 11.00



Дүрт тиҫтә йыл аралашып йәшәгән ғаилә дуҫыбыҙ Моратов Юлай Хәким улының тормош иптәше Айһылыу Солтан ҡыҙының арабыҙҙан китмәгәндә китеп барыуы айҡанлы уның һәм уның яҡындарының ҡайғыһын ысын күңелдән уртаҡлашабыҙ. Алсаҡ йөҙлө, киң күңелле һәм иҫ киткес ҡунаҡсыл кеше булды Айһылыу. 1969 йылда Сибай педагогия училищеһын йәйнә биш йылдан һуң Стәрлетамаҡ педагогия институтын тамамлап сыҡҡан уҡытыусылар ҙа ошо фекергә мотлаҡ ҡушылыр. Ауыр тупрағың еңел, йәнең йәннәттә булһын, Айһылыу!

**Донъя бер мосафирханалыр, инсан да рухтар ғәләменән, әсә ҡарынынан, балалыҡтан, йәшлектән, ҡартлыҡтан, ҡәбер ғәләменән әхирәткә күсеп киткән бер юлсылыр. Ауыр тупрағы еңел булһын мәрхүмәнең.**

**Ғәлиә һәм Самат Мөхәмәтйәновтар, Мәүлиҙә һәм Кәбир Яҡуповтар ғаиләләре, Өфө ҡалаһы.**

ӘЙТЕШ

# НИҢӘ ҺАМАН БЕҘ ЯРЛЫБЫҘ

## Йәшәһәк тә бик бай илдә?

**Гәзитебеҙҙең 18-се һанынан Йәнһылыу менән Кәфә сәсән әйтеште дауам итте. 22-се һанда Кәфә сәсән Йәнһылыуға шундай фекерҙәрен төбәгәйне:**

Әйләнәм дә тағы ҡайтам
Асыл тигән төшөнсәгә.
Үҙ асылын һаҡлағандар
Әүерелмәй күшексәнгә.
Асыл башы тәрбиәлә,
Ә нигеҙе рухта ята.
Ә милләтте тәрбиәләп
Була микән, "духтыр апай"?

**Йәнһылыуҙың Кәфә сәсәнгә әйткәне:**

Күшексәндәр, өшөксәндәр, үсексәндәр беҙ түгел.
Тик тулҡындар өҫкә ауһа, төшөнкөлөнә күнел.
Тормош бит, төрлө саҡ була, көндәр ҙә гел аяҙ тормай.
Ә Хоҙайҙың һынауҙарын бәләсниктәр үтә алмай.
Тәмле-татлы, комфорт, байлыҡ йәнгә мина, тинең минә.
Красиво жить не запретишь. Шулай бит, ни генә тимә.
Яньял-низағ, хәмер-һыра, аҙғынлыҡ зинаһы мина.
Хаҡ Тәғәлә ҡанундарын зинасылар боҙа-емерә.
Ир - ир, бисә - бисә менән ғибрәт никахтарын ҡора.
Эт саба, тип, бет саба шул. Беттәр хәләндә булмайыҡ,
Усаҡ түгел, беҙ бит - уҙаҡ, елгә леберҙәп тормайыҡ.
Төрлө антиһынауҙарҙы заманалар иңгә һала.
Аҡылыбыҙға килмәһәк, рух-имандан нимә ҡала?
Бына тап хәҙер кәрәк шул тәрбиәләү йәш быуынды,
Башҡорт милләте буласаҡ ҡыҙ баланы һәм уланды.
Кеше хатта көткән малын әйрәтеп ала үҙенсә,
Быуыны майырыҡ йәш быуынға мотлаҡ кәрәк тәрбиә.
Уйлап сығараһы түгел тәрбиә бирер тәғлимәтен,
Халыҡтан ташҡа баҫҡан Фәхретдин бин Ризаитдин.
Әйткән һүҙ, атҡарған эштәр, изге ниәттәр, ҡылыҡ-фиғел -
Тәрбиәгә бай өлгә был, бер нәмә лә артыҡ түгел.
Ойотмайыҡ ҡаныбыҙҙы, йоҡлатмайыҡ рухыбыҙҙы,
Илле, телле, эшле йәштәр тултырһын рәт-сафыбыҙҙы.

**Кәфә сәсәндең Йәнһылыуға әйткәне:**

Әйтешебеҙ ҡүрәм, апай, әле саҡҡа ҡыҙып бара,
Ҡыҙған саҡта һин сәсәнде, бапрубуйҡа, тыйып ҡара.
Әңгәмәбеҙ терәлгәйне тәрбиәнең темаһына
Ултырып та алдыҡ икәү Аҡмулланың кәмәһенә.
Ул бит әйткән: "Башҡорттарым, уҡыу кәрәк,
Арабыҙҙа наҙандар күп, наҙанлыҡтан ҡурҡыу кәрәк..."
Шәберәк тә әйтеп булмаҫ беҙгә маһир Аҡмулланан,
Зиһенлектә һәм шөһрәттә һәр даимда хаҡ мулланан.
Нишләһәк тә үтер инде был ғүмерҙәр дөбөр-шатыр,
Үтеүҙәрен тыйып булмай, булһаң да бит губернатор.
Күпме түгел, нисек йәшәү мөһимерәк илле-мәгәр,
Аллаһуға ни тиербеҙ, әжәл бер саҡ килһә әгәр?

**Йәнһылыуҙың Кәфә сәсәнгә әйткәне:**

Әйтеш ҡыҙҙы, тип торомбаш көйрәтәһен,
Усағына һаҙҙан ерек һөйрәтәһен.
Апайыңдан һаман әйтеш һөйләтәһең,
Матур-матур тема биреп әүрәтәһең.
Һүҙебеҙҙең башы бар, осо күренмәй,
Әйтеш әйттек, йомаҡ ҡойҙоҡ - һис иренмә.
Күп һүҙҙең ни һүҙ икәнен һин беләһең,
Һыйлы саҡта ябам ауыҙым келәһен.
Һүҙ көрәше бил көрәше һымаҡ сәмле,
Инде башҡа сәсәндәргә күсһен бәйгә.
Һин һөйләрһең: йәш булғас, мин еңдем, тиеп.
Мин - оломон, аҡыллы булғас- ҡуйҙым, тиеп.
Бапрубуйҡа, апай, тигәс, әй тырыштым -
Мәғәнә эҙләнем йәшәү һәм тормоштан.
Фанилыҡты кискән күп бәйғәмбәр заты,
Улар янында пүстәк батша - гәбәрнаты.
Хаҡ Тәғәлә алдында бер саҡ баҫһам әгәр,
Әйтермен - унда йәшәй бик шәп сәсәндәр.
Рәхмәт,ҡустым, матур әңгәмә ҡора белдең,
Ризамын - күтәрҙең бөсен һүҙҙең, телдең.
Үҙ телең - рухи әләмен, ҡулыңда үткер ҡәләмең.
Майҙанды бушатайыҡ, башҡаларҙы тыңлайыҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Йәнһылыу менән Кәфә сәсәндең әйтеше тамам. Уны, моғайын, Яғылса менән Супай сәсәндәр дауам итер. Өшәрә менән Айыҡтужа, Йәнһылыу менән Кәфә сәсәндәрҙең әйтештәре гәзит уҡыусыларҙа ниндәй фекерҙәр уятты икән - шул хаҡта ла белергә теләр инек. Бәйгелә әйтеш ҡорорға теләүсе яңы авторҙарҙы көтәбеҙ. Улар ҡарамағында - СМС өсөн +7-937-835-34-74 телефоны, "Киске Өфө"нөң электрон почтаһы kiskeufa@ufacom.ru. Бәйге барышын "Бәйләнештә" сайтының "Башҡорт ҡатын-ҡыҙ бите"ндә күҙәтеп барыу мөмкинлеге лә бирелә.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АҒЫУ ХӘТӘР,

## ағыуҙан ғәйбәт хәтәр

Ике ауырыу бергә килһә, әжәлендең еткәне; ике йыртыҡ бергә килһә, абруйыңдың киткәне.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Камиллыҡтың ни икәнен үҙ ҡулдарың менән төҙөмәйсә белмәҫһең.

**(Гарриет Мартино).**

Маһайыусанлыҡ беҙҙең хәтер менән сәйер уйын уйнай...

**(Джозеф Конрад).**

Лайыҡлы булмағанды байлығы өсөн маҡтама.

**(Биант).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Шул тиклем бай бер кеше йәшәгән. Унын байлығы сүллектәге ҡом бөртөктәренә ҡарағанда ла күберәк булған. Ләкин һин ниндәй генә байлыҡҡа эйә булһаң да, ғүмерҙе һатып алып булмай. Был бай ҙа берҙән-бер көндә әхирәткә күскән. Йәндең кейеме булмай, был байҙың йәне лә яп-яланғас көйө Хоҙай алдына барып баҫҡан.**

**- Бында бер генә теләк тормошҡа ашырыла, - тигән Хоҙай. - Һинең һуңғы һәм берҙән-бер теләгең ни булыр?**

**- Ишетеүемсә, кешеләр ерҙә бер нисә ғүмер йәшәй аламы? - тигән бай.**

**- Эйе, ләкин һин ерҙә йәшәгәндә ҡомһоҙланып байлыҡ артынан ҡыуып, быныһ кирәһен расланың: һин үҙеңде бер таҫпыр ғына йәшәгәндәй итеп тоттоң...- тигән Хоҙай.**

**- Эйе, фани донъяла йәшәгәндә мин быға инанғайным шул, шуға типтерен йәшәп ҡалырға тырыштым. Ә әхирәткә күсҡәс, күрәм, йәндәр яңынан ергә йәшәргә ҡайтарыла, - тигән бай.**

**- Һәр кем икенең беренен һайлай ала, - тигән Хоҙай. - Һин дә мәңгелек тормошто һайлай алаһың, ләкин хәйерселектә йәшәйәсәкһең...**

**- Ни өсөн?- тип аптыраған ерҙә туплаған байлығына кире ҡайтып, мәңге йәшәргә иҫәп тотҡан бай.**

**- Сөнки ҡомһоҙланып байлыҡ туплау гонаһын юяһың бар. Ә уны аҙағынаса юйыу өсөн һиңә миллиард ғүмер кәрәгәсәк, - тигән Хоҙай.**

**- Улайһа, хәйерсе булып йәшәүҙән башҡа тағы нимәне һайлай алам? - тип һораған бай.**

**- Һинең бер бөтөнөң фанилыҡта туплаған байлығың тураһындағы хәтерҙе һаҡлай, ул хәтерҙән, йәғни гонаһтан ҡотолоу өсөн һинең бер бөтөнөң миллиард өлөшкә бүленә ала...**

**Һайлай ала торған юлдың икеһе лә оҡшамай байға, ләкин ул ҡасан да булһа байлығына ҡайтырға өмөт итеп, һуңғы юлды һайлай һәм миллиард өлөшкә бүленеп, юҡҡа сыға...**

**Был кеше шулай Йәшәйеш Ҡануны тураһындағы белемгә эйә булаһы урынға, байлыҡты өҫтөн күргән һәм Хоҙай алдына юйылмаҫ гонаһлы булып барып баҫҡан..."**

АФАРИН!

# ФИЛЬМДАРЫБЫҘ БАР...



## тамашасылар кәрәк

**Яңыраҡ режиссер Айнур Асҡаровтың фильмдарын күрергә тура килгәйне. Үҙем 1-се категориялы киномеханик, ауылымда 22 йыл буйына кино күрһәтеүсе булып эшләнем. Әлеге мәлдә хаҡлы ялдамын. Шуға ла районыбыҙ ауылдарына башҡорт киноһы килеүен тулҡынланып ҡабул иттем.**

1967-1968 йылдарҙа Бәләбәй ҡалаһында киномеханик һөнәрен үҙләштереп ҡайттым. Ул ваҡытта клуб иҫке генә, утын яғып йылытабыҙ. Шәмбе, йәкшәмбе кино ҡуябыҙ, үҙебеҙ ял да итә алмайбыҙ. Өҫ ауылға - Ҡарайған, Урманбишҡаҙаҡ, Ярбишҡаҙаҡҡа аҙнаһына ике таҫпыр Петровский киноселтәренән фильмдар ҡалдырып китә торғайнылар. Үҙ-ара киноларҙы алмаштырып алабыҙ, кем нисек булдыра ала, шулай ташыйбыҙ. Бер ваҡыт "Спартак" киноһын Ишәй менән Урманбишҡаҙаҡ ауылына бер көнгә генә бирҙеләр, етмәһә, ул 2 сериялы. Ишәй беҙҙән 15 саҡрым алыҫлыҡта. Киноның 1-се серияһын башта Ишәйҙә ҡуйҙылар, ирем Рәфис Рәшитов, көтөп тороп, беларус менән Торатау аша тураға сығып, сәғәт 10-ға алып килеп еткерҙе. Йәй көнө, халыҡ күп, ултырырға урын да юҡ. Мин билет һатып, 1-се серияны әйләндерә торҙом, ирем унын 2-се серияһы артынан китте. Берәүҙә ҡайтып китмәне, һуң булып китеүгә ҡарамаҫтан, уныһын да ҡаранылар. Төшөмлө киноларҙы ике ауылға бер көнгә генә бирә инеләр шул. Ул ваҡытта һинд кинолары "Господин 420", "Бродяга" менән айлыҡ планды бер көндә тултырырға мөмкин ине. Нисә таҫпыр ҡуйһаң да, зал туп-тулы була торғайны. "Еңмеш"тә һүрәтләнгән "Танцор Диско", "Танцуй, танцуй" тигән киноларҙы ла ҡуйҙым, тик беҙ улай билетты йоморткаға алыштырмай инек. Комедия булғас, бәлки, шулай шаштырыбыраҡ та ебәргәндәрҙер. Ә, бәлки, ҡайһы бер ауылдарҙа бындай хәл дә булғандыр. Ул ваҡытта халыҡ өйҙә бикләнеп ултырманы, хәҙер генә ул киноны диванда ҡырып ятып ҡына телевизорҙан ҡарайһың.

Айнур Асҡаровтың "Әсе бал" киноһыла, "Әсә" фильмы ла оҡшаны. Тәрән мәғәнәле ижады өсөн был егеткә Урманбишҡаҙаҡ ауылы халҡы исеменән рәхмәт белдерәм. Фильмдарҙа уйнаусы артистарҙы лә бик оҡшаттым, килештереп уйнайҙар, башҡорт телендә аңлайышлы итеп һөйләшәләр. Башҡортса бынамын тигән фильмдар төшөрөүсе йәштәребеҙ бар икән, әммә уларҙың тамашасыһы ла булырға тейеш. Ошондай шәп киноларҙы районға алып килеп күрһәттеләр, әммә халыҡ йөрөмәне. Ҡайһы бер ауылдарҙа кеше бармаҡ менән генә һанарлыҡ булған, тинеләр. Ә беҙҙә клуб тулы булды, сөнки мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре өй һайын билет һатып, халыҡҡа аңлатып йөрөнө. Уларға ла рәхмәт. Ә Айнурҙан тағы ла матур һәм фәһемле кинолар көтөп ҡалабыҙ.

**Фәниә РӘШИТОВА.**
**Ишембай районы**
**Урманбишҡаҙаҡ ауылы.**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Азамат ӘБҮТАЛИПОВ,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты -
5 июнь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5010
Заказ 2574